ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 февраль (шаҡай) 2025

№7 (1151)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм йәмәғәт! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән апрелгә тиклем, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Булыр илдең балалары**
бер-береһенә батыр тиер

2-3

**Рухы ныҡлы халыҡты...**
бер ниндәй тормош ауырлығы ла бөгә алмай

8-9

**Битарафлыҡ утрауында йәшәүсе...**

10-11

**Шундай осоусыбыҙ бар!**

12

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Ир балала нисек ир-егетлек сифаттары тәрбиәләргә, нисек уның күңеленә Атайсалға тоғролоҡ, төп йорт хужаһы, ырыуҙы дауам итеүсе тойғоларын һалырға?



***Хәлил ХӘМЗИН, В.И. Лениндың йорт-музейы директоры, фехтование буйынса чемпион улдар тәрбиәләп үҫтергән атай. Өфө ҡалаһы:*** Баланың мауығыуы, алдына ҡуйған маҡсаты булырға тейеш. Был - бала тәрбиәләгәндә төп принцип. Игеҙәк Асҡар менән Эрнст улдарымды спортҡа бәләкәйҙән ылыҡтырҙыҡ. Үҙем мәктәптә уҡыған саҡта хоккей менән мауыҡтым, үҫмерҙәр командаһы составында "Алтын шайба" турнирҙарында әүҙем ҡатнаштым. Ике улым да фехтование буйынса спорт мастеры, Эрнст - Рәсәй һәм Европа вице-чемпионы, Асҡар - Рәсәй чемпионы, Европа турнирҙарының күп тапҡырҙар призеры. Улар 19-сы махсуслаштырылған олимпия резервындағы балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбендә шөғөлләнде.

Баланың ваҡытын файҙалы итеп ойошторорға кәрәк, бәләкәйҙән көн режимына өйрәтеү яҡшы. Беҙ Асҡар менән Эрнстҡа компьютер артына самалап ҡына ултырырға рөхсәт иттек. Урам тәрбиәһенән ҡурсаларға тырыштыҡ. Уҡыу, мәктәптән һуң тренировкалар, өйгә эштәр - ваҡыттары ла самалы булды шул. Малайҙарға талапты ҡатыраҡ ҡуймай ҙа ярамай, шулай уҡ дәртләндереү ҙә кәрәк. Һеҙ көслө, һеҙ булдыраһығыҙ, тип әйтә килдем. Малайҙар өсөн атай өлгөһө, ир һүҙе бик мөһим. Ваҡытым булғанда, уландарым ҡатнашҡан ярыштарға, хатта күнекмәләренә лә йөрөнөм. Аҙаҡтан өйҙә, сәй артында, алыш, уның киҫкен мәлдәре тураһында мауығып һөйләшә, бәхәс ҡора инек. Етенсе класта уҡығанда Асҡар менән Эрнст бик көслө алышсыға юлыҡты. Әленән-әле теге өҫкә сыға ла ҡуя. Бер көн килеп Эрнст уны барыбыр еңде. Турнирҙы ҡарап ултыра инем, улым алдыма килеп: "Атай, мин булдырҙым!" - тине ярһып. Бына ошо инде ысын ирҙәрсә тәрбиә, мөнәсәбәт.

Каникулдарҙа йәй буйы ауылда йөрөнөләр, олатай-өләсәй тәрбиәһенән мәхрүм булманылар. Атайым Асҡар менән Эрнсты гел үҙе менән алып йөрөнө. Ун ике саҡрымға ат менән бесән сабырға барғанда юл буйына тау-урмандар, йылғалар атамалары, уларға бәйле тарих-риүәйәттәрҙе һөйләр ине ул малайҙарға. Шуға улар рухлы булып, туған телде лә белеп үҫтеләр. Сит ерҙәргә, ҡитғаларға сығып китер алдынан мин уларға гел, ҡайһы илдән, ниндәй халыҡ улдары икәнегеҙҙе онотмағыҙ, үҙ милләтегеҙҙең бәҫен төшөрмәгеҙ, тип әйтә килдем. Армияла ЦСКА системаһында хеҙмәт иттеләр.

Әлеге көндә Асҡар Сочиҙа Илһам Мамедов исемендәге үҙәктә фехтование буйынса баш тренер булһа, Эрнст Ырымбурҙа эшләй, Фехтование буйынса өлкә федерацияһы президенты итеп һайланды.

## АФАРИН!

# ЛИЦЕЙҘЫҢ ЕҢЕҮСЕ БАЛАЛАРЫ

**Өфөләге Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыһы Морат Бастанов классик шахмат буйынса Рәсәй чемпионы исемен яуланы.**



Классик шахмат буйынса Рәсәй чемпионаты финалы Сочиҙа уҙҙы. Унда 1000-дән ашыу шахматсы ҡатнашты. Турнир 9 турҙа үтте. Морат Бастанов, мөмкин булған 9 мәрәйҙең етәүһен йыйып, 17 йәшкә тиклемге егеттәр араһында беренсе урынды алды. Еңеү уға лайыҡлы награда ғына түгел, халыҡ-ара рейтингы күтәрелеүенә лә килтерҙе (+52 пункт).

- Морат шахмат менән өс йыл элек шөғөлләнә башланы. Йәш шахматсы, 100-ҙән ашыу рейтинг турнирында ҡатнашып, спорт мастерлығына кандидат исемен алды. Уның уңыш сере - ныҡышмалылыҡ, тырышлыҡ, команда рухы, - ти уның уҡытыусылары.

Әйткәндәй, Республика инженер лицей-интернаты уҡыусыларының химия, математика, физика, информатика фәндәре буйынса республика, хатта донъя кимәлендә еңеүҙәр яулауы яңылыҡ түгел. 2023 йылда, мәҫәлән, 10-сы класс уҡыусыһы Вадим Харисов Швейцарияла үткән химия буйынса Халыҡ-ара олимпиадала Алтын миҙал яулағайны. Ғөмүмән, һуңғы бер нисә йыл эсендә генә Халыҡ-ара олимпиадала 10 бала химия, информатика, стандартлаштырыу һәм метрология фәндәре буйынса - еңеүсе, Бөтә Рәсәй йомғаҡлау олимпиадаһында 20 уҡыусы еңеүсе һәм призер булды. Бындағы уҡыусыларҙың шахмат менән бик әүҙем шөғөлләнеүе, республика кимәлендәге "Белая ладья" лигаһында лицей командаһының ике йыл рәттән еңеүсе булыуы билдәле. Морат Бастанов Сочиҙағы еңеүе менән уҡыу йорто шахматсыларының данын Рәсәй кимәлендә раҫлап ҡуйҙы ла инде. Афарин, егет!

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

ЯУГИРЛЫҠ ТАРИХЫНАН

# БУЛЫР ИЛДЕҢ БАЛАЛАРЫ

## бер-береһенә батыр тиер



**23 февраль - Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан халҡыбыҙҙың бик күп тарихи сығанаҡтарҙа теркәлгән, уны бер кем дә инҡар итә алмаған боронғо һәм бай яугирлыҡ тарихы тураһында бер кәлимә еткерәйек әле уҡыусыларыбыҙға. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй. Унан һуң, тарихи хәҡиҡәтте һәр йәш быуын өсөн ҡабатлап, иҫкә алып тороу фарыз.**

Яҡшы беләһегеҙ булырһығыҙ, 922 йылда ғәрәп хәлифе Әл Моҡтадирҙың Булғар ханлығына килгән илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан үҙенең юлъяҙмаларында башҡорттарҙың яугир халыҡ булыуын, үҙҙәренең биләмәләренә рөхсәтһеҙ бер кемде лә индермәүен билдәләп үтә. Был ғына түгел, Урта Азия, Төркөстан тарафтарында иртә урта быуаттар дәүерҙәренән бирле Башҡорт илен яҡшы беләләр, Көньяҡ Уралға сауҙа юлдары һәр саҡ асыҡ була. Мәҫәлән, тарихсыбыҙ Ә.-З. Вәлиди Туған ғәрәптәрҙең мамлюктар дәүләте ғәскәрендә дан ҡаҙанған башҡорт сардарҙарын исемләп һанап сыға. Дунай буйҙарына мадъярҙар менән күсеп киткән башҡорттар ҙа венгр короләренә ғәскәри хеҙмәткә алына, улар XIII быуатта Паннонияға тиклем килеп еткән монгол ғәскәрҙәренә ҡаршы тороп, Европа илдәре халыҡтарын ҡырылып бөтөүҙән ҡурсалай. 1223 йылда Калка йылғаһы буйында монгол атлылары рус кенәздәре дружиналарын һәм ҡыпсаҡтарҙы тар-мар итә һәм кире үҙ илдәренә ҡайтырға сыға. Әммә енелеү белмәҫ монгол яугирҙарын Итил (Волга) буйының һул ярында берләштерелгән башҡорт, булғар ғәскәре ҡаршы ала; бик ҡаты алыштан һуң монголдарҙың бик аҙҙары ғына ҡасып ҡотола.

Популяр тарихсы Лев Гумилев башҡорттарҙың 1220 йылдан 1235 йылға тиклем Сыңғыҙ хан ғәскәренә даими һөжүм итеп тороуы хаҡында яҙа. Евразия далаларында, Төркиәлә, Иранда, Кавказда, Киев Русендә башҡа бер халыҡ та ул саҡта иң ҡеүәтле тип һаналған монгол армияһына шул тиклем оҙайлы ваҡыт дауамында ҡаршы тора алмай. Әлбиттә, бөйөк хан һәм уның варистары башҡорттарға ҡарата үҙенсәлекле сәйәсәт алып бара: шундай көслө, яугир халыҡҡа монгол етәкселәре хөрмәт менән ҡарай, күпмеләр ваҡыт үтеүгә үҙҙәренең союздашы итеүгә өлгәшә. Башҡорт шәжәрәләрендәге легендар Майҡы бей хандың иң яҡын кешеләренең береһе булып танала, бәғзе бер ырыуҙар үҙҙәренең орандарын, ағастарын, ҡоштарын Сыңғыҙхандың үҙенән алған, тип иҫәпләнә. Нисек кенә булмаһын, Алтын Урҙа заманындағы Башҡорт иле биләмәләре билдәле кимәлдә үҙаллылыҡҡа өлгәшкән, быны хәҙерге заман терминына яраҡлаштырып, автономияға хоҡуҡ тип әйтергә була.

Алтын Урҙа тарҡалып, ваҡ ханлыҡтар хасил булғас та, башҡорттар яугир хеҙмәтенән баш тартмай: ҡайһы бер ырыуҙар Себер хандарын үҙ хандары итеп ҡабул итһә, Ҡаҙан ханлығына хәрби хеҙмәткә ялланған башҡорттарға билдәле бер ерҙәрҙә файҙаланыу рөхсәт ителә, шуға күрә элек көнсығыш тарафында көн иткән ҡайһы бер башҡорттарҙың бер үк исем менән аталған "кесе" олоҫтары көнбайышта, Ҡаҙан ханлығына ҡараған ерҙәрҙә лә барлыҡҡа килә.

Рус дәүләте составына ингәндән һуң башҡорттарға батшалар алып барған хәрби походтарҙа ҡатнашыу мотлаҡ була. Хәрби хеҙмәт яугирҙан ҙур физик көс, таһыллыҡ, ҡорал менән оҫта эш итә алыуҙы, алыш барышында арҡадаштарын ҡурсалай белеүҙе талап итә. "Батыр яуҙа һынала" тигән әйтем билдәле. Хәрби походтар, яуҙар батырҙарҙы тыуҙыра. Башҡорттар Рәсәй алып барған һуғыштарҙа даими ҡатнаша, ә уларҙың иҫәбе-һаны юҡ. Мәҫәлән, мәшһүр Алдар батырҙы белмәгән башҡорт юҡтыр ул. Алдар Иҫәкәев - 1695-1696 йылдарҙа Ҡырым һәм Азов походтарында ҡатнашып, батша Пётр I ҡулынан дәүләт наградаһы һәм тарханлыҡ грамотаһы алған яугир. Заманында ҡаршы ике яҡ алышҡа инер алдынан һәр яҡ үҙ батырын ғәскәр алды-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?** ***Ир балала нисек ир-егетлек сифаттары тәрбиәләргә, нисек уның күңеленә Атайсалға тоғролоҡ, төп йорт хужаһы, ырыуҙы дауам итеүсе тойғоларын һалырға?***



***Урал МОРТАЗИН, ике ул атаһы, бейеүсе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы. Өфө ҡалаһы.*** Мин үҙем атай абруйы юғары булған ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫтем, шуға малайҙар өсөн өйҙәге ысын ирҙәрсә мөхит, мөнәсәбәт бик мөһим икәнен яҡшы беләм. Атай улына һәр йәһәттән өлгө, абруй булырға тейеш. Шул саҡта уның һынаулы бер ҡарашы ғына ла ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Төрлө һөнәргә өйрәтеү ҙә - атай бурысы. Тимәк, уның үҙенә эш белеү мотлаҡ. Иман, рух та бала күңеленә үҙенән-үҙе инмәй. Тарихыбыҙҙы, батырҙарыбыҙҙы белеп үҫергә тейеш тормош тотҡаһы буласаҡ малайҙар.

Хәҙер "Кайҙа ысын ир-егеттәр?" тип оран һалыу модаға инеп китте. Улар бер ҡайҙа ла юҡ булмаған - тыуалар, арабыҙҙа йөрөйҙәр, тик тейешле тәрбиә алмағандар. Малайҙар балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә ҡатын-ҡыҙҙар ҡулында. Ни өсөн шулай, нишләп ир-егеттәр уҡытыусылыҡҡа бармай хәҙер? Яуабы ябай ғына - эш хаҡы түбән. Көслө затҡа ғаиләһен аҫрарға, балаларына лайыҡлы тормош шарттары булдырырға кәрәк таһаһа.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ветеран-яугирҙар күпләп килгән мәғарифҡа, беҙҙең атайҙар, унан һуңғы быуын улар мәктәбен үткән. Ир уҡытыусыһының өлгөһө, үҙен тотоуы, тәртибе - малайҙар өсөн барыһы ла мөһим. Ә бөгөн хәл башҡа. Уны нисектер төҙәтергә кәрәк. Күңелемдә малайҙар өсөн шәхси мәктәп асыу хыялы бар. Унда уҡытыуҙың дөйөм программаһына ингән фәндәрҙән тыш, бейеү ҙә, уҡтан атыу ҙа, һыбай йөрөү ҙә, көрәш тә булырға тейеш. Башҡорт боронда ат менән айырылғыһыҙ булған. Уны тотоп, һыйпап ҡарау, һыбай менеп йөрөү хәҙерге балаларҙа ҡан хәтерен уятыу, онотола барғанды иҫкә төшөрөү өсөн бик шәп дауа бит ул. Ә бейеү ихтыяр көсө тәрбиәләй, дөрөҫ йәшәргә өйрәтә. Глобалләшеү дәүерендә үҙебеҙҙең тамырҙарыбыҙҙы юғалтмаҫ, малайҙарыбыҙҙы, буласаҡ милләт тотҡаларын, маҡсатлы, рухлы итеп тәрбиәләү өсөн ундай уҡыу бигерәк тә кәрәк. Асылынды беләһең икән, йәшәүе лә, башҡалар менән мөнәсәбәт ҡороуы ла, ҡуйған маҡсаттарына өлгәшеү ҙә күпкә еңелерәк.

Ике улым да әле - уҡыусы балалар, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһында уҡыйҙар. Тхэквондо секцияһында шөғөлләнеп, был көнсығыш алыштың серҙәрен үҙләштерәләр. Хәҙер инде улар тренерҙарының беренсе ярҙамсыһы, кескәйҙәргә үҙҙәре дәрес бирә. Шуға ныҡ ҡыуанам: улымдың класс етәксеһе - ир-егет.

***Айбулат УРАЗБАХТИН, ике ул атаһы, эшҡыуар. Сибай ҡалаһы:*** Ғөмүмән, бала тәрбиәләүҙең нигеҙендә ябай ҙа, үтә аҡыллы ла алым ята: биш йәшкә тиклем - баланы батша урынына ҡуй, биш йәштән ун йәшкә тиклем - хеҙмәтсе рәүешендә йомша, ун йәштән һуң иң яҡын дуҫыңдай күреп, уның менән мөнәсәбәт ҡор. Биш йәшкә тиклем сабый донъяны яңы саҡ белеп та-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан биләмәһендә Р-240 трассаһының бер өлөшө дүрт һыҙатҡа тиклем киңәйтелә. Радий Хәбиров 17 февралдә Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә хәбәр итеүенсә, эштәр быйыл яҙ башлана. "Конкурс комиссияһы Р-240 юлына подрядсы иғлан итергә тейеш, сөнки яҙғыһын эштәрҙе башларға кәрәк. Был беҙҙең өсөн бик мөһим ваҡиға: Стәрлетамаҡтан Ергәнгә тиклем трасса дүрт һыҙатҡаса киңәйтелә. Беҙ федераль юлдың ошо участкаһын эшләргә тейешбеҙ", - тине республика етәксеһе.

✓Башҡортостан Үзбәкстан менән сәнәғәт кооперацияһын үҫтерергә ниәтләй. Республика Башлығы Радий Хәбиров Үзбәкстандың Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Ботиржон Асадов менән осрашыуҙа ошо мәсьәләне тикшерҙе. Хеҙмәттәшлекте яңы кимәлгә сығарырға мөмкинлек биргән берлектәге проекттар һөйләшеүҙең өҫтөнлөклө йүнәлеше булды. Атап әйткәндә, Башҡортостанда берлектәге технопарк, цемент заводы, йомшаҡ төргәктәр, газ баллондары етештереү төҙөлөшө тураһында һүҙ барҙы.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиотапшырыуҙар компанияһының генераль директоры урынбаҫары Рифат Сабитов менән осрашты. Улар республика телерадиотапшырыуҙарын үҫтереүҙе һәм республиканың Бөтә Рәсәй дәүләт телерадиокомпанияһы менән хеҙмәттәшлеге тураһында фекер алышты, тип хәбәр итә Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте. Осрашыуҙа Башҡортостанда милли тапшырыуҙарҙы һаҡлау һәм киңәйтеү мәсьәләләренә, шулай уҡ Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Ватанды һаҡлаусылар йылына арналған сараларҙы яҡтыртыуға айырыуса ҙур иғтибар бүленде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ай һайын бизнес вәкилдәре менән осрашыу ойоштора башлауҙары хаҡында белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, бындай осрашыуҙарҙың маҡсаты - эшҡыуарҙар берләшмәһе менән аралашыу, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә бизнесҡа булышлыҡ итеү. Күпселек муниципалитеттарҙа ошондай саралар уҙғарыу планлаштырыла. Радий Хәбиров эшҡыуарҙар менән күҙгә-күҙ ҡарашып эшләү, уларҙың фекерҙәрен ишетеү, хатта тәнҡитләү, ярҙам күрһәтеү өсөн һорауҙарға яуап биреүҙең мөһимлеген әйтте. Барлыҡ һорауҙар һәм күтәрелгән проблемалар ҙа иғтибарға алына.

✓Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы, танк батальонының эвакуация бүлексәһе командиры Мөҙәрис Аҫылбаев Башҡортостан Башлығы указы менән генерал Шайморатов миҙалы менән бүләкләнде. Яҡташыбыҙға дәүләт наградаһын Радий Хәбиров тапшырҙы. "Мөҙәрис Ғәфүр улы күптән яуҙа ҡатнаша, бер нисә тапҡыр наградланған. Ҡотлайбыҙ", - тине Радий Хәбиров. Хәбәр ителеүенсә, Мөҙәрис Аҫылбаев сығышы менән Күгәрсен районынан. 2024 йылда ул Мәскәүҙә Еңеү парадында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылары менән бергә ҡатнашты.

на сығарған. Бындай шәхси алышҡа иң көслө, иң йылғыр, ҡурҡыу белмәҫ яугир сыҡҡан. Был алышта йә еңәһең, йә дошман яугиры ҡулынан һәләк булаһың. Башҡорт Алдар үҙенә ҡаршы сыҡҡан черкес батырын еңеүгә өлгәшә, быны күреп торған рус яугирҙары дәртләнеп-рухланып яуға ташлана. Алдар Иҫәкәев бер үк ваҡытта - Ҡаҙағстанды Рәсәйгә ҡушыуҙа илгә ҙур хеҙмәт күрһәткән дипломат, күп телдәр белгән дәүләт эшмәкәре. Ул - халҡының азатлыҡ һөйгән асылына тоғро шәхес.

1812 - 1814 йылдарҙа башҡорт полктары Ватан һуғышында ҡыйыу алышып, Рәсәйгә баҫып ингән француз армияһын тар-мар итеүгә булышлыҡ итә. Йөҙәрләгән башҡорт батырҙары Рәсәй ордендарына һәм миҙалдарына лайыҡ була. Уларҙың исем-шәрифтәре тарихи документтарға теркәлеп ҡалдырылһа, яугирҙар командирҙарының береһенә - Ҡаһым түрәгә арнап, бик матур тарихи йыр ҙа сығарған.

XX быуат та немец фашизмы йөҙөндә СССР тип аталған ҙур илебеҙгә бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡайғы-хәсрәт, тиҫтәләрсә миллион совет кешеләренә үлем һәм ғәриплек, ауыл-ҡалаларҙы харабаларға әйләндергән һуғыш ғәрәсәтен алып килә. Рух ныҡлығы, халыҡтар берҙәмлеге, иҫ киткесле фиҙакәрлек, быға күрелмәгән шәхси ҡаһарманлыҡ һөҙөмтәһендә яуыҙ дошман илдән ҡыуыла һәм үҙ өңөндә дөмөктөрөлә. Башҡортостаныбыҙҙың бик күп улдары яу яландарында мәңгегә һуңғы төйәген таба. Генерал-майор Миңлеғәли Шайморатовтың данлы 112-се Башҡорт атлылары дивизияһын, меңәрләгән летчиктарҙы, танкистарҙы, артиллеристарҙы, рядовой уҡсыларҙы, автоматсыларҙы, пулеметсыларҙы, ғөмүмән, республикабыҙҙан мобилизацияланып һуғышҡа алынған 710 меңдән ашыу яҡташтарыбыҙҙы, ауыр яраларҙан һәләк булып ҡалған 300 мең фронтовиктарыбыҙҙы һис бер икеләнеүһеҙ Башҡортостан батырҙары рәттәрендә күрәбеҙ. Улар хәҙер күптән фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күскән заттар. Тик уларҙы килер быуындар ҙа үҙ хәтерҙәрендә ҡәҙерләп һаҡлаһын ине. Тап үҙебеҙҙең "Урал батыр эпосында әйтелгәнсә:

*"Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,*
*Ил батыры - батырҙан,*
*Батыр ирҙән тыуыр ул;*
*Атанан күреп, уҡ юнып,*
*Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,*
*Ил эсендә үҫер ул,*
*Утын-һыуын кисер ул.*
*Батырҙан батыр тыуғанда,*
*Бер быуын тип һаналған*
*Илдә ғүмер үтер ул".*

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**



ный башлай. Шуға ла уны битәрләргә ярамай, кереһенсә, һөйөү менән солғап алырға, уның алдында үҙенде бәләкәй батшаның ҡоло рәүешендә тоторға кәрәк. Бишалты йәштән яман һәм яҡшы, ярай һәм ярамай төшөнсәләрен аңына һеңдереү, хеҙмәткә өйрәтеү мотлаҡ. Шулай уҡ рухи үҫешен хәстәрләй башлау ҙа зарур. Ун ике йәшенә бала шәхес булараҡ үҫеп етә. Беҙҙең алда инде - формалашҡан кеше. Уны артабан тик төрлө оҫталыҡтарға, эш алымдарына ғына өйрәтергә мөмкин. Тәрбиә ошо мәлдән тамамлана, тиһәң дә була.

Малайҙы һәм ҡыҙҙы төрлөсә тәрбиәләйҙәр. Атай улына ҡарата талапсан була. Талапсанлыҡ - үҙ баланды хисләнеп яратыуға ҡарағанда юғарыраҡ кимәлдәге һөйөү ул. Ә ҡыҙына атай кеше тик һөйөп кенә ҡарай, аҡыллым, матурым, тип әйтеп, күңелен үҫтерә. Әсәй, кереһенсә, улына ҡарата йомшаҡ була, ә ҡыҙына талапсанлыҡ күрһәтә. Ғөмүмән, малайҙар ҡырыҫыраҡ шарттарҙа тәрбиәләнергә тейеш. Шул саҡта уларҙан ысын ир-егет сыға. Әйтәйек, ҡаты түшәктә йоҡларға, иртән һалҡын душта ҡойонорға. Тәмтомдо артыҡлау ҙа файҙаға түгел.

Хәҙер ата-әсәләр улдарын ныҡ ҡурсалай. Самаһыҙ хәстәрләнгән малай тормошҡа әҙерлекһеҙ егет булып үҫә, артабан булдыҡһыҙ ир булып китә. Ул студент сағында дөйөм ятаҡта йәшәргә, үҙ тормошон ҡорорға, сикләүҙәргә күнегергә, аҡса эшләп өйрәнергә тейеш. Алдында маҡсаты булыуы ла шарт. Маҡсатһыҙ ир үҙ бәҫен тиҙ юғалта, эскелеккә һабыша, һүҙсән былағайға әүерелә, ҡатындар артынан йөрөй башлай. Ир-егет - ил-йорт һаҡсыһы (һуғышсы), ҡәлғә тотоусы. Ҡыйыулыҡ - ысын ирҙәр сифаты. Бөгөн, белеүебеҙсә, тормош баштүбән ҡуйылған. Көслө ҡатын-ҡыҙҙар ишәйгән кеүек, булдыҡһыҙ ирҙәр һаны ла арта. Бындай йәмғиәттә кеше - бәхетле, ғаилә ныҡ була алмай. Тәрбиәгә әһәмиәт бирмәү, уның асылдарын белмәү, традицияларҙы юғалтыу шундай һөҙөмтәгә килтерҙе.

Ғаилә институтының таркала барыуының төп сәбәбе ҡатын-ҡыҙҙың яйлап - ҡатын, ир-аттың ир асылын юғалтыуында икәнен онотмайыҡ.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# КӨСҺӨҘҘӨҢ АСЫУЫ КӨСЛӨ

**Евросоюз был көндәрҙә ҡаҙан кеүек ҡайнай һәм был "ҡаҙан"да береһенән-береһе үслерәк, ағыулыраҡ һәм аҡылһыҙыраҡ хөсөтсөлөк тигән яуыз план "бешә". 14-16 февралдә Германияның Мюнхен ҡалаһында хәүефһеҙлек буйынса булып үткән 61-се конференцияла 60 дәүләт һәм хөкүмәт башлығы, министрҙар, шул иҫәптән НАТО башлығы Марк Рютте, АҠШ-тың вице-президенты Джей Ди Вэнс, дәүләт секретары Марко Рубио, Евросовет башлыҡтары ҡатнашты. Рәсәйҙән унда делегация булманы.**

Һәр ваҡыттағыса, иң тәүҙә Еврокомиссия рәйесе Урсула дер Ляйен менән ГФР президенты Штайнмайер конференция эшенә тон биреү, уны үҙҙәренә кәрәкле йүнәлештә алып барыу өсөн башлап һүҙ алдылар. Тәүҙә улар теләгәнсә эш шыма ғына барҙы. Украина президенты Зеленский ҙа улар тирмәненә һыу ҡойҙо: уға украин телендә сығыш яһарға рөхсәт итмәһәләр ҙә, һәр ваҡыттағыса, уның көнбайыш союзниктарынан ярҙам һорап шыңшыуы һүҙһеҙ ҙә аңлашылып тора ине инде. Ҡоторған эт әйәһен тешләр, тигәндәй, үҙенең сығышында Зеленский былтыр Украинаның 4 мең квадрат км территорияһынан ҡолаҡ ҡағыуында Ҡушма Штаттарҙы ғәйепләне, былтырғы эштәргә ҡағылышы булмаған әлеге президент Дональд Трампты тәнҡитләп маташты. Трамп иң тәүҙә Рәсәй Президенты менән түгел, ә минең менән һөйләшергә һәм шунан һуң ғына Путинға баҫым яһарға тейеш ине, тине ул.

Киевҡа Украина конфликтын көйләү өсөн ебәрелгән АҠШ илсеһе Кит Келлог иһә оятһыҙ рәүештә башҡа илдәр мөнәсәбәттәренә ҡыҫылыуҙан, улар араһын болғау ниәтенән һис тә тартынмауын күрһәтте. Ә инде уның тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн Рәсәйгә ҡайһы бер территорияһынан баш тартырға кәрәк, тип белдереүе отставкалағы 81 йәшлек һуғыш суҡмарының ҡартлыҡ бәләһе, йәки Байден синдромы тип ҡабул ителһен, әйҙә. АҠШ менән Европа мөнәсәбәттәренә ҡағылышлы конференция тематикаһы евролидерҙар теләгән йүнәлештән үҙенән-үҙе икенсе юҫыҡҡа киҫкен боролош алды. Айырыуса АҠШ вице-президенты Джей Ди Вэнстың сығышы конференцияны ойоштороусылар өсөн көтөлмәгән шаңҡыу булды. Дональд Трамптың яҡын ярҙамсыһы һәм урынбаҫары әйтеүенсә, Европаға Рәсәй менән Ҡытайҙан түгел, ә үҙенең эске демократик проблемаларынан ҡурҡырға кәрәк. Артабан вице-президент Вэнс демократияны ҡыҫымға алыуҙа Европаны ҡаты тәнҡитләне, үҙ граждандарының фекерен һанға һуҡмауҙа ғәйепләне, ә был иһә Көнбайыш донъяһында башланған тарҡалыу күренешен тағы бер тапҡыр раҫлаусы сигнал ғына булды. Дональд Трамп үҙенең урынбаҫарының был телмәрен хуплаған.

Конференцияла сығыш яһап, Финляндия президенты Стубб Рәсәйгә һаман да теш ҡайрауын күрһәтте: Украинаны ҡайтанан баштан-аяҡ ҡоралландырырға, ә Рәсәйгә санкция баҫымын көсәйтеп, активтарын ҡулға алырға тәҡдим итһә, Германияның сит ил эштәре министры Анналена Бербок ысын мәғәнәһендә үҙенең фашистик йөҙөн фашланы: Украинаға ебәрелгән Европа ҡоралы менән ул Рәсәйҙең төпкөл территорияларын утҡа тоторға саҡырҙы. Ләкин тәбиғәт тә ғәҙеллек яҡлы, күрәһең: Европа Арктика һыуыҡтарынан дер ҡалтырай, тиҙәр; континент паникала. Газ һаҡлағыстары яртылаш буш ҡалған, сөнки быйылғы миҙгелдә газ ҡулланыу ике тапҡырға артҡан, ә хаҡтар - зәңгәр яғыулыҡҡа ла, электр энергияһына ла көнләп түгел, сәғәтләп-минутлап арта бара. Европа Рәсәй газын һағына. Шулай итеп, Мюнхендағы "хәүефһеҙлек" конференцияһы, асылда, үҙенең етди хәүеф сығанағы булыуын күрһәтте. "Көсһөҙҙөң асыуы көслө" тип халыҡ та белмәй әйтмәгән икән шул...

● Икенсе мөһим тема - Америка яғы башланғысы менән Рәсәй сит ил эштәре министры Сергей Лавров һәм АҠШ-тың дәүләт секретары Марко Рубио ике ил президентының Сәғүд Ғәрәбстанында күҙалланыусы юғары кимәлдәге осрашыуына әҙерлек буйынса, шулай уҡ үҙ-ара ихтирамға нигеҙләнеүсе дәүләт-ара диалогты президенттар биргән йүнәлештә тергеҙеүгә ҡағылышлы телефон аша аралашты. Ошо һөйләшеү нигеҙендә Эр-Риядта Рәсәй менән АҠШ делегацияларының осрашыуы булып үтте. Рәсәй яғынан унда Сергей Лавров менән РФ Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков, Рәсәй Инвестициялар фондының гендиректоры Кирилл Дмитриев, ә АҠШ яғынан дәүләт секретары Марко Рубио, милли хәүефһеҙлек буйынса АҠШ президенты советнигы Майкл Уолтц һәм Яҡын Көнсығыш буйынса махсус илсе Стивен Уиткофф ҡатнашты. 4,5 сәғәткә һуҙылған һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһе насар булманы, ти Юрий Ушаков. Рәсәй һәм АҠШ президенттарының киләсәктә күҙалланыусы осрашыуы хаҡында фекер алышҡандан һуң ике ил араһында йыйылып киткән мәсьәләләр ҡуҙғатылды, ә иң мөһиме ике яҡтың да мәнфәғәттәрен иҫәпкә алыу һәм үҙ-ара ихтирамлы мөнәсәбәттәр булдырыу хаҡында килешелде. Украиналағы хәлдәр буйынса ике яҡ та үҙҙәренең был мәсьәләгә принципиаль ҡарашын белдерҙе һәм киләсәктә был тема РФ менән АҠШ-тың һөйләшеүҙәр алып барыусы айырым командалары тарафынан дауам ителәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған төп тантаналар 21 февралдә уҙғарыла. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. 23 февралдә Еңеү паркында һәм Совет майҙанында сәскәләр һалыу тантанаһы була. Тантаналы саралар барлыҡ муниципалитеттарҙа ла үтергә тейеш, тип билдәләне Радий Хәбиров. Бөйөк Ватан һуғышы, Афғанстанда, Төньяҡ Кавказда хәрби бәрелештәр ветерандарын һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы ҡотларға кәрәк, тип билдәләне ул.

✓Владимир Путин Башҡортостанда йәшәүселәргә юғары исемдәр биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Әйтәйек, Кушнаренко районының Иҫке Ҡормаш ауылында йәшәгән, ун балаға ғүмер бүләк иткән Флүрә Фәттәховаға "Герой-әсә" исеме бирелде. Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт драма театры артисы Илдар Ғүмәров "Мәҙәниәт һәм сәнғәттәге хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән бүләкләнде.

✓Салауат районында урынлашҡан Салауат Юлаев музейына (Башҡортостандың Милли музейы филиалы) капиталь ремонт үткәреү өсөн ғаризалар ҡабул ителә. Контракттың башланғыс хаҡы - 124,19 миллион һум, подрядсыны 24 февралдә билдәләргә йыйыналар. Подрядсы эштәрҙе 2027 йылдың 30 сентябренә тиклем тамамларға тейеш. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә музейҙы хәтер урыны ғына түгел, ә яңы быуындар заман рухын тоя, тарихҡа ҡағыла һәм үҙенең мираҫы менән ғорурлана алһын өсөн илһам сығанағы итергә планлаштырыуҙарын хәбәр иткәйне.

✓Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш министрлығы баһаһы буйынса, 2024 йылда республиканың тулайым төбәк продукты 2,8 триллион һумға еткән. Бер йылда иҡтисади үҫеш 4,7 процент тәшкил иткән. Инвестициялар, сәнәғәт, төҙөлөш, сауҙа, ауыл хужалығы өлкәһендә ыңғай динамика күҙәтелгән. Был хаҡта Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.

✓Ozon маркетплейсында "Башҡортостан Республикаһында эшләнгән" тауарҙар витринаһы булдырылды. Әле унда республиканың 240 селлеры теркәлгән, үҙебеҙҙә етештерелгән 5 меңдән ашыу тауар һатып алырға мөмкин. Кейем-һалым, ойоҡ-носки, бал ҡорто продукцияһы, косметика, күн изделиелар, һаулыҡ һәм йорт өсөн тауарҙар тәҡдим ителә. Маркетплейста Башҡортостандан 28 мең һатыусы теркәлгән, тип хәбәр итте Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко. Бынан алдараҡ Благовещен ҡалаһында "Озон" логистик комплексы асылыуы тураһында хәбәр ителгәйне.

**✓ Мөмкин тиклем күберәк кешене спортҡа йәлеп итеү өсөн төрлө программаларҙы бойомға ашырабыҙ. 60 йәштән өлкән кеше ГТО нормаларын үтәһә, уға спорт объекттарына йөрөү өсөн 10 мең һумлыҡ сертификат тапшырыла.**



## ҠЫҪҠАСА

# ТӘРБИӘСЕЛӘРГӘ...

**Башҡортостанда балалар баҡсалары тәрбиәселәре республика Башлығы грантын оторға мөмкин.** Конкурста 35 йәшкә тиклемге өлкән тәрбиәселәр, тәрбиәселәр, педагог-психологтар, педагог-логопедтар, уҡытыусы-дефектологтар, музыкаль етәкселәр, физкультура буйынса инструкторҙар ҡатнаша ала. Белем биреү ойошмаһында эш стажы ике йылдан кәм булмаҫҡа тейеш, тип хәбәр иттеләр республика Мәғариф министрлығынан. Белдереүҙәренсә, грант конкурсында ҡатнашыу өсөн ғаризалар 1 мартҡа тиклем ҡабул ителә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика етәксеһе Радий Хәбировтың указы менән 2024 йылдың 1 ғинуарынан мәктәпкәсә белем биреү уҡытыусыларына һәр ҡайһыны 575 мең һумлыҡ гранттар булдырылды.

✓ **Ғ.Ҡыуатов исемендәге Республика дауаханаһы табиптары Башҡортостан райондарында эш башлай.** Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында билдәләүҙәренсә, белгестәрҙең эше алыҫ ауылдарҙа йәшәүселәр араһында йөғошло булмаған хроник ауырыуҙарҙы, шулай уҡ хәүеф факторҙарын иртәрәк асыҡлауға йүнәлтелә. 11 февралдә Раевка үҙәк район дауаханаһында ҡан тамырҙары хирургы, невролог һәм акушер-гинеколог пациенттарға консультация-медицина ярҙамы күрһәтте. Үрҙә әйтеп үтелгән белгестәрҙән тыш, пациенттарҙы шулай уҡ гастроэнтеролог, кардиолог, травматолог, пульмонолог һәм уролог ҡабул итә. График райондың тар йүнәлешле белгестәргә ихтыяжын иҫәпкә алып төҙөлә. Табипҡа йәшәгән урын буйынса терапевта яҙылырға мөмкин. Артабан Белорет, Бишбүләк, Благовещен, Шаран, Йәрмәкәй, Ҡырмыҫҡалы, Күгәрсен, Кушнаренко һәм Нуриман райондарына барыу планлаштырыла. Апрелдән республиканың төпкөл ауылдарында медицина тикшереүе үткәреү өсөн йәнә "Сәләмәтлек поездары" йөрөй башлай.

✓ **Арғаяш районында медицина кластары асыла.** Проект тураһында Арғаяш районы етәкселеге һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты вәкилдәре менән осрашыу барышында фекер алыштылар. Бындай эш Башҡортостандан ситтә, төбәк-ара хеҙмәттәшлек сиктәрендә, тәүгә ойоштороla. Төп маҡсат - табип һөнәренә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү һәм кадрҙар резервы булдырыу. Профилле уҡытыу маҡсатында химия, биология, физика һәм генетика дәрестәрен республиканың медицина университеты уҡытыусылары дистанцион рәүештә алып барасаҡ. "Медицина кластарының Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлауҙы һәм юғары мәктәпте ойоштороусы, Арғаяш районының Мәтәле ауылында тыуып үҫкән, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, Башҡорт дәүләт медицина институтының элекке ректоры Зәйнулла Ихсановтың тыуған төйәгендә асылыуы символик мәғәнәгә эйә һәм бик мөһим. Юғары уҡыу йорто ректоры Валентин Павловҡа һәм район башлығы Игорь Ишимовҡа проектҡа ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерәм", - тип билдәләне Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиле Әлфир Байымов.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАҒЫ БЕР СПАРТАКИАДА




**Өфө һаулыҡ мөмкинлектәре сикле балалар араһында Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең беренсе ҡышҡы Спартакиадаһын ҡабул итә. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың Рәсәй спорт министрының беренсе урынбаҫары Одес Байсолтанов менән осрашыуында билдәле булды.**

Рәсәй Спорт министрлығы ҡарары буйынса спартакиада 2025 йылдың декабрендә Өфөлә ойошторола. Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, осрашыу барышында спорт инфраструктураһын үҫтереү, шулай уҡ төбәктә күләмле саралар уҙғарыу мәсьәләләре тикшерелде. Радий Хәбиров Башҡортостанда төрлө дисциплиналарҙы үҫтереүгә, шулай уҡ халыҡты физкультура менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеүгә ҙур иғтибар бүлеүҙәре тураһында һөйләне. Одес Байсолтанов Башҡортостандың Рәсәйҙең спорт инфраструктураһын үҫтереүгә индергән өлөшөн билдәләне.

- Төбәк спорт объекттары һаны буйынса өс лидер иҫәбенә инә, республика биләмәһендә ярыштарҙы юғары кимәлдә ойоштороуығыҙға беҙҙә һис кенә лә шик булманы. Тармаҡты үҫтереүгә ярҙамығыҙ өсөн рәхмәтлемен, - тип билдәләне Одес Байсолтанов.

Радий Хәбиров Башҡортостанда сәләмәт йәшәү рәүешен популярлаштырыу буйынса саралар тураһында ла һөйләне: "Мөмкин тиклем күберәк кешене спортҡа йәлеп итеү өсөн төрлө программаларҙы бойомға ашырабыҙ. Мәсәлән, беҙҙә әүҙем яҡташтарыбыҙға ярҙам итеү программаһы бар. 60 йәштән өлкән кеше ГТО нормаларын үтәһә, уға спорт объекттарына йөрөү өсөн 10 мең һумлыҡ сертификат тапшырыла. Республикала спорт инфраструктураһын үҫтереү эшен дауам итәбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Әле 16 ҙур объектты проектлау һәм төҙөү бара.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**

# ЕР ТЕРКӘҮ ТӘРТИБЕ...

**2025 йылдың 1 мартынан "Рәсәй Федерацияһының айырым закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" 487-се федераль закон үҙ көсөнә ингәс, Рәсәйҙә ер участкалары менән килешеүҙәрҙе теркәү тәртибе үҙгәрә. Был турала Росреестрҙан хәбәр иттеләр.**

Мәсәлән, Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрында уның сиктәренең урынлашҡан урыны тураһында мәғлүмәттәр булмаһа, ер участкаһын теркәү мөмкин түгел. Шулай уҡ иҫәпкә алынмаған ер участкаһында урынлашҡан бинаға, ҡоролмаға йәки тамамланмаған төҙөлөш объектына хоҡуҡты теркәргә йәки кадастр иҫәбенә ҡуйырға ярамай. Был яңы милекселәрҙең хоҡуҡтарын яҡларға тейеш. Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрында ер участкаһының сиктәре тураһында мәғлүмәттәрҙең булыу-булмауын тикшереү бик ябай. Бының өсөн Росреестрҙың кадастр картаһын асып, кадастр номеры йәки адрес буйынса ҡыҙыҡһындырған участканы табырға мөмкин. Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестрына участка сиктәре тураһындағы мәғлүмәттәрҙе кадастр иҫәбен алып барыу тураһында ғариза һәм межалау планы нигеҙендә индерергә мөмкин, уларҙы теркәү органына тапшырырға кәрәк. Бынан алдараҡ Башҡортостанда өс йылда күсемһеҙ милек тураһында мәғлүмәттәрҙә 72 меңгә яҡын хатаны төҙәтеүҙәре хаҡында хәбәр ителгәйне.

# ҒҮМЕРҘӘРҘЕ ҠОТҠАРЫУ ӨСӨН...

**170 дронға ҡаршы юрған - 170 ҡотҡарыласаҡ ғүмерҙәр. Республикабыҙ ауылдары Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һалдаттарға дәррәү ярҙам итә. Ошо көндәрҙә Хәйбулла районының Федоровка ауылы халҡы "Айыҡ ауыл" район конкурсында еңгән приз аҡсаһына 170 дронға ҡаршы юрған теккән. Был хаҡта "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһенә ауыл хакимиәте башлығы Наталья Лебедева һөйләне.**

"Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашырға булғас, ниндәй генә сумма отһаҡ та, һалдаттарға ярҙамға тотонасаҡбыҙ, тип ҡарар иткәйнек. Муниципаль этапта еңгән 100 мең һум аҡсаға дронға ҡаршы юрған тегеү өсөн кәрәкле әйберҙәр һатып алдыҡ. 10 көндә 170 дана тегеп тә ҡуйҙыҡ. Кисә уларҙы ауылыбыҙ яҡташы хәҙрәте Юлай Юнысов МХО зонаһына алып китте. Шулай уҡ һалдаттарға 10 маскировка селтәре, 4 йәшник окоп шәме һәм ҡоро душтар ебәрҙек. Бынан тыш, ауыл халҡы йылы ойоҡбаштар, таҫтамалдар, тәмләкәстәр һәм ҡайнатмалар һалды", - тине Наталья Лебедева.

Әйткәндәй, гуманитар ярҙамдың бер өлөшө Рәсәй Геройы Никита Петровҡа тапшырыласаҡ. Ул сығышы менән Хәйбулла районының Яңы Петровка ауылынан. "Кисә генә геройыбыҙ бәйләнешкә сыҡты, дронға ҡаршы юрған һораны. Беҙ уға шәхси посылка ебәрҙек", - ти ауыл хакимиәте башлығы.

Хәйбулла районының Федоровка ауылында гуманитар ярҙам әҙерләү буйынса тотош штаб булдырылған. Унда кешеләр ғаиләләре менән килә: кемдер тегеү машинаһы артына ултыра, кемдер окоп шәмдәре яһай, бәғзеләр маскировка селтәре үрә... "Кәрәк икән, төндә лә йыйылабыҙ. Сөнки күптәребеҙ көндөҙ эшләй. Һуңғы ваҡытта ир-егеттәр ҙә әүҙем ярҙамлаша, окоп шәмдәрен тултыра, ҡотҡарыу беләҙектәре эшләй. Башҡа ауылдарға ярҙам итергә лә өлгөрәбеҙ. Яңыраҡ Ырымбур өлкәһендә ҡоро душ эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙек", - тип уртаҡлашты Наталья Лебедева.

# ЗАМАНСА...

**Башҡортостан райондарында һигеҙ ҡатын-ҡыҙ консультацияһын асыу планлаштырыла. Улар Языков, Борай, Иҫәнғол, Краснокама, Оло Ыҡтамаҡ, Миәкә, Нуриман, Үрге Тәтешле район дауаханаларында булдырыла, тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.**

Ведомство мәғлүмәте буйынса, ошо медицина ойошмаларында поликлиникалар составында акушер-гинеколог кабинеттары эшләй. Әммә заманса ҡоралмаған менән йыһазландырылған махсус ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларын асыу бурысы тора. Унда акушер-гинекологтар өсөн кабинеттар, ультратауыш диагностикаһы кабинеты, медицина-социаль ярҙам кабинеты, функциональ диагностика кабинеты булырға тейеш. Был ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаулығына комплекслы ҡараш булдырырға һәм уларҙы тикшереү, дауалау өсөн уңайлы шарттар булдырырға мөмкинлек бирә.

Ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларын "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә асыу планлаштырыла. Төп маҡсат - ҡатын-ҡыҙҙар өсөн медицина ярҙамының сифатын күтәреү, тыуымды арттырыу, буласаҡ әсәләрҙең һәм уларҙың балаларының һаулығын яҡшыртыу.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2024 йылда Башҡортостандың бала табыу йорттарында 31 028 сабый донъяға килгән. Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, иң йәш әсәгә - 14, ә иң олоһона 52 йәш. Сабыйҙарҙың күбеһе Өфөлә тыуған - 9679, икенсе урында - Стәрлетамаҡ (2149 сабый), өсөнсөлә иһә Нефтекама (1371 бала). "Нығ бәләкәй ауырлыҡта (490 грамм) һәм баһадир (5330 грамм) балалар республиканың клиник перинаталь үҙәгендә донъяға килгән", - тип белдерҙеләр министрлыҡта.

✓Өфөлә балаларға елек майын күсереп ултыртыу буйынса беренсе операция яһаған табиптар бүләкләнә. Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошондай бойороҡ бирҙе. "Беҙ онкология һәм гематология үҙәген асҡан ваҡытта беҙҙең табиптарҙың елек майын күсереп ултыртыу буйынса операциялар яһай башлауын теләгәйнек. Был, ысынлап та, медицинабыҙ өсөн ҙур ваҡиға", - тине Радий Хәбиров. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылда республикала өс балаға елек майын күсереп ултыртыу буйынса беренсе операциялар яһалды. Уҙған йылдың июлендә тәүге пациент 10 йәшлек ҡыҙ булды.

✓Һуңғы йылдарҙа ялған аҡса эшләүселәрҙең әүҙемлек кимәле кәмегән, тип хәбәр итә Рәсәй Банкы. 2024 йылда Рәсәй буйынса банк системаһында бөтәһе 8240 дана ялған Рәсәй банкноталары һәм тәңкәләре асыҡланған. 1 миллион банкнотаға әйләнештә 1 ялған аҡса тура килә. Башлыса 5 мең (64 процент) һәм 1 мең (27 процент) һумлыҡ купюралар яһала. Шулай уҡ сит илдәрҙең 1875 ялған банкнотаһы асыҡланған. Уларҙың 93 проценты - АҠШ доллары. Башҡортостанда иһә уҙған йылдың туғыҙ айында 46 ялған купюра табылған, уларҙың 90 проценты 5 мең һәм 1 мең һумлыҡ банкноталарға тура килә.

✓Башҡортостанда сабыйҙар үлеме һиҙелерлек кәмегән. Был күрһәткес "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектын тормошҡа ашырыуҙағы мөһим ҡаҙаныштарҙың береһе булды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәте кәңәшмәһендә. Был күрһәткес статистик күҙәтеү тарихында минималь кимәлгә төшкән. Алты йыл эсендә ул 40 процентҡа - 2019 йылда 1000 тыуған сабыйға 6,1 осраҡтан 2024 йылда 3,7 осраҡҡа тиклем кәмегән.

✓Хәрби хәрәкәттәр ветераны статусына эйә булған эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре өҫтәмә отпуск алырға хоҡуҡлы. Дәүләт Думаһы депутаттары тәүге уҡыуҙа тейешле закон проектын ҡабул итте. Бында эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренә 15 көнлөк өҫтәмә отпуск биреү мөмкинлеге күҙҙә тотола. "Хәҙер бындай льгота менән ветеран статусына эйә хәрби хеҙмәткәрҙәр файҙалана, уны хәрбиҙәр менән бер рәттән МХО барышында бурыстарын үтәгән полицейскийҙарға ла таратыу ғәҙел булыр ине", - тине именлек һәм коррупцияға ҡаршы эш итеү буйынса профилле комитет рәйесе Василий Пискарёв.

✓ *"Башҡа илдәрҙә "Әсәлек капиталы" кеүек ярҙам сараһы юҡ, шуға күрә сит ил граждандары өсөн ул "тәмле киҫәк"кә әүерелде. Илебеҙҙә бала табып, "Әсәлек капиталы"н алып, кире үҙ иленә ҡайтып китеүсе ҡатын-ҡыҙҙар артты.*



ДЕПУТАТ ТРИБУНАҺЫ

**РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров - һайлаусыларының фекерен ишеткән, халҡыбыҙҙы борсоған мәсьәләләрҙе уңышлы хәл иткән, закондарҙы камиллаштырыуҙа һәм яңы проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа ҙур тырышлыҡ күрһәткән егәрле депутат, тынғыһыҙ шәхес ул. Уның йәмғиәттең төрлө өлкәһенә ҡағылышлы ҡануниәттәр инициативалары, социаль һәм иҡтисади проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтелгән башланғыстары тураһында бер нисә миҫалға туҡталып үтәйек.**

# ЯҠЛАУСЫ ЛА, ЯРҘАМСЫ ЛА



## Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау

Зариф Байғусҡаров билдәләүенсә, намыҫһыҙ һатыусылар йыш ҡына һатып алыусыларҙың башын бутай, өгөтләү һәм аңлашылмаған терминдар арҡаһында кәрәкмәгән сығымдарға дусар итә. Өҫтәмә хеҙмәттәр һәм тауарҙар йыш ҡына автосалондарҙа, кредит юллағанда, интернет аша самолетҡа һәм поезға билет һатып алғанда, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрен түләгәндә көсләп тағыла. Кешеләр автоматик рәүештә страховкалау, смс-хәбәр кеүек өҫтәмә түләүле хеҙмәттәрҙең тәҡдим ителеүен хатта һиҙмәй ҙә ҡала. Халыҡты бындай хәлдәрҙән ҡурсалау маҡсатында "Һатып алыусыларҙың хоҡуҡтарын һаҡлау тураһында"ғы Федераль закондың 16-сы статьяһына үҙгәрештәр индерелде. Бынан ары өҫтәмә тауарҙарҙы (хеҙмәтте) тәҡдим итеү бары тик килешеү төҙөлгәндән һуң һәм һатып алыусының ризалығы менән генә мөмкин буласаҡ. Әгәр ҙә һатыусылар был ҡағиҙәләрҙе боҙһа, уларға 40 мең һумға тиклем штраф һалынасаҡ.

## Баҫма матбуғатҡа ярҙам

Гәзит һәм журналдарҙың тиражы йылдан-йыл кәмеүе бер кемгә лә сер түгел. Сәбәптәре төрлө, шул иҫәптән почта хеҙмәтенең етерлек кимәлдә эшләмәүе лә быға йогонто яһай. Был проблема ла депутат Зариф Байғусҡаровты борсой. "Бөгөн гәзит-журналдарҙы йортҡа килтереү почта өсөн иҡтисади яҡтан отошло түгел, шул сәбәпле баҫмалар уҡыусыға ваҡытында еткерелмәй, - ти Зариф Закир улы. - "Почта элемтәһе тураһында"ғы Федераль законға индерелгән үҙгәрештәрҙә матбуғат баҫмаларын алыҫ райондарға, бәләкәй ауылдарға еткереү өсөн матди ярҙам саралары ҡаралды. Был аҙым гәзит һәм журналдарҙы таратыу буйынса эште яҡшыртырға тейеш".

Шулай итеп, 1 сентябрҙән үҙ көсөнә инәсәк яңы законға ярашлы, "Социаль әһәмиәтле ваҡытлы баҫмалар" төшөнсәһе индерелә. РФ Хөкүмәтенә гәзит-журналдарҙы социаль әһәмиәтле баҫмаға индереү критерийҙарын раҫлау буйынса, ә РФ Цифрҙар министрлығына федераль, төбәк һәм район (ҡала) баҫмалары исемлеген төҙөү буйынса вәкәләттәр тапшырылған.

Гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡының күп өлөшөн почта хеҙмәте тәшкил итеүе билдәле. Һөҙөмтәлә гәзит һәм журналдар ҡыйбатлана, һәм ауыл халҡы яратҡан баҫмаларына яҙыла алмай ҡала. Законға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, "Социаль әһәмиәтле" тип һаналған гәзит һәм журналдарҙы килтереү өсөн матди ярҙам ойоштороласаҡ, яҙылыу хаҡын кәметеү мөмкинлеге тыуасаҡ, шулай уҡ почтальондарҙың эш хаҡы артасаҡ.

## Почта бүлексәләрен яңыртыу

Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров "Рәсәй почтаһы" акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры менән эшлекле осрашыу барышында почта бүлексәләрен яңыртыуға аҡса бүлеү мәсьәләһен ыңғай хәл итә. Һөҙөмтәлә 2022-2023 йылдарҙа Башҡортостанда 55 ауыл почта бүлексәһе федераль аҡсаға капиталь ремонтлана. Атап әйткәндә, Хәйбулла, Федоровка, Көйөргәҙе, Әбйәлил һәм Баймаҡ райондарында күләмле эштәр башҡарыла. 2024 йылда республикала 14 почта бүлексәһе капиталь ремонтлана, улар араһында Мәләүез районының Первомайский ауылы айырылып тора. Бынан тыш, 7 почта элемтәһенең модуль бүлексәләре ҡуйыла.

Депутат райондарҙа халыҡ менән осрашҡанда почта проблемаһы йыш күтәрелә. Үтенестәр иғтибарһыҙ ҡалмай: яңыраҡ "Рәсәй Почтаһы"ның генераль директоры менән тағы ла килешеп, Бөрйән районының - Ырғыҙлы, Ейәнсура районының - Үрге Муйнаҡ, Башҡорт Үргене, Арсенов, Йылайыр районының - Юлдыбай, Стәрлебаш районының - Ҡарағош, Баҡый, Күгәрсен районының - Мәксүт, Баймаҡ районының - Йомаш, Күмертау ҡалаһының Маячный ауылдары бүлексәләре 2025-2026 йылдарҙа модернизациялау программаһына индерелгән. Капиталь ремонттан һуң был почта бүлексәләре халыҡҡа бихисап хеҙмәттәр тәҡдим итә аласаҡ: Күп функциялы үҙәк өсөн документтар ҡабул итеү, банк хеҙмәте, шулай уҡ дарыу һәм көнкүрештә тәү кәрәкле тауарҙар һатыу.

## Мигранттарға ҡарата яңы талаптар

Рәсәйҙә мигранттарға ҡарата талаптар көсәйтелде. Сит ил граждандары йыш ҡына хәйләле юлдар ҡуллана. Мәҫәлән, ваҡытлыса йәшәү ваҡыты тамамланыуға барғанда, ялған документтар әҙерләп, сик аша сыға һәм шундуҡ илебеҙгә кире инә. "Ялған документтар әҙерләүгә булышлыҡ итеүселәр өсөн енәйәт яуаплылығы кәрәклеген асыҡ билдәләнек", - тип һыҙыҡ өҫтөнә ала депутат Зариф Байғусҡаров.

Бынан тыш, Рәсәй Федерацияһы гражданлығы алыр алдынан сит ил кешеләренә тәүҙә хәрби комиссариатта иҫәпкә торорға кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ алдаҡ ысулдар менән никахҡа инеү ҙә контролгә алына - элек мигранттар Рәсәй кешеһе менән никахҡа ингәс тә гражданлыҡ алған булһа, хәҙер улар кәмендә 2-3 йыл законлы никахта йәшәргә тейеш.

248-се Федераль законға ярашлы, полицияға мигранттарҙы илдән ҡыуыу вәкәләте тапшырылды. Быға тиклем был суд ҡарары буйынса ғына мөмкин ине. Был сара мигранттарҙы ҡыуыу буйынса оператив саралар (хатта ял һәм байрамдар көнөндә лә) күреү өсөн ҡабул ителә.

"Башҡа илдәрҙә "Әсәлек капиталы" кеүек ярҙам сараһы юҡ, шуға күрә сит ил граждандары өсөн ул "тәмле киҫәк"кә әүерелде. Илебеҙҙә бала табып, "Әсәлек капиталы"н алып, кире үҙ иленә ҡайтып китеүсе ҡатын-ҡыҙҙар артты. Хәҙер бындай осраҡтар ҙа туҡтатыла - законға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, "Әсәлек капиталы"на Рәсәй граждандары ғына хоҡуҡлы", - ти Зариф Закир улы.

## Бер мөрәжәғәт тә иғтибарһыҙ ҡалмай

Депутат Зариф Байғусҡаров һәр саҡ халыҡ менән бергә, уларҙың тын алышын, аһ-зарын ишетә. Күптәр уның ярҙамы менән яҙмыштарын ыңғай яҡҡа үҙгәрткән: кемдер ашығыс медицина ярҙамы алып, ғүмерен һаҡлаған, икенселәр хоҡуҡтарын тергеҙгән, ауыр тормош шарттарына дусар булғандар проблемаларынан ҡотолған. Ҡалын-ҡалын папкаларҙағы мөрәжәғәттәр - һәр береһе кеше яҙмышы, рәхмәте. Ысынлап та, ул - халыҡ депутаты.

Күптән түгел Зариф Байғусҡаровҡа Йылайыр районынан Махсус хәрби операция биләмәһендә ике улын юғалтҡан әсә мөрәжәғәт итә. Был осрашыуға һәләк булған улдарының ҡатындары һәм балалары ла килә. Тәрән һағыш һәм өмөт менән баҡҡан әсә өсөнсө улын хәрби хәрәкәт ҡыҙыу барған яҡтарҙан сығарыуҙа ярҙам итеүҙе һорай. Әлбиттә, әсә йөрәге башҡа юғалтыуҙарҙы кисерә алмаҫ ине. Зариф Байғусҡаров РФ Оборона министрлығы етәкселеге менән бәйләнешкә инә. Тиҙҙән яугирҙы ашығыс рәүештә Силәбе өлкәһендәге хәрби часҡа күсерәләр. Уға бер нисә көнгә тыуған йортона отпускыға ҡайтыу мөмкинлеге лә бирелә.

Депутаттың граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлауға һәм халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән хеҙмәте, ҡабул ителгән закондар һәм башланғыстар кешеләргә тиҙ үҙгәреүсе донъяла үҙҙәрен яҡланған һәм мәғлүмәтле итеп тойорға ярҙам итә.

**Гүзәл БИКМӘТОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Быйыл Өфөлә "Уңайлы ҡала мөхите" проекты сиктәрендә Ленин паркын төҙөкләндереү эштәре башланасаҡ. Паркты яңыртыу өсөн 2025 йылда төҙөкләндерелә торған объекттарҙы һайлау буйынса Бөтә Рәсәй онлайн-тауыш биреү ваҡытында 44 510 кеше тауыш бирҙе, тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенән. Паркта асфальтты һәм инженер селтәрҙәрен алыштырасаҡтар. Хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн биләмәлә күҙәтеү камералары һәм өҫтәмә яҡтыртыу ҡорамалдары ҡуйыласаҡ. Шулай уҡ бында балалар майҙансыҡтарын яңыртасаҡтар, ағастар ултыртасаҡтар. Зәки Вәлиди урамы яғынан тарихи арканы яңыртыу ҙа күҙҙә тотола. Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итеү айҡанлы һалынған таш стела, БАССР-ҙың наградаларын көүҙәләндергән дүрт стела үҙенең урынында ҡаласаҡ.

✓Башҡортостандан каратист Эрнест Шәрәфетдинов Кипрҙа уҙған "Karate1 Series A - Larnaca" халыҡ-ара ярышында көмөш миҙал яуланы. Был ҡыуаныслы яңылыҡ менән республика телеграм-каналында уртаҡлаштылар. Эрнест алты уйын үткәрҙе һәм 75 килограмм ауырлыҡ категорияһында икенсе урынды алды. Халыҡ-ара ярыштарҙың әлеге серияһы рейтинглы булып тора һәм турнирҙың спортсыларыбыҙ өсөн әһәмиәтле булыуын йәнә бер тапҡыр раҫлай, тип билдәләнеләр Спорт министрлығында.

✓17 февралдән Өфөнөң республика клиник перинаталь үҙәгендә партнер менән бала табыу туҡтатылды. Медицина учреждениеһында белдереүҙәренсә, был сара ваҡытлыса - махсус бойороҡҡа тиклем. Билдәләнеүенсә, ваҡытлыса тыйыу карантин менән бәйле. "Киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләү осраҡтарының артыуына бәйле санитар-эпидемиологик хәүефһеҙлек көсәйтелә. Тыйыу февраль аҙағына тиклем ғәмәлдә ҡала", - тип хәбәр иттеләр республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән

✓Башҡортостанда Класс етәкселәре форумының яңы илсеһе итеп Өфө районы Булгаков ауылы лицейы директорының тәрбиә буйынса кәңәшсеһе Елена Морева тәғәйенләнде. Республиканың Мәғариф министрлығында билдәләүҙәренсә, Елена Морева һайлап алыу этаптарын уңышлы үтеп, әүҙем эшкә тотонорға әҙер. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, IV Бөтә Рәсәй Класс етәкселәре форумы Мәскәүҙә 2024 йылдың 3-5 октябрендә уҙҙы. Унда Башҡортостандан 15 вәкил ҡатнашты.

✓Өфө үҙәгендә төҙөкләндерелгән "Хәкимиә" мәсетен асырға әҙерләнәләр. Был хаҡта ҡала мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итә. "Хәкимиә" мәсете яңырыу кисерә. Баш ҡалабыҙҙың мөһим объекттарының береһендә ремонт-тергеҙеү эштәре тамамланыуға табан бара", - тип яҙа мэр социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. Шулай уҡ ул иман йортоноң яңыртылған фасадын һәм эске биҙәлешен күрһәтте.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Юҡ, атай, һинең һуғышың түгел ул. Беҙҙеке. Һин әсәй, Гөлдәриә янында өйҙә ҡалаһың. Махсус хәрби операцияға үҙем барам", - ти. Шулай итеп, 2023 йылдың майында Ҡыуатовтарҙың өсөнсө улы ла һалдат формаһы кейә.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һаҙ көйөлдөһө, кәкересуҡыш

**(Средний кроншнеп)**



Көйөлдөгә оҡшаған, әммә кәүҙәгә бәләкәйерәк. Түпәһе ҡара, ҡаштары - аҡ. Суҡышы ла ҡыҫҡараҡ.

Һайрай-һайрай осоп йөрөй. Яй ғына осоп китә лә, оҙаҡ ҡына ҡанат ҡаҡмай ғына һауала өйрөлә. Йырын башлағанда һыҙғырыу яйыраҡ, аҙаҡтан инде тиҙерәк була. Көйөлдө кеүек үк тауышлы, "би-би-би" тип ишетелә.

Евразияның төньяғында һәм Төньяҡ Америкала йәшәй. Урманлы һаҙлыҡтарҙы, тайғаны үҙ итә. Урал алдында үткән быуат башында йыш осрай торған ғәҙәти ҡош иҫәбенә инә, тик хәҙер оя ҡороп йәшәмәй. Урал аръяғында Үләнде күлендә осратҡаныбыҙ булды. 1990 йылдың май айында Ҡарман һыуһаҡлағысы ярында 30-лап ҡоштан торған төркөмдән ике ата ҡошто тотоҡ, уларҙың кәүҙәһе зоология музейында һаҡлана.

Ояны һирәк ағаслы урмандарҙа, ағасы киҫеп алынған ерҙәрҙә, урман зоналарындағы һаҙлыҡтарҙа ҡора. Шулай уҡ баҫыуҙарҙа, яландарҙа һәм башҡа асыҡ урындарҙа йәшәүе лә билдәле.

Айырым парҙар менән йәшәйҙәр, бер нисә пар бергә йәшәү урыны булдырыуы ла ихтимал. Ҡоро ерҙәге соҡорға ҡалын итеп мүк, ҡороған үлән, япраҡ түшәй. Гәҙәттә, йомортҡаларының һаны 4 була, шулай ҙа йомортҡаны 3 йәки унан да кәмерәк һалған сағы осрай. Ниндәйҙер хәүеф тыуа икән, ҡош йәшәгән ояһын ташлап, үҙенә иғтибарҙы йәлеп итеп, осоп китә. Йәки тауышланып кешене уратып осоп йөрөй башлай, бер ергә ултыра, бер ағасҡа ҡуна. Йыртҡыс ҡоштарҙы һәм ҡарғаны ҡурҡмайынса баҫтырып ҡыуып ебәрә, был эште бергәләшеп тә башҡаралар. Бәпкәләр сыҡҡас, улар ҙы ата ҡош менән инә ҡош икәүләп ҡарай, ҡайһы бер осраҡтарҙа 1,5-2 аҙнанан һуң инә ҡош уларҙы ҡалдырып китә. Туҡланыуы - төрлө бөжәктәр, шулай уҡ еләк, орлоҡтарҙан тора.

Август урталары - сентябрь баштарында йылы яҡҡа ҡуҙғала. Тигеҙ итеп теҙелеп осалар, юлда һаҙлыҡтарҙа, батҡыл күл һәм йылға буйҙарында туҡтайҙар. Ҡышлау өсөн Африка һәм Көньяҡ Азияға юлланалар.

Элек Ырымбурҙа оя ҡороп йәшәй ине, һуңғы йылдарҙа күренгәне юҡ. Донъяның иң һирәк ҡошо, Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән нәҙек суҡышлы көйөлдө (тонкоклювый кроншнеп) осоп китеп барышлай туктап киткәне билдәле.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

**Һүҙҙәренә тәрән мәғәнә һалып, "Мин - СССР-ҙа тыуған кеше", ти Ришат Рәшит улы Ҡыуатов үҙе тураһында. Уйлыға - уй, тигәндәй, шуның менән әңгәмәсем, ҡыҫҡа һәм теүәл итеп, тормошҡа, кешеләргә, тыуған еренә, Ватанына мөнәсәбәтен белдерә. Совет кешеһе - ул бит намыҫсан, яуаплы, дөйөм мәнфәғәтте үҙенекенән өҫтөн ҡуйған иленә тоғро зат, ысын гражданин.**

# УЛАНДАРЫМ ЯУГИРЛЫҒЫ ҠАНДАН КИЛӘ



Ришат Рәшит улының нәҫел ептәре башҡорт дворяндары Ҡыуатовтарға барып тоташа. Ул Ейәнсура районының Ҡаҫмарт йылғаһы һыуын һыулаған Байыш ауылында тыуған, дүрт балаға ғүмер биреп, хәләл ефете Зөлфиә Әхмәт ҡыҙы менән бөгөн дә шунда йәшәй. Әйткәндәй, Сөләймән Абдуллиндың яратҡан "Ҡаҫмарт буйы" йыры нәҡ ошо тарафтарҙа тыуған. Данлыҡлы йырсы уны бала саҡтан атаһы Әйүп Абдуллиндан ишетеп үҫә һәм тәүге тапҡыр радио аша 1948 йылда яңғырата.

Ришат Ҡыуатов - ябай ауыл кешеһе. "Ҡаҫмарт" совхозында водитель булып эшләй, ә инде үҙгәреш тәр еле төпкөлгә лә барып еткәс, 1993 йылда фермерлыҡ ҡамытын кейә. Республикалағы тәүге фермерҙар сафында була, еңел булмаған йөктө ун һигеҙ йыл тарта. Иген сәсәләр, мал аҫырайҙар, урман ҡырҡалар, таҡта яралар, бура бурайҙар. "Иң көслө саҡтар ине. Пландар менән ятып китәһең, иртән тороп, уйлағандарыңды атҡарып та ташлайһың. Хужалыҡ көйлө эшләп торһон өсөн аҡса табырға кәрәк, ә заманалар ул саҡта, үҙең беләһең, шөптән булманы. Күберәк алыш-бирешкә, бартерға ҡарап торҙоҡ", - тип хәтирәләргә бирелә әңгәмәсем. Ете кешене эшле итә, тимәк, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ йылдарында ете ғаиләне ҡараған килеп сыға.

2011 йылда Байыш ауылы хакимиәте башлығы итеп һайлап ҡуйлар уны. Ауылда бит һәр кем күҙ алдында - эштәрең дә, ҡылыҡ-фиғелең дә, ғаиләңдәге хәлдәр ҙә күренеп тора, халыҡ хөкөмөндәһең. Һине вазифаға күрһәткәндәр, һайлағандар икән, тимәк, ышаналар. Дүрт йыл ярым хеҙмәт итә Ришат Рәшит улы ауылына. "Хакимиәттән киткәс, кире фермерлыҡҡа тотонғанһығыҙҙыр?" - тип ҡыҙыҡһынам. Юҡ, тотонмаған икән. "Үҙаллы хужалыҡ иткәндә мал-мөлкәт туплай алғанһығыҙҙыр?" - тип тә һорайым. "Байып булманы. Тапҡан-таянғанды эшкә ебәреп тик тороldо. Аҡса эшләү өсөн айырым бер талант кәрәктер ул. Миндә, моғайын, ул юҡ", - тип көлдө лә ҡуйҙы яуап итеп. Күрһәң, геройымдың донъяға ҡарашы "Ҡаҫмарт буйы" йырында йырланғансалыр:

*Ҡаҫмарт ҡына буйы ҡуҡ тирәк,*
*Туғайында бешә ер еләк.*
*Дан кәрәкмәй миңә, мал кәрәкмәй,*
*Дуҫтар кәрәк миңә, ил кәрәк.*

Ғәзинур (1989 йылғы), Ринат (1990), Илназ (2000) улдары, Гөлдәриә (2013) ҡыҙы атайҙарының эшен, эшкә мөнәсәбәтен, ғаиләһе өсөн нисек тырышыуын, тыуған төйәгенә һөйөүен күреп, белеп үҫә. Өс ул... Малайҙарҙы ысын ир-егет итеп тәрбиәләү - атай өҫтөндә ятҡан иң ҙур бурыстарҙың береһе. Иң элек, әлбиттә, үҙең өлгө булырға тейешһең. Өҫтә яҙғандарҙан сығып фекер йөрөтһәк, был йәһәттән Ришат Рәшит улына һүҙ тейгеҙерлек түгел. Шулай ҙа Ғәзинурҙың, Ринаттың, Илназдың бер булып хәрби хеҙмәтте һайлауҙары, миңә ҡалһа, айырым осраҡ.

Ринат Оборона министрлығы менән контрактты 2009 йылда төҙөй. Осетия, "Ҡырым яҙы"нан һуңғы хәрби ваҡиғаларҙа ҡатнаша, һаулығы ҡаҡшау сәбәпле, хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табыла. Хәҙер Себер тарафтарында эшләй, ғаиләһе менән Норильскиҙа йәшәй.

Ғәзинур ҙа контракт менән армияла ҡала. Өс йыл Чечнялағы хәрби хәрәкәттә булып ҡайта. Артабан ул "Газпром" компанияһында эшкә урынлаша, өйләнә, фатирлы, машиналы булып, ҡатыны һәм ике балаһы менән матур йәшәйҙәр. 2022 йылда мобилизация буйынса повестка килгәс, бер һүҙһеҙ хәрбиҙәр сафына баҫа. "Минең тәжрибәм унда кәрәк", - ти ул. "Махсус хәрби операцияға ҡушылыу Ғәзинурҙың уйында алдан уҡ булған. Ул республикала төҙөлгән Шайморатов батальонына әләгеү ниәте менән йөрөгән икән", - тип хәлгә аныҡлыҡ индерә атай кеше.

"Любизар" хәрби-тарихи клубтың 112-се Башҡорт атлы дивизияһы 1942 йылда тотҡан Казинка - Икенсе Тербун оборона рубежена (Липецк өлкәһенең Тербун ауылы) ойошторолған сәйәхәткә ирекмәндәр эҙләүен ишеткән Ришат Рәшит улы Илдар Шәйхмәтов менән бәйләнешкә сыға. "Мерcedes-Benz" микроавтобусы водителе сифатында йөрөп ҡайта ул сәфәрҙән. Шунда МХО-ға барыу уйы тыуа. Армияла хеҙмәт иткән, хәрби һөнәре бар. Йәше лә әле артыҡ китмәгән. Контракт төҙөү нескәлектәре тураһында белешеп, хәбәрҙәр кешеләрҙән белешә башлай. Атаһының ниәтен, башҡалар менән һөйләшеп йөрөгәнен Илназ ишеткән икән. "Юҡ, атай, һинең һуғышың түгел ул. Беҙҙеке. Һин әсәй, Гөлдәриә янында өйҙә ҡалаһың, һин уларға кәрәгерәкһең. Махсус хәрби операцияға үҙем барам", - ти. Шулай итеп, 2023 йылдың майында Ҡыуатовтарҙың өсөнсө улы ла һалдат формаһы кейә.

Ришат Рәшит улы беренсе тапҡыр Ейәнсура районы ирекмәндәре йыйған, район етәкселеге, ойошмалар күрһәткән ярҙам менән 2022 йылдың октябрендә мобилизациялангандар ятҡан, Ғәзинур улы ла унда булған Пенза өлкәһенә юл тота. 2023 йылда Ырымбур өлкәһенең Тоцк ҡалаһында әҙерлек үткән Илназдың часына мина эҙләй торған ҡулайлама алып килә. 2024 йылдың сентябрендә һәм ноябрендә Авдеевкаға тиклем барып етәләр. Илназ, машинабыҙҙы яндырҙылар, тигәс, район халҡы, хакимиәт ярҙамы менән "Chevrolet" машинаһы алып, тәүҙә шуны ҡыуып барып ҡайталар. Икенсеһендә ялан шарттарында йәшәү, ут аҫтында үҙеңде һаҡлау өсөн нимә кәрәк, шуны тейәйҙәр: генераторҙар, маскировка селтәрҙәре, ут һүндергестәр, дизел йылытҡыстары кеүек кәрәк-яраҡтар. Алғы һыҙыҡтағы хәлде үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайта Ришат Рәшит улы. Емереклектәр, һөрөм, уҡшытҡыс яу ҡыры еҫенең аңҡыуы, хатта йыйып алынмаған мәйеттәр. Юлдан бер тотам ситкә сығырға ярамай, гел юғары тиҙлектә хәрәкәт итергә кәрәк... Былар барыһы ла - һуғыш ысынбарлығы.

"Ҡыуатовтар кисҡән ваҡиғалар, ил яҙмышына төшкән һынауҙар мәлендә бер ҡасан да ситтә ятып ҡалмаған. Уландарымдың яугирлығы ҡандан да киләлер, бәлки. Мин үҙем тарихты яратам. Балаларыма халҡыбыҙҙың үткәндәре тураһында йыш һөйләй инем", - тине минең тәрбиә тураһында әйтеп тә өлгөрмәгән һорауыма әңгәмәсем. Илназ ҡаты алыштар барған фронт участкаһында хеҙмәт итә. Бик күп дуҫтарын юғалтҡан. Отпускаға ҡайтҡанда башын һалған иптәштәренең ата-әсәһенә барып, ҡайғыларын уртаҡлашып, ярҙамлашып китә ул. "Алғы һыҙыҡтағы ике улым менән дә телефондан һөйләшеп торабыҙ. Хәлегеҙ нисек, тиһән, бөтәһе лә яҡшы, ти ҙә ҡуялар. Оптимистик кәйефтә икеһе лә. Беҙ, ирҙәр, нисек тә түҙәбеҙ, әсәләренә ҡыйын, ут эсендә йөрөгән улдары өсөн йөрәге өҙәлә", - ти ул.

Бөгөн Ришат Ҡыуатов үҫеп килгән быуында ватансылыҡ тойғоһо тәрбиәләү йәһәтенән ҙур эш алып бара. Мәктәп музейын етәкләй, үткән яуҙар хәтере булған, МХО-нан ҡайтарылған хәрби трофейҙар күргәҙмәһе менән район мәктәптәре буйлап йөрөй. Быйыл апрель айында "Хәтер вахтаһы" акцияһы сиктәрендә яу яланында эҙләнеүҙәр үткәрергә ниәтләнә. Әле ул "Батыр" һаҡ ойошмаһында эшләй, "Башҡорт баҡыры" тау-байыҡтырыу компанияһының Хәйбулла районындағы "Юбилей" руднигында поста тора. Уның берҙән-бер теләге - уландарының тыуған йортҡа иҫән-һау ҡайтыуы. Беҙ ҙә Ҡыуатовтарға ошо ҡуанысны мәлдә күрергә яҙһын, ҡыҙыу нөктәләге барлыҡ ир-егеттәргә лә һаусәләмәт ата-әсәләре, ҡатындары, балалары, туғандары менән күрешергә яҙһын, тип теләйбеҙ.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

✓ *Ул үҙе кәрт уйынын яратмай, әммә үҙенең ҡулы аҫтында эшләгән чиновниктарҙан кемдәрҙең кәрт уйнағанын күҙәтеп бара һәм йыл аҙағында, ошондай чиновниктарға аҡса бүлеүҙән баш тарта, йә иһә бик аҙ бирҙертә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Рокоссовский ҙа, Перовский китеү менән үк, билгән посын ҡалдыра, штаб начальнигы итеп элекке канцелярия башлығы полковник Середа ҡуйыла, әммә ул да Обручев менән уртаҡ тел таба алмай, китергә мәжбүр була. Унан һуң Александр Иванович Верегин килә, ул аҙаҡ казак ғәскәрҙәренең баш идаралығы начальнигы вазифаһында оҙаҡ йылдар эшләй; ул да губернатор менән һүҙгә килә һәм тиҙҙән китә. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, ярты төн үткән бер мәлдә губернатор уны үҙенә саҡырта, Верегин был саҡта йоҡларға ятҡан була һәм начальнигының бойороғон үтәмәй. Унан һуң тәғәйенләнгән генерал Озерский, яҡшы бригада командиры булһа ла, йүнле штаб начальнигы була алмай. Унан һуң ҡуйылған, әүәлерәк генераль штабта эшләгән генерал-майор Прибытков физик һәм аҡыл яғынан сирле кеше була. Прибытковтан һуң штаб начальнигы вазифаһына генераль штаб полковнигы Фантон-де-Верраж саҡырыла, ул ошо вазифала Обручев эштән киткәнсе һәм Перовскийҙың икенсе тапҡыр идара итеүенең тәүге йылдарына тиклем эшләй; һөҙөмтәлә уға граф дәрәжәһе бирелә.

Штаб начальниктарының бик тиҙ алмашынып тороуын һәм уларҙы һөҙөмтәһеҙ тәғәйенләнеүен аҡсалата түләүҙең бик аҙ булыуы менән дә аңлатып була.

Ырымбурҙа корпус штабы начальнигына, әгәр ул генерал-майор булған хәлдә, хеҙмәтселәре менән үҙемә ҡаҙна фатиры бирелә, 860 һум аҡса түләнә, шулай уҡ ашап-эсеүгә ошо уҡ тиклем сумма өҫтәлә, барлығы - 1720 һум. Башҡа бер чиновниктарҙан күпкә өҫтөн ҡуйылған, башҡалар араһында үҙен ҙур дәрәжәле кеше кеүек тоторға тейеш булған кеше өсөн бындай түләүҙең үтә сикләнгән булыуы билдәле; әгәр штаб начальнигы полковник булһа, уға түләнгән аҡса 1500 һумдан артыҡ булмай.

Генерал Перовский үҙенең ҡулы аҫтында эшләгән хеҙмәткәрҙәргә, бигерәк тә юғары вазифалар биләгәндәргә ярҙам итеү юлдарын тапҡан, үҙе йыя алған хужалыҡ капиталдары иҫәбенән аҡсалата түләүҙәр ойоштора, уларҙың ғаиләләренә ҙур бүләктәр, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙарҙы күлдәклек тауарҙар менән тәьмин итә. Ошондай субсидиялар, әйберҙәрҙең арзан булыуы бигүк бай булмаған ғаиләле кешегә лә яҡшыраҡ көн итә алыу мөмкинлеген бирә.

Перовский вазифаһынан киткәс, уның йәмәғәт капиталдары уны алмаштырған кеше ҡарамағында ҡала, әммә уны ҡулланыу хаҡында ыңғай закон булмай, хатта ҡайһы бер капиталдар һәм файҙаланылған хужалыҡ операциялары тураһында Петербургта ла бөтөнләй белмәйҙәр. Обручев Перовский ваҡытында эшләнгән нәмәләрҙе дауам итергә баҙнат итмәй.

Петербургтың рәсми даирәләрендә, бигерәк тә император Николая Павлович ҡаршыһында, Обручевтың Перовскийҙыҡы кеүек үк ныҡлы абруйы булмауы, хеҙмәт өсөн түләүҙәрҙең ҡыҫҡартылыуы, ышанысһыҙлыҡ, яңы губернатор ҡарамағында карьера эшләп булмаясағы Перовский ваҡытында хеҙмәт иткәндәрҙе, уның шәхси адъютанттарынан башлап, Петербургҡа китергә мәжбүр итә. Унда уларҙың барыһы ла тиерлек бик һәйбәт урынлаша: генерал Рокоссовский хәрби министерлыҡта генерал-провиантмейстер урынын биләй, элекке канцелярия башлығы Середа Вятҡаға губернатор итеп ебәрелә, Балкашин Һарытау, һуңынан Өфө губернаторы итеп тәғәйенләнә.

Обручев, уның ҡатыны Матильда Петровна тормошҡа башҡасараҡ ҡараш та булһа ла, килгәндән алып башҡалар менән әллә ни аралашмай йәшәй. Һөйләүҙәренә ҡарағанда, генералдың баҫалҡылығының төп сәбәбе - иркен тотоноу өсөн аҡса етешмәүендә. Нисек кенә булмаһын, был хәбәр Петербургҡа барып етә; унан лайыҡлы тормош алып барыу, иркенерәк тотоноу мөмкинлеген тәьмин итеү маҡсатында губернаторға 10 мең һум аҡса ебәрелә, һәм Обручев үҙенең киң һәм иркен йортонда бейеүҙәр, кәрт уйнау кисәләре уҙғара башлай. Ул үҙе кәрт уйынын яратмай, әммә үҙенең ҡулы аҫтында эшләгән чиновниктарҙан кемдәрҙең кәрт уйнағанын күҙәтеп бара һәм йыл аҙағында, аҡсалата бүләкләү ваҡытында, ошондай чиновниктарға аҡса бүлеүҙән баш тарта, йә иһә бик аҙ бирҙертә. Иҫемдә ҡалғанынса, уның канцелярияһы чиновнигы, кәрт уйнарға яратыусы Охочинский бүләкләнмәй ҡала. Канцелярия башлығы Обручевтан бының сәбәбен һорай, губернатор уға яуап итеп, был чиновниктың даими рәүештә кәрт уйнауы, тимәк, уның аҡсаға мохтажлығы булмауы хаҡында әйтә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

60-сы гв. атлы полкының 3-сө эскадроны Зило-каналдың икенсе ярында плацдарм ала, әммә дошмандың үтә көслө уты аҫтында ҡалып, сигенә башлай. Пулеметсы А. С. Панов үҙ эскадроны яугирҙарын ҡул пулеметы уты менән ҡаплап, немец һалдаттарын плацдармға яҡынлатмай тота. 28 апрелдә дошман эскадрон биләгән позицияларға табан контратакаға күтәрелеп ҡарай. Панов пулеметының 2-се номеры яралана, әммә ҡыйыу һалдат яҡынлашып килгән немец һалдаттарын утҡа тотоуҙы дауам итә. Һөҙөмтәлә был юлы ла плацдарм беҙҙең яугирҙар ҡулында ҡала, ә дошмандың 30 һалдаты һәм өс пулемет нөктәһе сафтан сығарыла.

СССР Юғары Советы Президиумы Указына ярашлы,16-сы гв. атлылар дивизияһының элегерәк III һәм II дәрәжә Дан ордендары менән бүләкләнгән дүрт яугиры һуңғы алыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн I дәрәжә Дан орденына лайыҡ була: Дан орденының тулы кавалерҙары Советтар Союзы Геройҙарына тиңләнә. Уларҙың исем-шәрифтәре: 32-се танк полкы разведчигы, гв. сержанты В. В. Паутов, 58-се гв. атлы полкының взвод командиры, старшина М. П. Павленко, шул уҡ полктың разведчигы, өлкән сержант С. С. Первин, 62-се гв. атлы полкының сапер отделениеһы командиры, гв. кесе сержанты М. И. Тютюньков. 7-се гвардия корпусында барлығы 18 яугир Дан орденының тулы кавалерҙары булып танылa.

Дивизия командиры бойороғона ярашлы, Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусылар: 58-се гв. атлы полкының гв. рядовойы Вахитов Ғәлимйән Йосоп улы, Шишмә районының Сәфәр ауыл советынан. Зило-канал аша сыҡҡанда һәм Бранденбургты штурмлағанда ҡыйыу алыша; сапер эскадроны яугиры Саламатов Георгий Тимофеевич, Белорет ҡалаһынан, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградланған. 25 һәм 26 апрелдә дошмандың көслө пулемет уты аҫтында Зило-каналда паром эшләй, бер төркөм яугирҙарҙы икенсе ярға сығара; 58-се гв. атлы полкының отделение командиры, гв. сержанты Вахитов Тәүхетдин Имаметдин улы, Бүздәк районының Яңы Ҡартамак ауылынан. Ул Бранденбургты алғанда ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтә; гв. рядовойы Әхмәтшин Фазылйән Әхмәтйән улы, Учалы районынан; бәйләнеш эскадроны яугиры Ғүмәров Бакир Нуриман улы, Саҡмағош районынгың Бикмәт ауылынан; 60-сы гв. атлы полкының 76 миллиметрлы батарея артиллерисы Исхаҡов Зәкәриә Дамин улы, Ғафури районының Сәйетбаба ауылынан; 58-се гв. атлы полкының ветеринария хеҙмәте старшинаһы Шәймәрҙәнов Мөбәрәкша Нурый улы, Благовар районынан; 62-се гв. атлы полкының гв. рядовойы, миномет батареяһы яугиры Әғзәмов Ғилметдин Әғзәм улы, Белорет районы Әзекәй ауыл советынан; 20-се ПВО гв. айырым дивизионы яугиры Антипин Василий Семенович, Дим станцияһынан; химзащита взводы разведчигы Ғәйетов Фатых Афзал улы, Бүздәк районының Сабай ауылынана, элегерәк "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булған.

Дивизия командиры бойороғо менән III дәрәжә Дан ордены менән наградланыусылар: 58-се гв. атлы полкының миномет батареяһы заряжающийы, гв. ефрейторы Вәлеев Ғәлиулла Ғәлимулла улы, Миәкә районының Ҡырғыҙ Миәкә ауылынан. Ул элегерәк "Батырлыҡ өсөн" миҙалына һәм Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған; 20-се ПВО гв. айырым дивизионының зенит пулеметы расчеты командиры Байтурин Миңлеәхмәт Байдәүләт улы, Миәкә районының Сәфәр ауылынан; 62-се гв. атлы полкының ҡылыссылар эскадроны отделениеһы командиры Тимербаев Фатых Закир улы, Миәкә районының Сатый ауылынан. Элегерәк "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булған;

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

## Намджан ҡалаһы



Үкенескә күрә, Намджан картала билдәләнмәгән. Һәм ҡайҙа урынлашыуы тураһында текста яҙылыуы буйынса ул Өфөгә тап килмәй. Әммә уның тураһындағы мәғлүмәт шуныһы менән ҡыҙыҡлы: ул Урта быуат дәүерендәге Көньяҡ Урал ҡалаһының тибын һүрәтләй. Намджандың Урал йылғаһы бассейнында урынлашыуы ихтимал. Иҙриси был ҡала тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә килтерә: "Унда бик күп баҡыр табалар, уны Шаш иленең Хорезм һәм башҡа ҡалаларына һәм күрше гуздар иленә оҙаталар..." Шаш - ул Ташкент, Хорезм - Амударьяның түбәнге тамағы, гуздар хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән. Табылған баҡыр карауан юлы менән Урта Азия илдәренә ебәрелгән. Каталон атласының карталарының береһендә билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың карауан сауҙаһының бер маршруты ҡайҙалыр көнсығышҡа китә. Иҙриси был турала бына нимә тип яҙа: "...Был ҡаланан шулай уҡ йылға буйлап әл-Хәзәр диңгеҙенә төлкө һәм ҡондоҙ тиреһен сығаралар, уларҙы әл-Хәзәр диңгеҙе яры буйында һәм Дейлемда юғары хаҡҡа һаталар..." Телгә алынған әл-Хәзәр диңгеҙе - Каспий, ә Дейлем өлкәһе хәҙерге Ирандағы Каспий буйындағы Мазендаран провинцияһы. Шулай итеп, Намджан сауҙагәрҙәре Каспий диңгеҙен киҫеп сығып, уның көньяҡ ярына барып еткән. Артабан Иҙриси, Намджан халҡының диңгеҙ сауҙаһы тураһында мәғлүмәттәр килтереп, уның географик урыны тураһында бер шик тә ҡалдырмай: "Был ҡалала шулай уҡ балсыҡтан яһалған әйберҙәр һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүсе, юғары сифатлы көршәктәр эшләйҙәр. Был йылға ярҙарында төрлө аҫыл таштар, лазурит, шулай уҡ был йылғала төрлө балыҡтар бар. Унда яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған ҙур балыҡтар йәшәй. Намджан ҡалаһы халҡы төрлө хәйләләр менән уларҙы еңел генә тота ала. Уларҙы күп итеп тотоп, шуның менән йәшәйҙәр, күп өлөшөн тоҙлайҙар һәм һуңынан Хазар диңгеҙенә сығасаҡ караптарына килтерәләр. Улар ошо диңгеҙҙән яр буйлап баралар һәм Итиль ҡалаһына әләгәләр, унда балыҡтарын һаталар һәм үҙҙәре лә ашайҙар..." Текстан күренеүенсә, Намджанда йәшәүселәр "башҡорттарҙан хазарҙарға" йылға юлын үҙләштерә. Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап аҫҡа судноларҙа төшкәндә улар Каспий диңгеҙенең акваторияһына сыға. Һуңынан, уның яры буйлап көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, Волганың дельтаһына барып етеп, йылға буйлап үрләп, Хазарияның башҡалаһы Итиль ҡалаһына барып сығалар. Унда улар аҫыл таштар, йәнлек тиреһе һәм тоҙло бикре һата. Иҙрисиҙең тексына һәм картаһына ярашлы, Намджандың Башҡортостандың көньяҡта Эмба йылғаһы һәм Ҡаҙағстан өлкәһенең Мугоджар тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан тарихи территорияһында урынлашҡан булыуын күрәбеҙ. Был ҡаланың Яйыҡ йылғаһы баш алған Арҡайым заманынан алып баҡыр табыу эштәре алып барылған Урал тауҙары эргәһен-дә урынлашыуында шик булыуы мөмкин түгел. Иҙриси яҙмаларын өйрәнеүсе Ирина Коновалова Намджан ҡалаһын хәҙерге Орск районы тирәһенә урынлаштыра.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**

**(Дауамы бар).**

✔ ***Бабайым әсәйемә: "Заһира, бына күрерһең, колхоз-совхоздар бөтәсәк. Тормош киренән элеккеһенә әйләнеп ҡайтасаҡ ул. Тормош ҡына түгел, боронғо кейемдәребеҙ ҙә, көйҙәребеҙ ҙә кире ҡайтасаҡ..." - тип һөйләүе ҡолаҡҡа инеп ҡалған.***



# РУХЫ НЫҠЛЫ

## бер ниндәй тормош ауырлығы ла

**Был шәхесте ҡылыҡһырлаған иң төп сифаты хаҡында һүҙ алып барғанда, моғайын да, тормошҡа оптимистик ҡарашын, принципиаль фиҙаҡәрлеген билдәләргә мөмкин булыр ине. Был сифаттарының тәүгеһе халҡының тарихын тәрән белеүенән, уның көсөнә ышаныуҙан килһә, икенсеһе халҡыбыҙҙың рухи ҡеүәтен тойоуҙан, милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың киләсәге өсөн яуаплылығынандыр. Күренекле дәүләт эшмәкәре, арҙаҡлы ил ағаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Хәләф Хәлфетдин улы ИШМОРАТОВ менән ҡорған әңгәмәбеҙҙә һүҙ уның бала сағы, мәктәп һәм хеҙмәт йылдары хаҡында барҙы.**

**Хәләф Хәлфетдин улы, үҙенең бәхетле бала сағы булмаған кеше хәҙерге ваҡытта үҙенең бәхетле йәшәгәнен аңлай алмай, тиҙәр. Бала сағығыҙҙың иң бәхетле миҙгелдәре тип ниндәй ваҡытты әйтә алыр инегеҙ?**

- Бала сағымды ысын мәғәнәһендә бәхетле тип әйтә алам, сөнки янымда әсәйем менән атайым булды. Ғаиләбеҙҙә балалар күп булыуға ҡарамаҫтан улар һәр беребеҙҙә үҙенең иғтибары һәм ихтирамы менән сорнай белде. Шул уҡ ваҡытта эшкә, бер-беребеҙгә ярҙамлашып йәшәргә, туғанлыҡ ептәрен һаҡлап ҡалырға ла өйрәттеләр. Улар беҙгә ҙур һәм фәһемле тормош дәресе бирҙе. Атайым 1924 йылда тыуған, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, уларҙың быуынының 96 проценты яу ҡырында ятып ҡалған, 4 проценты ғына әйләнеп ҡайтҡан. Атайым өс тапҡыр яраланып, 1946 йылда тыуған яғына иҫән-һау әйләнеп ҡайтып, әсәйем менән ғаилә ҡоралар.

Ауылыбыҙҙа башланғыс ҡына мәктәп булыу сәбәпле ситтә уҡыныҡ. Миңә бигерәк тә ауырға тура килде, сөнки алты йәшемдә уҡырға барҙым. Ауылдан сығып киткәндә миңә ун йәш ине. Бишенсе класты Иҫке Собханғол мәктәбендә уҡыным да, урта мәктәпте Ишембайҙың хәҙерге Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се һанлы гимназияһында тамамланым. Тормошомда яҡшы кешеләр, яҡшы уҡытыусылар осрауы менән дә бәхетлемен.

**Тыуған ауылығыҙҙа йәшәгәндәге айырым иҫтәлекле ваҡиғаларҙы иҫегеҙгә төшөргәндә, ҡайһылары иң тәүҙә хәтерегеҙгә килә?**

- Иҫләй китһән, ундай ваҡиғалар бихисап инде ул. Дүрт йәшемдә Гәлиә апайымдан хәреф танырға өйрәнеүем, шулай уҡ дүрт йәшемдә тәүге тапҡыр атҡа ултырыуым, тәүге тапҡыр ҡулыма салғы алып, бесән сабыуым - барыһы ла күҙ алдымда. Беҙҙең ауылда һуғыш ветерандары өс категорияға бүленә торғайны: фронтта алғы һыҙыҡта һуғышыусылар, хеҙмәт армияһында йөрөүселәр һәм әсирҙә булыусылар. Уставта яҙылмағанынса, алғы һыҙыҡта булыусылар тегеләрҙе үҙҙәренең төркөмөнә яҡын ебәрмәнеләр, улар үҙҙәре генә йыйылышып аралаша торғайнылар. Бер мәл беҙҙең өйгә Фәйзулла тигән бабай: "Советтар Союзының Оборона министры Родион Малиновский вафат булған", - тип илап килеп инде. Был ваҡиға ла хәтеремә ныҡ уйылған.

Әсәйемдең тыуған Берлек ауылынан Ғәйзулла тигән бабай әбейе менән ат менән беҙгә ҡунаҡҡа килә торғайнылар. Арбаларына күстәнәскә һарыҡ һалып алырҙар ине. Улар беҙгә килеп, атайәсәйем, ауылдағы башҡа туғандарыбыҙ менән бер нисә көн ҡунаҡ булып, табын ҡороп, йырлашып ултырыр инеләр. Ғәйзулла бабайым Германияла әсирҙә булғанда күргәндәрен һөйләр ине. Ул немец фермерының хужалығында эшләгәндә хужаның ышанысын шул тиклем яулаған, тегенең тракторына ултырып, фермер ҡатыны менән ҡырҙарға сығып китә торған булғандар.

Башланғыс ҡына белеме булған бабайым урмансы булып эшләне. Уның әсәйемә: "Заһира, бына күрерһең, колхоз-совхоздар бөтәсәк. Тормош киренән элеккеһенә әйләнеп ҡайтасаҡ ул. Тормош ҡына түгел, боронғо кейемдәребеҙ ҙә, көйҙәребеҙ ҙә кире ҡайтасаҡ..."- тип һөйләүе ҡолаҡҡа инеп ҡалған.

Мин хәҙерге заман күҙлегенән сығып шуға аптырайым: башланғыс ҡына белеме булған бабай нисек итеп барыһын да алдан күрә белде икән? Ниндәй ғәйрәтле Советтар Союзының тарҡалыуын, колхоз-совхоздар бөтөүен дә нисек белде икән? Бала сағымдың хәтеремә иң ныҡ уйылып ҡалғандары бына ошолар. Шулай уҡ әсәйемдең олатаһының бик хәлле кеше булып, революцияға тиклем ике йөҙҙән ашыу солоғо булғанын да, 1921 аслыҡ йылын алдан күрә белеп, бал туплап, тупланмаһын ылау-ылау итеп Темәс баҙарына алып барып һатып, аҡсаһына он, көрпә, башҡа ризыҡ алып ҡайтып, Иҙел буйындағы Маҙалы, Ябаҡ һ.б. ауылдарҙа йәшәүселәргә бушлай таратып биргәнен һөйләгәндәре лә хәтеремдә.

**Ауыл хужалығы институтының механика факультетын тамамлағандан һуң Баймаҡ районына эшкә киләһегеҙ. Тормошоғоҙҙоң шул осорон иҫкә төшөргәндә иң тәүҙә ниндәй ваҡиғалар хәтерегеҙгә килә?**

- Институтта уҡып йөрөгәндә практика ваҡыттарында Баймаҡты, Хәйбулланы күреп-белеп йөрөнөм. Шуға күрә, Баймаҡ ауыл хужалығы техникумына эшкә саҡырыуы алғас, ризалаштым. Баймаҡ ере миңә оло тормош мәктәбе булды. Районда иҫ киткес эшһөйәр, илһөйәр халыҡ йәшәүе рухи донъямды байытты. Янымда яҡшы уҡытыусылар булды. Иң беренсе нәүбәттә ул саҡтағы партияның Баймаҡ район комитетының беренсе секретары Хәкимов Милләт Ташбулат улын, комсомолда беренсе секретарь Сынбулатов Мир Хәмит улын, партияның район комитетында эшләгән Күсәбаев Буранбай Рәфҡәт улын, Йәнсурин Рауил Хөрмәт улын, Байсурин Әхәт Һиҙиәт улын әйтер инем. Улар минең комсомол етәксеһе булып китеүемдә ҙур роль уйнаны. Ярҙам итмәнеләр, ярҙам иттеләр һәм мин уларҙы тик ыңғай яҡтан ғына иҫкә алам.

Баймаҡ үҙенә күрә айырым бер ҡитғаны хәтерләтә. Унда урманы ла, тауы ла, һыуы ла, ер аҫтында Менделеев таблицаһының бөтә элементтары ла бар. Иң ҡыуандырғаны: унда йәшәгән халыҡтың ихлас, алсаҡ, ярҙамсыл булыуы. Улар миңә ситтән килгән кеше тип ҡараманы, бергәләшеп, ярҙамлашып эшләнек. Баймаҡ ерендә мин өйләндем, беренсе ҡыҙым тыуҙы, миңә был район халҡы фатиха биреп, Өфөгә эшкә оҙатты. Башта мине ВЛКСМ-дың Өлкә Комитетына саҡырғандарында ризалашмай йөрөй инем, шул саҡ Милләт Ташбулат улы саҡырып алып: "Теләһә кемде саҡырмайҙар һәм көн һайын саҡырып тормайҙар. Һин районда артыҡ кеше түгелһең, беҙгә лә белгестәр кәрәк, әммә саҡырғастары, бар", - тигәндән һуң ғына Өфөгә күстем.

**Социаль тигеҙлеккә нигеҙләнгән социалистик ҡоролоштоң ыңғай яҡтары күп ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, йәшәп килдек-килдек тә, ҡапыл унан баш тарттыҡ та ҡуйҙыҡ. Баш тартмаһаҡ та, тиҙ генә ризалаштыҡ һымаҡ. Комсомол, партия мәктәбенең кадрҙар әҙерләү йәһәтенән дә роле ҙур булды. Комсомолда эшләгән кеше булараҡ, социалистик ҡоролош емерелеүен нисек кисерҙегеҙ?**

- Йәйәү сәйәхәткә сыҡҡан кеше компасҡа ҡарап ориентир алған булһа, һикһәненсе йылдар аҙағында, туҡһанынсы йылдар башында мин үҙемде шул компасымды юғалтҡан кешеләй хис иттем. Ысынлап та, коммунистик тәрбиә алған быуын булараҡ, юғалып та, аптырашта ла ҡалдыҡ. Хәҙерге күҙлектән ҡарағанда, Мәскәүҙә, Үҙәктәге партия органдарына оялаған ҡайһы бер бәндәләр барыһын юҡҡа сығарҙы. Уларҙың илде тарҡатыуы ҙур фажиғә булды һәм уның эҙемтәләрен быуаттар буйына татыясаҡбыҙ әле. Мин был ваҡиғаны халыҡ еңел ҡабул итте тип әйтмәҫ инем. Һис юғы, Ҡытайға ҡарап эш итҡән хәлдә лә, илебеҙҙе лә тарҡатмаҫ инек, Кавказда ла, Урта Азияла ла, Украинала ла ҡан ҡойоштарға юл ҡуйылмаҫ ине. Юҡҡа ғына илебеҙ Президенты Владимир Путин, СССР-ҙың тарҡалыуын шәхси трагедиям, тип атамағандыр.



# ХАЛЫҠТЫ...

## бөгә алмай

1996 йылда бөйөк ҡаҙаҡ аҡыны Абайҙың тыуыуына 150 йыл тулыуға саҡырғайнылар. Рәсми делегация составында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим дә бар ине. Аэропортта таможня үтә башлағас, Мостай ағай күңелһеҙ генә йөҙ менән: "Туғандаш Ҡаҙағстанда ошолайтып таможня аша йөрөрбөҙ тип бер ҡасан да уйламағайным. Бына ниндәй заманға килеп еттек," - тигәйне. СССР ҡеүәтле дәүләт, уны һаҡлап ҡалып була ине. Советтар Союзы менән бөтә донъя иҫәпләште, хәҙер килеп донъя масштабында лидерлыҡты юғалтҡас, беҙгә ҡараш та үҙгәрә. Быны бигерәк тә сит илгә сыҡҡанда һиҙәһең.

**Һеҙгә алған белемегеҙ буйынса яҡын булған ауыл хужалығы тураһында бер һорау. Шартлы алғанда, әйтәйек, бер центнер игендең үҙҡиммәте биш мең һуң тора икән ти. Ә шул уҡ биш меңгә сит илдән ун центнер иген һатып алып була. Тимәк, беҙҙә иген үҫтергән кеше, нисек кенә эшләһә лә, бынан файҙа алмаясаҡ. Ни өсөн беҙҙең иҡтисад шундай хәлгә ҡуйылды икән? Ауыл хужалығы белгесе булараҡ, был хәлде нисек аңлатырһығыҙ?**

- Борис Ельцин власта булғанда ауыл хужалығына ҡарата емерткес сәйәсәт алып барҙы һәм уның һөҙөмтәһен әле булһын татыйбыҙ. Колхоз-совхоз системаһы, мәҫәлән, башҡорт халҡының менталитетына тура килә ине. Беҙҙең халыҡ күмәкләп эшләп, тығыҙ аралашып йәшәгән, ергә лә коллектив мөнәсәбәт һаҡланған. Беҙҙең 40 процентҡа яҡын халыҡ ауылда йәшәй һәм урбанизация процесы дауам итәсәк. Тейешенсә техника, технология ҡулланылһа, ауылда йәшәгән 12-13 процент халыҡ ҡаланы туйындыра аласаҡ. Әммә урбанизация ауылдарҙы, милли мөхитте юҡҡа сығармаҫ тип әйтә алмайбыҙ. Был хәл мине һиҫкәндерә. Сөнки беҙҙең милли традицияларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ быға тиклем, асылда, ауыл ерендә һаҡланып килде. Күп шәхестәребеҙ ауылдан сыҡҡан һәм милләтебеҙгә рухи сығанаҡ булған шишмәнең яҙмышы күңелемде ныҡ ҡыра. Икенсенән, ниндәй генә булмаһын, беҙ элек ауылда етештерелгән сифатлы аҙыҡ-түлек менән туҡлана торғайныҡ. Ә бөгөн ауылдарҙа бер күңелһеҙ күренеш барлыҡҡа килде. Унда йәшәүсе ағайҙар һәм апайҙар ҙур ғорурлыҡ менән: "Малды бөтөрҙөк, картуф сәсмәйбеҙ", - тип күкрәк һуғып маҡтана. Улар үҙҙәренсә бының менән ҡалалағы кеүек еңел тормошҡа күстек тип уйлайҙарҙыр. Әммә йылдан-йыл яман шеш кеүек ауырыуҙарҙың күбәйеүе һәм йәшәрә барыуы иң беренсе нәүбәттә ризыҡҡа бәйле икәнен уйлап та ҡарамай инде улар.

Махсус хәрби операция беҙҙе "айнытты", йәғни беҙ ауыр һәм еңел сәнәғәт тауарҙары етештереү буйынса предприятиеларыбыҙҙың элек эшләгәндәре ҡыйралғандан һуң яңыларын барлыҡҡа килтермәүебеҙҙе әле килеп кенә аңланыҡ. Ризыҡтар буйынса ла бер нисә йылдан һуң "айнығыу" буласаҡ. Беҙгә ул мәлде көтөп тормайынса, әле үк натураль аҙыҡ-түлек етештереүгә, ауылдарҙа емерелгән күмәк һәм шәхси хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыуға тотонорға кәрәк. Ул колхоз, совхоз тип аталамы, нисек кенә аталмаһын, ерҙә эшләүҙе туҡтатмаҫҡа ине. Ер шарында беҙҙең илдән бай ил, дәүләт юҡ. Әгәр ҙә хөкүмәтебеҙ ауыл хужалығын үҫтереүгә субсидиялар бүлһә, халыҡтың һаулығы ла яҡшырыр, демография мәсьәләһе лә ҡырҡыу тормаҫ ине.

**Һеҙ демография хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡас, шуны ла әйтергә кәрәктер: һәр заманда, һәр дәүләттә ауыл демографик мәсьәләне хәл итеүсе урын да һаналған. Ҡалаларҙа ғаиләлә балалар һаны берәү-икәүҙән артмай, иң күбендә һәм һирәк осраҡта - өс бала. Ике бала булған осраҡта демографик үҫештең кимәле 0-гә тигеҙ, ни өсөн тигәндә, ике бала һан яғынан атай менән әсәйҙе алмаштырыусы ғына. Ә бит шул уҡ совет осоронда дәүләт ауылды ҡаланы туйҙырған өсөн генә түгел, дәүләттең стратегик мәсьәләһен - демографияны хәл иткән өсөн дә дотацияланы. Шулай түгелме?**

- Ризамын, дөрөҫ фекер. Ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу беҙҙең һымаҡ аҙ һанлы халыҡтар өсөн ифрат ҙур роль уйнай. Егерменсе быуатта донъяла 256, шул иҫәптән Рәсәйҙә 9 тел юғалған. Бөгөн беҙгә, башҡорттарға, ауылдарҙы һаҡлау милләтебеҙҙе һаҡлауға тиң бурыс. Агломерациялар барлыҡҡа килеүҙе туҡтатырға ине. Ни өсөн тигәндә, ауылдарҙа, райондарҙа халыҡ һаны кәмеү иҫәбенә ҡалаларҙа, шул иҫәптән Өфөлә халыҡ һаны арта. Өфө, Шишмә, Иглин райондарында ла халыҡ шул иҫәпкә арта. Ошо мөхиткә килеп эләгеүселәр икенсе, өсөнсө быуында телде белерме икән? Заманында Мортаза Ғөбәйҙулла улы төпкөл ауылдарҙа төҙөткән типовой мәптәптәрҙең буш тороуын шәхсән ауыр кисерәм.

Ауылдарҙы һаҡлау ил кимәлендәге проблемаға әүерелергә тейеш. Шул саҡта ғына беҙ сифатлы аҙыҡ-түлек етештереү мәсьәләһен дә, демографик проблеманы ла хәл итербеҙ. "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеге" тигән юҫыҡтан ҡарағанда ла, ауылдарҙы һаҡлау илдең хәрби ҡеүәтен нығытыу тип тә атала ала. Бөйөк Ватан һуғышында ла ниндәй көслө дошманды еңеп сығыуыбыҙ ауылдарҙы һаҡлау арҡаһында булғанлығын хәҙер килеп аңлайбыҙ. Ни өсөн беҙ хәҙерге мөмкинлектәр заманында әлегә тере булған ауылдарыбыҙҙы юҡҡа сығарырға тейешбеҙ һуң?..

**Бер мәл Рәсәйҙең беренсе президенты Борис Ельцин "Мәҙәниәт көтөп торор" ("Култура подождет") тип әйткәйне. Бына һеҙ мәҙәниәт министры, шул йүнәлештә эшләгән премьер-министр урынбаҫары вазифаһында эшләгән кеше булараҡ, нисек әйтерһегеҙ: беҙ власть вертикалы урынлашҡанға тиклем тарих тарафынан республикабыҙҙың, милләтебеҙҙең мәҙәниәтен үҫтереү өсөн бирелгән мөмкинлекте тулыһынса файҙаланып ҡалдыҡмы?**

- Беҙ мөмкин тиклем файҙаланып ҡала алдыҡ. Файҙаланып ҡына ҡалманыҡ, мәҙәниәтебеҙҙе артабан да үҫтерҙек. Мәҙәниәт министры булып эшләй башлағас, бер аҙна үтте, бер ай үтте, Мәскәү яғынан яңы министр менән танышып шылтыратыу ҙа, ҡыҙыҡһыныу ҙа булманы. Ахырҙа, Мәскәүгә үҙем шылтыраттым. "Яңы эш башланым, һеҙҙең менән күрешергә ине", тип һорағайным, миңә: "Һеҙ бит хәҙер үҙаллы республика, үҙегеҙ хәл итегеҙ", - тинеләр. Һис юғы, танышырға теләгем барлығын белдергәйнем, килегеҙ, тинеләр. Барҙым һәм миңә: "Нимә теләһәгеҙ, шуны эшләгеҙ", - тинеләр.

Мәскәүҙә шулай тип әйткәстәре, мәлде файҙаланып ҡалырға ҡарар иттек. Беҙгә тиҫтә йылдар буйына хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәр асылды. Иң тәүҙә Сибайҙа, Нефтекамала, Стәрлетамаҡта филармония асып ебәрҙек. Яңы театрҙар, шул иҫәптән "Нур" татар театры барлыҡҡа килде. Музейҙар астыҡ, боронғо исемдәрҙе кире ҡайтарҙыҡ. Бер мәл китапханалар, музейҙар һаны буйынса беҙ Рәсәйҙә лидерлыҡҡа килеп сыҡтыҡ. Республика төбәктәрендә яңы байрамдар тыуҙы. Сибайҙа - "Ирәндек моңдары", Октябрскиҙа - "Ҡурай", Нефтекамала төньяҡ-көнбайыш төбәк өсөн "Дуҫлыҡ моңо", Балаҡатайҙа - "Урыҫ таҡмаҡтары", Яңауылда "Гармун байрамы" конкурстары һәм байрамдары үткәрә башланыҡ.

2001 йылда Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы, беҙҙә илебеҙҙең бөтә төбәктәренең министрҙарын йыйып, мәҙәниәт буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Ул саҡта Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Михаил Ефимович Швыдкой ине. Өс көн эшләгәндән һуң мин уларҙы оҙатырға аэропортҡа барҙым. Министр янында өс урынбаҫары ҡатнашлығында һөйләшеү булды. Шунда мәҙәниәт министры: "Башҡортостан беҙгә шундай өлгө күрһәтте. Яңынан ярты йылдан беҙ алдағы кәңәшмәне ҡайҙа үткәрергә белмәйбеҙ. Сөнки киләһе төбәк Башҡортостанға ҡарағанда юғарыраҡ булырға тейеш. Беҙҙең был кимәлдәге төбәгебеҙ башҡаса юҡ", - тип, беҙҙең эшкә юғары баһа бирҙе. Был Рәсәйҙә күрелмәгән хәл ине.

БНЗС тресының данлыҡлы етәксеһе Михаил Старцев республикабыҙ суверенитетының 5 йыллығын үткәргән ваҡытта: "Беҙ республика суверенитетын яулағас, иң ҙур аҙымдарҙы мәҙәниәт өлкәһендә эшләнек", - тип сығыш яһағайны. Мин уның һүҙҙәренән шуны аңланым: рухи яҡтан юғары булған кешене, халыҡты бер ниндәй тормош ауырлығы ла бөгә, һындыра алмай. Иң ҙур байлығыбыҙ - рухиәтебеҙ.

**Һеҙ телгә алғас, Михаил Швыдкойҙың беҙгә килгәндә әйткән бер һүҙе иҫкә килеп төштө. РФ мәҙәниәт министрын ул саҡта ниндәйҙер мәктәпкә алып барғандар ҙа, шунда ул: "Ситтән кешеләр килгәндә ҡоймаларҙы буяп, урамдарҙы һепереп, бөтә нәмәне әҙерләп була, әммә балаларҙың йөҙөндәге шатлыҡлы йылмайыуҙы ойошторол булмай..." - тигән. Минеңсә, беҙҙең республикаға бирелгән баһа ла ул был фекер. Старцевҡа килгәндә, Башҡортостан Республикаһының Конституцияһын ҡабул иткәндә килеп тыуған сетерекле хәлдә ул депутаттарҙың берҙәмлеген, дөрөҫөн әйткәндә, республиканы һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итте. Шулай бит?**

- Эйе, Михаил Старцев объектив ҡарашлы, төплө етәксе булды. Ә Михаил Швыдкойҙың фекеренә килгәндә, ул беҙҙең дөрөҫ юлда барыуыбыҙҙы ла раҫланы.

**Тап һеҙ Башҡортостан мәҙәниәт министры, вице-премьер вазифаларын башҡарған саҡта халҡыбыҙ батыры Салауат Юлаевтың исемен мәңгеләштереү буйынса саралар бығаса күрелмәгән төҫ алды. Быға нисек өлгәштегеҙ?**

- Салауат Юлаев образы халҡыбыҙҙың рухи донъяһында ифрат ҙур роль уйнай, шуға күрә уның биографияһы, яҙмышы ғалимдарыбыҙҙы бөгөн дә ҡыҙыҡһындыра. Премьер-министр урынбаҫары булып эшләй башлағас, алыҫ Балтика буйында Палдиски ҡалаһындағы Салауат Юлаев һәйкәленең юҡҡа сығыуын ишетеп, нығ көйөндөк. Ниһайәт, 1997 йылдың көҙөндә составында яҙыусылар, журналистар, ғалимдар, артистар булған Башҡортостандың ҙур делегацияһы Эстония еренә аяҡ баҫтыҡ. Палдиски мэры Ян Мельдер менән әңгәмә алып барғанда беҙ Салауат Юлаевтың һәйкәлен, музейын тергеҙеү, уның исемендәге урамды кире ҡайтарыу тураһында һүҙ ҡуҙғаттыҡ. Ҡала башлығы был мәсьәләләрҙең ҙур ауырлыҡ менән хәл ителәсәген, үҙенең икеләнеүен әйткәс, уға: "Ян әфәнде, беҙ ҙә һеҙҙең кеүек аҙ һанлы халыҡ. Беҙ ҙә һеҙҙең халҡығыҙ тарихын ихтирам итәбеҙ. Эстон Республикаһының 1-се президенты Константин Пятс ҡырҡынсы йылдарҙа Өфөлә һөргөндә булған. Беҙ ул йәшәгән йорттоң урынына һеҙҙең менән берлектә мемориаль таҡтаташ асырға уйлайбыҙ. Ә беҙ һеҙҙән ҡаланың үҙәк урамдарының береһенә Салауат Юлаевтың исемен биреүҙе, уның музейын тергеҙеүҙе һорайбыҙ. Киләсәктә Эстония менән Башҡортостан араһындағы дуҫлыҡ күперенә саң ҡундырмайыҡ", - тигән һүҙҙәрҙе әйттем. Ян Мельдер был мәсьәлә буйынса Таллин менән һөйләшергә вәғәҙә бирҙе.

Ысынлап та, бер нисә ай үткәс, беҙгә Эстонияның мәҙәниәт министры урынбаҫары етәкселегендә ҙур делегация килеп төштө. Беҙ уларға матур программа ойошторҙоҡ. Үҙебеҙ вәғәҙәләгәнсә, Коммунистик урамда Константин Пятс йәшәгән йортта мемориаль таҡтаташ астыҡ һәм эстон делегацияһының теләге буйынса фин-уғыр халыҡтары йәшәгән Мишкә, Ҡалтасы райондарында булдыҡ. Ошонан һуң боҙ ҡуҙғалды, Палдискиҙа батырыбыҙға арналған музей асыу буйынса республикабыҙҙың Милли музейыең һыҙғанып эшкә тотондо. Палдиски ҡалаһында Салауат Юлаев исемендәге урам барлыҡҡа килде һәм Салауаттың рухы ҡалаға кире әйләнеп ҡайтты.

Быға тиклем Салауат көндәре батырыбыҙҙың тыуған районында һабантуй рәүешендә генә үткәрелеп килә ине. Сибай филармонияһының художество етәксеһе Альмира Ҡыуатованы, билдәле сценарист Сәрүәр Суринаны саҡырып, был сараны "Салауат йыйыны" тип атарға, уның форматын киңәйтергә ҡарар иттек. Шулай итеп, "Салауат йыйыны"на бер көн ҡалғанда беҙ Өфөләге опера һәм балет театрында Салауаттың тыуыуына 250 йыл тулыуға арнап, тантаналы ултырыш үткәрҙек. Унда Эстония делегацияһы ла ҡатнашты. Тантаналы ултырышта уларға ла һүҙ бирҙек. Ә инде Таллин опера театры солисы Виллу Вальтма башҡорт телендә "Уралым"-ды йырлағас, барлыҡ халыҡ хайран ҡалды.

Икенсе көндә Салауат ерендә үткән "Салауат йыйыны" иҫ киткес матур, ғәжәйеп күренеш булды. Йыйылған халыҡ Салауаттың яҙмышын үҙенең йөрәге аша үткәрҙе. Екатерина Икенсенең баш күтәреүселәргә ҡаршы сығарған Указын уҡығанда бар халыҡтың күҙенә йәштәр тығылды. Ошо күренеште күҙәтеп торған Палдиски ҡалаһы мэры Ян Мельдер яныма килеп: "Эйе, Хәләф әфәнде, хәҙер мин Салауаттың башҡорт халҡы өсөн ни тиклем ҡәҙерле икәнлеген аңланым", - тине.

**(Дауамы 11-се биттә).**

УЯН, УЙЛАН...

# БИТАРАФЛЫҠ УТРАУЫНДА ЙӘШӘҮСЕ...

## Робинзондар түгелме ни беҙ?



...Оҙон ҡырыҫ ҡышты саҡ сығып, миктәгән малдарын тиҙерәк йәшел үләнгә ҡушыр өсөн әле ер-һыу йүнләп кибеп бөтмәҫ элек үк Яйыҡ буйы туғайлыҡтарына йәйләүгә сыҡҡан ырыуҙың тирмәләренә сабып килеп еткән алһаҡсы егет, атының ауыҙлығын йыра тартып туҡтатты ла, уға төбәлгән ырыуҙаштарына "Киләләр! Йылғаға етеп киләләр. Бер биш йөҙләп самаһы булыр. Унайлыраҡ кисеү эҙләйҙәр", - тип тыны ҡыҫылыуҙан саҡ-саҡ әйтә алды. Йыйылғандарҙың барыһы ла кемдәрҙең улар йәйләүенә табан етеп килгәнен яҡшы аңлай ине. Быға тиклем һис ишетелмәгән һәм күрелмәгән ниндәйҙер дошман ҡәбиләһенең яҡшы ҡоралланған атлы ғәскәре башҡорт иленә үтеп инеп, бына инде ай самаһылай эреле-ваҡлы ырыуҙарға һөжүм итеүе, уларға ни сәбәптәндер бер генә ырыуҙың да ҡаршылыҡ күрһәтә алмауы тураһындағы шомло хәбәр Яйыҡ буйҙарына ла килеп еткәйне. Үҙҙәренә ҡотолғоҙ оло бер һәләкәттең яҡынлашыуын аңлауҙан хасил булған тойғо ҡапыл һәр кемдең быуынын бушатты, ҡыҫҡа ғына мәлгә ауыр тынлыҡ урынлашты. Ләкин шул саҡ ырыуҙың йән батыры Шәһиттең: "Бала-саға, ҡарт-ҡороно йәшерергә, ә ҡулына ҡорал тота алған һәр кем атҡа атланһын!" - тигән тауышы барыһын да ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡуҙғытып ебәрҙе.

Бына уйһыулыҡ буйлап йылғаға ҡарай йөҙләп һыбайлы саба. Яугирҙарҙың йөҙөндә ҡурҡыуҙың әҫәре лә юҡ, бары тик күҙҙәрендә баҫҡынсыларға ҡарата нәфрәт уты яна. Ә Шәһит батырҙың күңелен, киреһенсә, әсенеүле уйҙар һыҙыра: "Эх, ниңә генә беҙҙең башҡорт ырыуҙарында берҙәмлек юҡ? Ҡасан ғына был ҡәһәр һуҡҡыры барымта-ҡарымталар бөтөр икән? Үҙ-ара үсекенәне онотайыҡ, ил-йортобоҙға ҡурҡыныс янағанда һәммәбеҙ бер йоҙроҡтай ойошоп, дошманға ҡаршы сығайыҡ, тип оран һалһалар ҙа, берәү ҙә ярҙамға килергә ашыҡманы, һәр кем үҙ хәстәрен, үҙ көнөн күреүҙә булды..."

Тәпәш кенә бер түбәләсте артылып та өлгөрҙөләр, ике үк атымы арауыҡта һан яғынан күпкә артыҡ баҫҡынсылар сиреүе күренде. Кисектергеһеҙ үлемесле алыштың ҡайнар һулышын тойғандай булған ирегеттәр шунда уҡ ҡылыстарын ҡындан һурып сығарҙы, һеңгәләрен нығыраҡ ҡыҫып тотто. Шәһит батырҙың "Ҡал" тиеүенә ҡарамаҫтан, үҙе менән йәнәш сабып барған, мәргәнлектә бер егеткә лә ал бирмәгән, ырыуҙың тиңе юҡ һылыуы, көләше Айһылыу керешкә һалынған уғын дошман һыбайлыһына тоҫҡап, атып та ебәрҙе. Ләкин ни ғәжәп, башағының осонда әжәл йөрөтөүсе уҡ дошман тәненә ҡаҙалыр урынға бер ни ҡаршылыҡһыҙ һауаны ярып осоп үтте лә китте. Аралар яҡынайғандан-яҡынайҙы. Инде йөҙҙәре асыҡ күренергә тейешле мәлдә башҡорт яугирҙары ғүмерҙәрендә лә осратмаған йөрәктәренә шом һалыусы күренешкә шаһит булды: ҡаршыларына әҙәми зат һыбайлылары түгел, ә ниндәйҙер күҙгә күренмәҫ шәүләләр өйөрө өнһөҙ-тауышһыҙ сабып килә ине. Эйе, елеп килгән дошман аттары тояҡтарынан саң ғына борҡоп ҡала, ә эйәр өҫтө буш. Буш эйәрҙәр... Шәһит батырҙың мейеһен "Быларға ҡаршы нисек һуғышырға һуң? Былар бит тере кеше түгел!" тигән уй ярып үтеп тә өлгөрҙө, оҫта сойорғотолған күренмәҫ дошман һеңгеһө ҡукрәгенә ҡаҙалыуҙан үлемесле яраланып, ергә ауҙы...

...Ҡуптән таң атыуына ҡарамаҫтан, өй эсенә һүрән генә яҡтылыҡ төшә. Быҫҡаҡлап ҡына яуған ямғыр тамсылары тәҙрә өлгөләренә бәрелеп шыбырлауы күңелгә моңһоулыҡ өҫтәй. Әллә ниндәй сәйер ҙә, ҡурҡыныс та күргән төшөнөң тәьҫиренән оҙаҡ ҡына арына алмай, уны нимәгә юрарға ла белмәй ултырған Шәһит сәғәткә күҙ һалды. Иртәнге ете. "Тиҙҙән театрға репетицияға барырға, аҙаҡ киләһе аҙналағы концерттың сценарийы өҫтөндә ултырып эшләп алырға кәрәк булыр бөгөн. Ә кисен инде спектакль. Йә, ярай, хәйерлегә генә булһын".

Бына киске сәғәт етелә спектакль башланды. Үҙ һөнәренә йөнә-тәне менән бирелгән актерҙар тамашасы күңелен сихри театр донъяһына әйҙәп, сәхнәлә мөғжизә тыуҙыра - ғәҙәти тормошта бер ҡасан да кешесә һөйләшмәгән хайуандарҙың теле асыла, әллә ҡайҙан күктән ҡанатларын елпә-елпә ергә фәрештә төшә. Үҙ роленә сират еткән Шәһиттең сәхнәгә сығып, залға ҡараш ташлауы булды, шундуҡ күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Йә, Хоҙайым! Тотош ҙур залда ни бары иллеләп кенә тамашасы ултыра. Ә ҡалған урындар буш... Буш урындар... Буш эйәрҙәр... "Быларға ҡаршы нисек һуғышырға?" Иртән күргән сәйер ҡурҡыныс төшөнөң мәғәнәһен шунда ғына аңлап ҡалған Шәһиттең ирекһеҙҙән тамағына төйөр тығылды. Бер аҙға ғына баҙап ҡалһа ла, йәһәт кенә үҙен ҡулға алды. Күңелен әрнеү ялҡыны өттө, әммә тамашасыларға ҡарашынан шаян осҡондар һирпелде. "Юҡ! Мин ғүмеремдең һуңғы һулышына тиклем театрыма тоғро ҡаласаҡмын! Залда бер бөртөк тамашасы ҡалһа ла, сәхнәләш дуҫтарым менән шул һуңғы тамашасы өсөн уйнаясаҡмын!" тигән уй йөрәген һыҙлатып үткән ыңғайға Шәһиттең бер оҫта хәрәкәтенән зал яңғырауыҡлы көлөү тауыштарына күмелде...

Ошо урында Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының талантлы актеры, Әбйәлил егете Шәһит Хамматов төп геройы булған лирик сигенеү-хикәйәбеҙҙе туктатып тороп, бөгөнгө ысынбарлыҡҡа, ошо йәштәр театрының тормошона, тамашасылар менән булған мөнәсәбәтенә әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Ни хәлдә генә йәшәп ята икән мәҙәни усаҡ? Эштәре ал да гөлмө, әллә ул тиклем маҡтанырлыҡ түгелме? Миҙгел буйына барған спектаклдәренә халыҡ дәррәү килеп залды тултырамы, әллә етем әбейҙең йыназаһына йыйылған күрше-күләндәй генә йөрөймө? Һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән, хөрмәтле милләттәштәр, баш ҡалабыҙҙың күренекле театрҙарының береһе Милли йәштәр театры тураһында, дөрөҫөрәге башҡорт труппаһына ҡағылышлы уй-фекерҙәрем менән уртаҡлашып китәйем.

Беҙҙең башҡорт - бик дәртле, йыр-моң һөйөүсе, бай тарихлы һәм мәҙәниәтле халыҡ. Уныһын һәр кем белә. Ләкин шул уҡ ваҡытта һуңғы йылдарҙа милләтебеҙгә саманан тыш баҫалҡылыҡ, икенсе төрлө әйткәндә, йыуашлыҡ, битарафлыҡ, "төртмәйенсә ҡыбырламаусанлыҡ" кеүек һыҙаттарҙың уғата хас була барып, дөйөм бер менталитет рәүешенә әүерелеүен дә күрмәмешкә һалышып булмай. Республикалағы уңышлымы-уңышһыҙмы уҙғарылған иҡтисади, милли сәйәсәт темаһына ҡағылмайынса, әйҙәгеҙ әле, юғарыла һүҙ йөрөтөлгән Милли йәштәр театры призмаһы аша ҡайһы бер статистик мәғлүмәттәргә, факттарға һәм һандарға, заман башҡортоноң театр сәнғәтенә булған "юғары хистәре" кимәленә күҙ һалайыҡ.

Рәсми сығанаҡтарҙа 2010 йылда Өфөлә йәшәүсе башҡорттар һаны 171 мең самаһы, тип күрһәтелһә, милләте өсөн янып йөрөгән ҡайһы бер зыялылар әлеге көндә башҡалабыҙҙа 300 мең тирәһе башҡорт ғүмер һөрә, тип иҫбатлай. "Хәҡиҡәт - урталыҡта" тигән принципҡа таянып, беҙ Өфөләге милләттәштәребеҙ һанын 235 мең, тип алайыҡ. Шуларҙың яртыһын кесе йәштәге бала-саға, ҡарт-ҡоро һәм ниндәйҙер объектив сәбәптәр (мәҫәлән, һаулығы ҡаҡшаған һәм үтә ауыр финанс хәлдә булыусылар) арҡаһында театрға бөтөнләй йөрөй алмағандар тәшкил итеүен күҙ уңында тотоп, театрға потенциаль йөрөй алыусылар һанын 117 меңгә тиклем кәметәйек. Артабан киттек. Йәштәр театрының ҙур залында йәмгеһе 417 кресло-урын. Йылына ҡарап, һәр миҙгелдә яҡынса 135 башҡортса спектакль ҡуйыла, һәм һәр спектаклгә уртаса алғанда 150-ләп, премьера булған саҡта 300-ләп тамашасы йөрөй. Ҡайһы саҡ күберәк, ҡайһы саҡ аҙыраҡ та була тамашасы. Шул йөҙ илле кешенең яртыһы тиерлек спектаклде ҡолаҡсын (наушник) аша тыңлаған башҡа милләт вәкиле. Бына ошо үрҙә әйтелгән һандарға ябай ғына иҫәп-хисап үткәреп, һеҙҙең иғтибарығыҙға үҙенсәлекле статистика мәғлүмәтен тәҡдим итмәксемен.

**1.** Өфөлә йәшәгән һәр бер башҡорт ике йылға бер генә тапҡыр Милли йәштәр театрына йөрөһә, һәр спектакль аншлаг менән үтер ине.

**2.** Әгәр ҙә инде Өфөлә йәшәгән һәр бер башҡорт йылына бер генә тапҡыр йәштәр театрына йөрөһә, һәр икенсе тамашасы кассала билеттар бөтөү сәбәпле кире боролоп ҡайтырға мәжбүр булыр ине.

Баштараҡ сама менән һәр спектаклгә 75-ләп кенә башҡорт тамашасыһы йөрөй, тип әйтеп үткәйнем. Был, беләһегеҙме, нимә тигәнде аңлата? Әҙерһегеҙме? Башҡортостандың гүзәл баш ҡалаһы Өфөлә йәшәүсе һәр бер башҡорт милләтенән булған кеше халыҡ шағиры Мостай Кәрим исемен йөрөткән Милли йәштәр театрына 12 (!) йылға бер тапҡыр спектакль ҡарарға килә тигәнде аңлата. Дөрөҫөн генә әйткәндә, башҡорт теленең академик һүҙлегенең бөтә томдарын да аҡтарып эҙләһән, бындай әҙәм ышанмаҫлыҡ хәлде ҡылыҡһырларлыҡ һүҙ табып булмаҫ. Кешелек тарихында 12 йыл буйына театрға бер тапҡыр ҙа бара алмауының ғәфү итерлек сәбәбе булған бер генә әҙәмде беләм - ул Робинзон Крузо! Уныһы ла уйҙырма шәхес. Бөйөк сәйәхәтсе Робин әфәнде үҙе йәшәгән утрауҙа түгел, ә күрше утрауҙа театр булһа, һис шикһеҙ, кәмәһеҙ ҙә йөҙөп сығып барыр ине тамаша ҡарарға. Беҙ барыбыҙ ҙа ана шулай ғәмһеҙлек һәм битарафлыҡ утрауында йәшәүсе Робинзондарбыҙ.

Дауам итәйек. Бер спектаклгә билет хаҡы уртаса алғанда 400 һум тора. Йыш ҡына 200 һумға ла һатыла. Ике йыл эсендә бер тапҡыр театрға барыу өсөн билетҡа 400 һум аҡса сарыф итеү кеҫәне ныҡ йоҡартамы? Белмәйем, бәлки, кемдер өсөн был ысынлап та ҙур суммалыр. Ә, бәлки, был 400 һумдың ҙур аҡса булыу-булмауын ай һайын "мең һумға ғына" тырнаҡ буяткан йәш ҡыҙҙар, йә булмаһа 2-3 көндә 150 һумлыҡ бер ҡап тәмәке тартҡан ир-егеттәр, йә булмаһа, йыл һайын 150-200 мең һумға юллама алып, ғаиләһе менән диңгеҙ буйында ял итергә һәм шунда хәсрәт түксайҙары аниматорҙарҙың тоҙһоҙ шоу-перформанстарын тамаша ҡылырға яратыусы милләттәштәребеҙ әйтеп ҡарар?

Һәр кемгә билдәле, бөтә театрҙар кеүек, Милли йәштәр театры ла тамашасыһыҙ йәшәй алмай. Спектаклдәргә ашҡынып йөрөгән

✔ ***Милли йәштәр театрына тейешле иғтибарыбыҙҙы йүнәлтәйек, оҫта сағыу уйнауҙары менән беҙгә сәхнәнән даими онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк иткән актерҙарға тамашасы һөйөүебеҙҙе сайпылдырмай илтеп еткерәйек.***



тамашасыларға ҙур мохтажлыҡ кисерә. Ләкин шуны онотмайыҡ, иптәштәр, беҙ, тамашасылар, үҙебеҙ ҙә театрға мохтажбыҙ. Берәүҙәр сәнғәт усағына тынғыһыҙ эш аҙнаһының мәшәҡәттәренән тиҙерәк арыныр, яҡшы кәйеф, күңелгә эстетик кинәнес алыр өсөн йөрөй, икенселәр үҙҙәрен борсоған һорауҙарға яуап эҙләп килә. Ә кемдер тормоштоң әсе хәҡиҡәтенән ҡасып, аяуһыҙ ысынбарлыҡтың ҡоршауынан ҡыҫҡа ғына мәлгә булһа ла ҡотолорға теләп, селпәрәмә килеп ватылған хистәр, өмөттәр һәм хыялдар ярсығын устарына ҡыҫып тотҡан килеш яралы күңеленә дауа эҙләп килә...

Әмин театрға "шәхес метаморфозаһы" күренешен тамаша ҡылыр өсөн йөрөйөм. Аңлатып үтәйем. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ: күҙ бәйләүсе-иллюзионист һеҙҙең алдығыҙҙа эшләпәһенең эсенә яулыҡ йәшерҙе лә бер нисә секундтан шул уҡ яулыҡты кире тартып сығарҙы, ти. Иҫегеҙ китеп хайран ҡалыр инегеҙме? Әлбиттә, юҡ. Ә бына эшләпә эсенә яулыҡ йәшереп, аҙаҡ унан сәскә килтереп сығарһалар, барыбыҙ ҙа ошондай "мөғжизәгә" һоҡланып бөтә алмайбыҙ. Мин күп кенә сәхнә актерҙары менән яҡындан таныш һәм улар менән дуҫтарса йылы мөнәсәбәттәмен. Барыһы ла ябай, ихлас һәм эскерһеҙ күңелле, үҙ хыялдары, үҙ маҡсаттары, үҙ шатлыҡ-ҡыуаныстары һәм борсолоуҙары менән йәшәгән, тормошҡа һәм сәнғәткә ғашиҡ булған кешеләр улар. Спектакль башланмаҫ борон ярты сәғәт алда һинең менән һин дә мин шаярып-көлөп һөйләшеп торған, унан һуң спектакль барышында сәхнәнән залға төбәлгән ҡараштары, һынхәрәкәттәре, тауышы менән барыһының иғтибарын үҙенә йәлеп иткән, тетрәндергес уйнауы менән һине шатлыҡ һәм ғазап тулы хистәр упҡынына ташлаған ғәжәйеп һөнәр эйәләре улар актерҙар. Минең өсөн театр ана шул тылсымлы эшләпә, ә актерҙар - эшләпә эсенән яулыҡ урынына килеп сыҡҡан һоҡланғыс сәскәләр.

***Барыбыҙ ҙа күреп-белеп торабыҙ, донъяларҙың аҫты өҫкә килгән үтә ҡатмарлы заманда йәшәйбеҙ. Тотош милләттәр үлем менән йәшәү тирмәне таштары араһына эләгеп тартылыла, онтала, саң-туҙанға әйләнә. Шул мәлдә меңәр йыллыҡ тарихын, мәҙәниәтен, телен бөгөнгө көнгә тиклем һаҡлап алып килгән башҡорт халҡы алдында оло һынау тора - киләсәктә "Ер йөҙөндә йәшәгән халыҡтар" энциклопедия китаптарында ғына урын аласаҡбыҙмы, әллә ахырзамандғаса донъя майҙанында башҡа милләттәрҙән һис кәм булмай, лайыҡлы үҙ урыныбыҙҙы һаҡлап йәшәйәсәкбеҙме. Ошондай дилемманы ыңғай хәл итер өсөн тәү сиратта беҙ милли берҙәмлек тойғоһон һәм төшөнсәһен һәр беребеҙҙең елегенә тиклем һеңдерергә тейешбеҙ. Ә бит берҙәмлек - ул бары тик илйортҡа оло бәлә килгәндә генә йыйылышыу, ойошоу, уҡмашыу, күтәрелеп ҡаршы сығыу түгел, ә көндәлек ғәҙәти тормоштоң һәр даирәһендә, һәр боҫмағында, һәр тармағында сағылырға, бойомға ашырылырға тейешле эш-хәрәкәт, мөнәсәбәт: алыш-бирештә үҙ милләттәшең етештергән тауарға өҫтөнлөк биреү, үҙ башҡортоң аҫҡан бөҙрәхана, ҡәһүәхана, оҫтаханаларға йөрөү; туған моң, туған тел, туған мәҙәниәтеңде еренә еткереп өйрәнеү - былар барыһы ла милли берҙәмлек өлгөһө, шулай бит, ҡәрҙәштәр? Был исемлекте һеҙ үҙегеҙ ҙә тулыландыра алаһығыҙ.***

Шулай итеп, оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған хикәйә-мәҡәләмдең аҙағына ла яҡынлаштыҡ. Нимә әйткем килә: Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрына тейешле иғтибарыбыҙҙы йүнәлтәйек, оҫта сағыу уйнауҙары менән беҙгә сәхнәнән даими онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк иткән актерҙарға тамашасы һөйөүебеҙҙе сайпылдырмай илтеп еткерәйек. Сөнки беҙҙең ихтирамыбыҙ, илтифатыбыҙ һәм һөйөүебеҙ театрҙы йәшәтһә, беҙҙең ғәмһеҙлегебеҙ, битарафлығыбыҙ һәм вайымһыҙлығыбыҙ уны үлтерергә һәләтле.

Һуңғы йылдарҙа иҡтисади көрсөккәме, әллә тағы нимәләргәме япһарып, оптимизация тигән һылтау менән аҙмы-күмпе мәктәп-дауаханалар, мәҙәни усаҡтар ябылды. Аллам һаҡлаһын, әгәр шундай әсе яҙмыш ҡоһоро башҡалабыҙҙағы Милли йәштәр театрының башына төшһә, белегеҙ: халҡыбыҙ өсөн янып йөрөп эшләгән актерҙар тыуған өйөнә әйләнгән театр бинаһын һуңғы тапҡыр ҡалдырып сыҡҡан саҡта, өңөрәйеп ултырып ҡалған буш тамашасы залындағы креслоларҙың береһенең фанераһын аҡтарып сығарып, уны иҫтәлекле таҡтаташ итеп театрҙың тышҡы яҡ стенаһына ҡаҙаулап ҡалдырып китерҙәр, ә унда шундай яҙыу яҙылған булыр: "Был бинала фәлән йылдың фәлән көнөндә ғәмһеҙ, вайымһыҙ һәм битараф башҡорт тамашасыһы ҡулынан Милли йәштәр театры һәләк булды!"

Әгәр шундай йән өшөткөс фаразнамә киләсәктә ысынбарлыҡҡа тап килһә, беҙгә ҡасандыр театр булған офисүҙәк бинаһы алдынан үткән саҡта, шул "иҫтәлекле таҡташ" янында бер минут тын ҡалып тороп, театрҙың яҡты иҫтәлегенә өс бөртөк ҡәнәфер сәскәһе һалырға ғына ҡаласаҡ, тәүбә-тәүбә. Ул өс бөртөк сәскәнең хаҡы күмпе булыр тиһегеҙме - шул бер спектаклгә инерлек билет хаҡынан да артмаҫ, моғайын.

**Рөстәм АБДРАЗАҠОВ.**

ЗАМАН БАШҠОРТО

# РУХЫ НЫҠЛЫ ХАЛЫҠТЫ...

## бер ниндәй тормош ауырлығы ла бөгә алмай

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Һеҙҙең мәҙәниәт министры, аҙаҡ Хөкүмәт рәйесе урынбаҫары булып эшләгән йылдарығыҙ республикабыҙҙың Беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың дәүеренә тура килде. Ул дәүергә төрлөсә баһа бирәләр, республикабыҙ етәксеһен "открывашка" тип тә көлгән булдылар. Нисек кенә булмаһын, уның етәкселегендә республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихта күрелмәгән күтәрелеш кисерҙе. Әле һыны һәйкәл булып ҡалҡты. Уның менән бергә эшләгән кеше булараҡ, эшмәкәрлегенә ниндәй баһа бирә алаһығыҙ?**

- Әлбиттә, Мортаза Рәхимовтың эшмәкәрлегенә ыңғай баһа бирәм. Ул үҙенең эргәһенә көслө шәхестәрҙе туплай белде һәм улар тормоштоң төрлө этаптарын үткән, тәжрибә туплаған, бер һүҙ менән әйткәндә, утыҡҡан кешеләр ине. Беҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы менән ун бер йылға яҡын бергә эшләнек. Башта шуны әйтер инем: Президент ул бер үҙе бер нәмә лә эшләй алмай. Уның көслө, эшлекле командаһы булырға тейеш. Сөнки ундай урындағы етәксе бөтә өлкәгә лә үтеп инеп, етәкселек итеп өлгөрә алмай. Президент стратегик йүнәлеште генә бирә, тактиканы хөкүмәт ағзалары билдәләй һәм эш алып бара. Мортаза Ғөбәйҙулла улы стратегик йәһәттән алдан күп нәмәләрҙе күрә белде. Унан һуң, коммунистик идеология юҡҡа сыҡҡас, халыҡтың күңелендә бушлыҡ барлыҡҡа килгәйне. Ә физиктар "Тәбиғәт бушлыҡты яратмай" тиҙәр. Шул саҡта халыҡҡа ниндәйҙер ориентир бирергә кәрәк булды. Беҙгә эште мәктәптәрҙән башларға кәрәк ине. Мәғариф министры итеп Фирҙәүес Хисамитдинова ҡуйылғас, уның менән бергәләп ул ваҡыттағы Премьер министр Рим Баҡыевҡа, шунан Мортаза Ғөбәйҙулла улына ла индек. Республикала уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләрен үткәреү идеяһы, "Яңы Башҡортостан гражданын тәрбиәләү" тигән маҡсат ошо рәүешле барлыҡҡа килде. Ғаилә кимәлендә лә Башҡортостандың киләсәк граждандарын барлыҡҡа килтерергә тейешбеҙ, тигән маҡсатты ла алға һөрөп, 1997 йылда мин 1998 йылды "Ғаилә йылы" итеп иғлан итеү тураһында ҡарар проекты, планы әҙерләнем. Бөгөн килеп айырым йылдарҙы иғлан итеү федераль кимәлдәге сараға әүерелде.

Әйткәндәй, Мортаза Ғөбәйҙулла улын "открывашка" тип әйтһәләр ҙә, иң мөһиме, ул "закрывашка" булманы. Булғанды ябырға, юҡҡа сығарырға күп аҡыл, көс кәрәкмәй. Ә асыуы, барлыҡҡа килтереүе һәр ваҡыт ауыр.

**Владимир Путин: "Башҡортостанда бер тамсы һыуҙағы кеүек бөтә Рәсәй сағыла..." - тигән фекер әйткәйне. Был һүҙҙәргә ниндәй аңлатма бирер инегеҙ?**

- Ул был һүҙҙәрҙе "Аҡбуҙат" ипподромында әйтте. Мин уның һүҙҙәрен йөрәгем аша үткәрҙем. Ни өсөн тигәндә, Ельцин ваҡытында беҙҙең республиканың ыңғай күренештәрен күрмәмешкә һалыштылар. Үҙәк телеканалдарҙа, радиола, гәзит-журналдарҙа беҙҙең хаҡта бер позитив мәғлүмәт күренмәне. Берәр етешһеҙ күренеш булһа, шунда уҡ төймәнән фил яһанылар. Берҙән-бер тапшырыу булды, уныһы ла "Киносәйәхселәр клубы"нда Юрий Сенкевичтың Башҡортостан тураһындағы бер сәғәтлек тапшырыуы. Уныһын да Сенкевичты саҡырып килтереп, үҙебеҙ ойоштorҙоҡ. 1997 йылда беҙ Мәскәүҙә мәғлүмәт блокадаһын өҙөү маҡсатында Башҡортостан көндәре үткәрҙек һәм уны Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыуға 440 йыл тулыуға арнаныҡ. Федерализм идеяһын алға һөрөү маҡсатына ла бағышланды был сара. Әммә унда Рәсәйҙең ул саҡтағы мәҙәниәт министры Юрий Сидоровтан, Мәскәү мэры Юрий Лужковтан тыш, Кремлдән бер етәксе лә килмәне. Был хәл ул ваҡыттағы федераль органдарҙың Башҡортостанға ҡарашын күрһәтеп тора ине. Шуға күрә Владимир Путиндың беҙгә килеп "Бер тамсылағы кеүек Башҡортостанда бөтә Рәсәй сағыла..." тип әйтеүе күңелебеҙгә май булып ятты һәм артабан да ошо йүнәлештә ыңғай эштәр булыр тигән өмөт уятты.

**Владимир Путин тағы ла бер килгәнендә аэропортта Рәсәй армияһы составындағы башҡорт яугиры феномены хаҡында фекер әйткәйне. Башҡорт яугирының Махсус хәрби операцияла үҙ ғүмерен аямай һуғышыуы хаҡында ла күп һөйләйҙәр...**

- Тарихҡа күҙ һалһаҡ, хазарҙар, бәшәнәктәр, сарматтар, савроматтар булған, әммә улар тарих арбаһынан төшөп ҡалған. Шул уҡ мәлдә улар менән бер үк ваҡытта йәшәгән башҡорттар әле булһын бар. Улар Геродот, Ибн Фаҙлан һәм боронғо һәм урта быуат ғалимдары, тарихсылары яҙмаларында сағылыш тапҡан. Шул замандарҙан алып тарих арбаһынан төшмәй, бөгөнгә тиклем һаҡланып ҡалыуыбыҙ рухи яҡтан көслө булыуыбыҙ хаҡында һөйләй. Башҡорттар күсмә халыҡ булған, тигән бер яҡлы ҡараш та бар. Әммә йәйләүгә сығыуҙы, ҡыш ауылға ҡайтыуҙы күсмә тормош менән бутарға ярамай. Әгәр ҙә ата-бабаларыбыҙ күсеп йөрөгән булһа, аныҡ ерлеккә бәйле бар донъяға билдәле "Урал батыр" эпосын тыуҙыра алмаҫ ине. Әгәр ҙә беҙ яугир рухлы булмаһаҡ, еребеҙҙе лә, илебеҙҙе лә, телебеҙҙе лә һаҡлап ҡала алмаҫ инек. Яңыраҡ мин Шүлгән мәмерйәһендә булдым. Унда хәҙер донъя кимәлендәге музей эшләй. Музейға тиклем асфальт юл, газ барып еткән, унда ҡайҙа йоҡлармын, ҡайҙа ашармын тигән проблема ла юҡ. Ә замандың иң алдынғы ҡаҙаныштарын ҡулланып эшләнгән музейҙың үҙенә килгәндә инде, унда барып ингән саҡта уҡ үҙеңдең боронғо халыҡтың вәкиле булыуыңа ғорурлыҡ тойғоһо кисерәһең.

Башҡорттар Рәсәйгә ҡушылғандан, Левон һуғышынан алып, бөгөнгө Махсус хәрби операцияға тиклем Рәсәй армияһының алдынғы сафында торған һәм тора. Гитлерҙың шәхси дошманы Илья Эренбург 1942 йылда "Красная звезда" гәзитендә башҡорттарҙың бер ваҡытта ла әсиргә бирелмәүе, сигенә белмәүе хаҡында яҙып сыға. Тәү ҡарамаҡҡа йыуаш ҡына булып күренгән егеттәр яуға ингәндә арыҫланға әүерелеүе хаҡында лә әйтеп үтә. Беҙ шуға ла һаҡланып ҡалғанбыҙҙыр. Беҙҙең тарихтағы хәрби ҡаһарманлыҡты, башҡорт яугиры феноменын илебеҙ етәксеһе бик дөрөҫ тотоп алған.

**Кеше үҙен нисә йәштәмен тип иҫәпләһә, шул йәштә була, тиҙәр. Үҙегеҙгә нисә йәш бирәһегеҙ?**

- Әлеге ваҡытта кешенең ғүмере йыл һайын өс айға артып бара, тиҙәр. Был ниндәй сәбәп менәндер, аңлатыуы ауыр. Быны ерҙең тирбәлеше үҙгәреүе менән дә бәйле тиҙәр. Элек өлкәндәрҙең һөйләшкәнен тыңлап ултырырға, фәһем алырға яраттым. Шунда уларҙың "Пенсияға сығып, пенсия ашарға насип булһа ине", тигән һүҙҙәр йыш ҡабатланды. Шул ваҡытта пенсияны ашай торған нәмәме икән тип тә күҙ алдына килтергәнем булды. Өлкән йәшкә етһәм дә, күңел барыбер йәш. Ә үҙемде хәҙер ҡырҡ йәшлек итеп тоям.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"65 йәшкә еткән саҡта тормошоғоҙҙа өлгәшкән иң ҙур уңышығыҙ тип нимәне иҫәпләйһегеҙ?" тигән һорау бирҙем Хәләф Хәлфетдин улына әңгәмәбеҙ аҙағында. "Беҙҙе атай-әсәйебеҙ булғанына шөкөр итә белергә өйрәтте. Хәҙер 65 йәшкә етеп, атайымдың йәшен дә үтеп киттем. Һуғыштан өс тапҡыр ҡаты яраланып ҡайтҡан атайым 59 йәшендә вафат булып ҡалғайны.**

**Ғаиләм менән ҡәнәғәтмен. Дүрт балаға ғүмер биреп, уларҙы үҙаллы тормош юлына баҫтырҙыҡ. Улар милләтебеҙҙең телен, тарихын, ғөрөф-ғәҙәтен белгән ышаныслы вәкилдәре, тип әйтә алам. Ғорурланам. Икенсенән, шундай ҡатмарлы, һынылышлы 90-сы йылдарҙа, яңы быуат, яңы меңйыллыҡ башында Хөкүмәтебеҙ етәкселегендә эшләп, республикабыҙҙың үҫешенә өлөш индергәнмен икән, уның менән дә ғорурлана алам. Урамда йөрөгәндә тура баҫып атлап йөрөйөм, һәр кешенең күҙенә тура ҡарап һөйләшә алам, сөнки үҙемдең выжданыма тура килмәгән эштәр менән шөғөлләнмәнем", - булды уҙамандың яуабы.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ ЯК-18 самолетында осоу программаһын "отлично"ға тамамлап, сығарылыш имтихандарын уңышлы тапшырған Зөбәйер Исәнғолов Пенза өлкәһе Каменск ҡалаһындағы Хәрби-авиация мәктәбенә йүнәлтмә ала.**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАРТЛЫҠ БИЛДӘҺЕ ТҮГЕЛ

■ Сәс ағарыуы - организмдың ҡартайыуы тураһында һөйләмәй, тип белдерә ғалимдар. Баҡтиһәң, сал сәстәр барлыҡҡа килеүе ныҡлы сәләмәтлек билдәһе икән. Бер үк йәштәге кешеләрҙең сәстәре бер тигеҙ салланмай. Ғалимдар ошо күренешкә иғтибар итеп, был мәсьәләне төптәнерәк тикшерергә булған. Тестар күрһәтеүенсә, әгәр ҙә организм өйрәнгән режимында эшләй һәм бер ниндәй тайпылыштар юҡ икән, сәстәр 50-55 йәшкә саллана. Тимәк, кешенең сәстәре ошо йәштә ағарһа, был уның сәләмәт булыуы тураһында һөйләй. Ә сал сәстәрҙең барлыҡҡа килеүе кеше организмында глутатион күбәйеүе тураһында белдерә, йәғни, организм ҡартайырға теләмәй һәм был процестарҙы туҡтатыу маҡсатында эшләй башлай.

■ Дөрөҫ туҡланмау артыҡ ауырлыҡ булдырып ҡына ҡалмай, баш мейеһенең когнитив функцияларын да насарайта. Хайуандарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, май һәм шәкәргә бай ризыҡтар менән туҡланыу бер аҙна эсендә хәтерҙе насарайта. Етмәһә, был осраҡта баш мейеһендә кире тергеҙеп булмаған процестар башлана, дөрөҫ туҡланыуға күсеп тә, был функцияларҙы кире тергеҙеп булмай, ти ғалимдар.

■ Аҙ хәрәкәтләнеү төрлө сирҙәр сығанағы булып тора. Медицина тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, ултырып эшләүселәрҙең бөйөрөндә таштар барлыҡҡа килә икән. 84 меңдән ашау кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, әүҙем кешеләр был сир менән һирәгерәк ауырый. Әгәр ҙә кеше аҙнаһына 1 сәғәт йүгерһә, 3 сәғәт йәйәү йөрөһә, йәиһә 4 сәғәт баҡсала эшләһә әүҙем тормош алып бара, тип иҫәпләнә. Ултырып эшләү умыртҡа бағанаһына ла зыян итә. Бынан тыш, метоболизм насарая, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефе барлыҡҡа килә.

■ Ньюкасл университеты (Австралия) табиптары шәкәрҙең тәүлек нормаһын билдәләгән. 1990 йылда Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы шәкәрҙең нормаһын түбәндәгесә билдәләгәйне: ир-егеттәр өсөн - 70, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 50 грамм. Белгестәр иҫәпләүенсә, был күләм бик ҙур. Көнөнә 5 балғалаҡ, йәиһә 30 грамм шәкәр етә, ти улар. Шәкәр ҡулланыуҙы кәметеү йөрәк сәләмәтлеген яҡшыртып ҡына ҡалмай, диабеттан, теш ауырыуҙарынан һаҡлай. Нормаһы иҫәпләгәндә уның төрлө ризыҡтар составында булған күләмен дә иҫәпкә алырға кәрәк.

■ Байрамдар мәлендә артыҡ күп итеп һәм тәнгә ҡарай ашау организмға өҫтәмә ауырлыҡтар тыуҙыра. Диетологтар хатта был осорҙо байрам стресы тип атай һәм уны булдырмау өсөн анар емеше ашарға кәңәш итә. Анарҙа антиоксиданттар күп. Ғалимдар белдереүенсә, анар һуты ҡандағы шәкәр һәм холестерин күләмен нормала тота, йөрәк өйәнәге һәм инсульттан һаҡлай, гипертонияннан дауаланырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, анар һуты яман шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтата, анар ярлатыусыларҙың яралары тиҙерәк бөтәшә. Эдинбургтағы (Шотландия) Королева Маргарет университеты ғалимдары асыҡлауынса, 500 мл анар һутында фолий кислотаһының тәүлек нормаһы бар, ә был кислота етешмәүе депрессияға алып килеүе ихтимал.

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР

# ШУНДАЙ ОСОУСЫБЫҘ БАР!

**Республиканың Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатын тамамлаусылар араһында Рәсәй Федерацияһы Ҡоралды көстәре ветераны, СССР-ҙың атҡаҙанған осоусыһы, 2024 йылда 90 йәшен тултырған полковник Зөбәйер Сабир улы Исәнғолов айырым урын алып тора.**



З.С. Исәнғолов 1934 йылдың 26 авгусында Мәләүез районы Дәүләткол ауылында донъяға килә. Атаһы Сабир Хафиз улы 1943 йылда Сталинград өсөн барған алышта батырҙарса һәләк була. Һуғыш бөтөүгә бандиттар әсәһенен дә ғүмерен ҡыя, 4 бала үкһеҙ етем ҡала. "Артабанғы өс йыл һеңләләрем һәм ҡустым өсөн ҡайғы баҫҡан, аслыҡ-ялканғаслыҡ кисергән, ҡыш һыуығы елеккә үткән осор булды", - тип яҙа Зөбәйер ағай үҙенең хәтирәләрендә. Шуға ҡарамаҫтан, ул 1945 йылда башланғыс мәктәптең 4 класын тамамлай. Хәҙерге быуын ҡолағына элһен тип, уның үҙ ауыҙынан ишеткән һүҙҙәрҙе килтерәм: "Ә һуғыш алдынан тормош ниндәй яҡшы ине. Ятраҡкан, шәфҡәтле атай-әсәйем, ниғмәттәр менән тулы яңы һәм матур йортобоҙ бар ине... Ғөмүмән, ауылда беҙҙең кеүек бәләкәстәр өсөн дә тормош "гөрләп" торҙо. Колхоз яҡшы эшләй. Кешеләр етеш йәшәй, ғаиләләр бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөй, йыр яңғырай, түңәрәккә төшөп бейеүҙәр... Беҙгә лә, балаларға ла, аҙ генә әсетелгән бал тәмләп ҡарарға рөхсәт итәләр. Йырлайбыҙ, бейейбеҙ, бүләккә 3 һәм 5 тинлек баҡыр аҡсалар төшә... Ә 5 тингә лавкала беҙҙең балалар усына һыйырлыҡ кәнфит килә..."

Зөбәйерҙе 1948 йылда Стәрлетамаҡ балалар йортона урынлаштыралар, ул быны "язмыштың бәхетле боролошо" тип атай. Оҙаҡламай атайҙары һуғышта һәләк булған балалар өсөн асылған Өфөләге 5-се балалар йортона күсерәләр һәм ул 9-сы башҡорт урта мәктәбенең (артабан - 1-се мәктәп-интернат, хәҙер - Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернаты) 5 класына уҡырға бара. Беҙ Марат ағайым менән 1947 йылдан уҡ ошо интернатта тәрбиәләнә инек инде. Зөбәйер ағай ағайым Марат менән дуҫлашып китте. Һуңғараҡ Зөбәйер ағайҙың һеңлеһе Гөлсөм дә интернатҡа килде, ә Альберт ҡустыларын Өфө янындағы Чесноковка балалар йортона урынлаштыралар. Зөбәйер ағай бишенсене "отлично"ға тамамлай һәм Артекка йүнәлтмә менән бүләкләнә, ләкин, лагерға һуңлау сәбәпле, илебеҙ баш ҡалаһы Мәскәүҙә экскурсия төркөмөндә тороп ҡала. Мәскәүҙәге тәьҫораттарын бик ентекләп, еренә еткереп ҡуйын дәфтәренә яҙған ул. Шунда ул Совет авиацияһы көнөнә арналған сараны тамаша ҡыла, бәләкәй бер самолеттың һауала башҡа һыймаҫлыҡ тәкмәсләүен күреп, иҫе китеп аптырай, һоҡлана. Совет летчиктарының тыныс тормоштағы һәм һуғыштағы героик ғәмәлдәренә арналған фильмдар менән күптән таныш егеттең летчик-истребитель булыу хыялы тағы ла нығына, уға тынғы бирмәй башлай. Шунан ул Өфө аэроклубы түңәрәгенә яҙылырға ныҡлап ниәт итә. Беҙҙең мәктәптән тағы 67 егет унда яҙылырға теләк белдерә. Тик медицина комиссияһын өсәү генә үтә ала.

1954 йылда урта мәктәпте тамамлаған Зөбәйер Исәнғолов Өфө аэроклубы курсанты булып китә һәм 21 августа беренсе тапҡыр үҙаллы осош яһай. ЯК-18 самолетында осоу программаһын "отлично"ға тамамлап, сығарылыш имтихандарын уңышлы тапшырған егет Пенза өлкәһе Каменск ҡалаһындағы Хәрби-авиация мәктәбенә йүнәлтмә ала. 1956 йылда училищены тик "отлично" билдәләренә тамамлай.

Батайск ҡалаһында реактив МИГ-25 самолетында летчиктар әҙерләге үткәс, лейтенант Зөбәйер Краснодар крайындағы Кущевскийҙағы полкка эләгә. Артабан Мәскәү хәрби округының Клин ҡалаһындағы ПВО дивизияһында, Калининградка хәтле Балтик диңгеҙе буйы ил сиген һаҡлаған Ригалағы ПВО корпусында, Баку округы ПВО-һының Пирсағат ҡалаһындағы эскадрильяла хеҙмәт итә, өлкән лейтенант дәрәжәһен ала. 1962 йылда Зөбәйер Сабир улы капитан булып китә. Күп тә үтмәҫтән - икенсе, ә киләһе йылдың яҙында беренсе класлы осоусылыҡҡа имтихан тапшыра. 1964 йылда ПВО истребитель авиацияһының яңы авиатехникаһын өйрәнеү үҙәгендә әҙерлек үтә.

Тауыш тиҙлегенән дә шәп осорға һәләтле яңы СУ-9 истребителен тулыһынса үҙләштергән офицерҙы Төркмән ССР-ның Красноводск ҡалаһына йүнәлтәләр. Унда ул 13 йыл хеҙмәт итә: инструктор күнекмәләрен үҙләштерә һәм осоуҙар менән идара итә. Фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә. 1972 йылда Юғары офицерҙар курсында уҡый. Реактив техникаһында эшләү осоро икегә ҡабатланыуын иҫәпкә алғанда, уның дөйөм эш стажы 40 йылға етә. Ғаилә ҡоронда, пенсияға сығыу ваҡыты һуҡты, тигән ҡарарға киләләр. Шулай итеп, СССР-ҙың атҡаҙанған осоусыһы полковник Зөбәйер Сабир улы 1977 йылда отставкаға сыға. Артабан Харьковтың 23-сө һанлы училищеһында 12 йыл хәрби уҡытыу етәксеһе, мастер, уҡыу мастерскойҙары начальнигы һ. б. вазифаларҙа эшләй.

...Буласаҡ хәләл ефете менән Зөбәйер ағайҙың романы 1952 йылда беҙҙең детдомда башлана. Динә Зәкирова ҡустылары Радик һәм Земфир менән Өфөгә Ҡарлыман балалар йортонан күсерелә. Уларҙың Зөбәйер менән яҙмышы оҡшаш. Динәнең атаһы һәм оло ағаһы Харис та һуғышта һәләк булалар. 1943 йылда әсәһе донъя ҡуя, 6 бала үкһеҙ етем ҡала. Динә сит ил телдәре факультетын тамамлай, мәктәптәрҙә, училищеларҙа уҡыта, балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй.

Зөбәйер ағай демобилизациялланғандан һуң ғаилә Харьков ҡалаһында төпләнә. Яңы 1978 йылды яңы фатирҙа ҡаршылайҙар. 1986 йылда баҡсасылыҡ менән шөғөлләнә башлайҙар, ә 1998 йылда хутор алып (40 сутый емеш-еләк һәм 40 сутый йәшелсә баҡсалары), был эшкә башкөлләп сумалар. Шунан Мәскәүгә күсенәләр, яҙ хуторға ҡайтып эшләйҙәр. Ҡалған тормош ғүмер буйы шулай ыңғай барыр тип өмөтләнеп йәшәйҙәр. Тик йылдан-йыл хужалыҡ эштәрен атҡарыу ҡатмарлаша, ил бөлә, тарҡала, ағыулыҡ менән хәлдәр насарая бара. Хуторҙы һатырға мәжбүр булалар. Балалар йортонда йәшәгән саҡтан дуҫ Венер Гәлин (Мәскәүҙә йәшәй, ғалим, Рәсәйҙең Дәүләт премияһы лауреаты, орден кавалеры) тәҡдиме буйынса, Мәскәү янындағы Орехово-Зуево районында дача алып, ундағы өйҙә һәм баҡсаны яңыртып, йәшелсә-емеш үҫтерә башлайҙар. Үкенескә ҡаршы, 2010 йылдың майынан Исәнғоловтар тормошоноң яңы этабы башланды. 14 июлдә Динәнең мейеһенә ҡан һауа, ул телдән яҙа, уң яҡ кәүҙәһе бөтөнләй хәрәкәттән туҡтай. Ул 2013 йылда арабыҙҙан китте.

Нина ҡыҙҙары, Ленинградта институтты тамамлағас, нефь эшкәртеү заводының баш технологы булып эшләне, Салауат улдары атаһы һөнәрен дауам итеп, осоусылар училищеһын ҡыҙыл дипломға тамамлап, хеҙмәт урыны итеп Алыҫ Көнсығышты һайланы.

Алда иҫкә төшөргән Зөбәйер Сабир улының Альберт ҡустыһы Салауат нефть химияһы комбинатында эш башлай, армияла булғанда Мәскәү хәрби округында радиореле линияһын хеҙмәтләндерә. Хәрби әҙерлек отличнигы булараҡ, уны Мәскәү милицияһына эшкә саҡырып алалар. Бандиттарға ҡаршы ауыһыҙ көрәшкән намыҫлы егеттең ғүмерен шул уҡ ҡан дошмандары ҡыя. Гөлсөм һеңлеһе, беҙҙең интернатты тамамлағас, Татарстан балалары төркөмөндә Мәскәүҙәге Щукин театр училищеһына уҡырға инә. Диплом алғандан һуң, татар әҙәби теленең бөтә нескәлектәрен үҙләштереп, Ғәлиәсҡәр Камал исемендәге Татар дәүләт академтеатрында эшләй башлай. Татарстан һәм Башҡортостан Республикаларының халыҡ артисы исемдәренә лайыҡ була, орден һәм миҙалдар менән бүләкләнә.

Бына шундай шәхестәрҙе тәрбиәләне, тәрбиәләүҙе дауам итә был көндәрҙә һикһән йыллығын билдәләгән Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика Башҡорт гимназия-интернаты. Балалар йорто сағынан уҡ меңләгән етемде ысын кеше иткән, совет иленең донъяла бер ҡасан да ҡабатланмаҫ өлгөлө мөхитен булдырған уҡыу йортона мәңге рәхмәтлебеҙ.

**Эрнст ЮЛБАРИСОВ,**
**интернат-мәктәпең 1957 йылғы сығарылыш уҡыусыһы,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған нефтсеһе,**
**техник фәндәр докторы,**
**Рәсәй тау фәндәре академияһы академигы.**

✓ **"Улым, һин - ҡыйыу башҡорт! Рәхмәт, үҙеңде һаҡла", - командирҙың ошо һүҙҙәре һаман ҡолағында яңғырап торған һымаҡ ветеран-яугирҙың.**



ХӘТЕРЛӘП...

# ОЛАТАЙЫМ ДОҒАҺЫ ҺАҠЛАНЫ

**Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыуға быйыл 36 йыл тулды. Ил алдында хәрби бурысын намыҫ менән үтәп, орден тағып, иҫән-һау ҡайтҡан һалдат тураһында булыр һүҙем.**



"Ундағы яланғас тауҙарға, ҡамғаҡ үҫкән ҡомло далаларға, ҡолаҡ төбөндә һыҙғырып торған әсе елгә, көндөҙҙәрен ҡыҙҙырған эсегә, әтөндәрен үҙәк өҙгөс һыуыҡҡа өйрәнеп бөттөк ике йыл эсендә", - ти Нәфис Рәсүл улы. Заданиеға барған һайын олатаһы өйрәткән доғаны уҡып, беренсе көндән бер-берәһенә терәк булып, йыл ярым ҡурсалап йөрөткән иптәше Маратҡа ла ҡабатлап йөрөргә ҡуша ул изге һүҙҙәрҙе. Тик яуҙашын һаҡлай алмай. "Бер яуҙа, дошман пуляһы тейеп, ҡулымда йән бирҙе", - тип, ветеран-яугир тынып ҡалды һәм башын түбән эйҙе.

Нәфис Рәсүл улы Асылгужин Бөрйән районының Нөгөш (ул ваҡытта Ямаш) ауылында 1966 йылдың 9 майында донъяға килә. Ғаиләлә 7 бала үҫәләр. Малайҙарҙан иң олоһо булараҡ, барлыҡ иргеттәр эшен башҡара һәм атаһының беренсе ярҙамсыһы булып үҫә. Мәктәпте тамамлағас, училищеға тракторист һөнәрен үҙләштерергә уҡырға инә. Тик уҡырға насип булмай, көҙгә әрмегә саҡырыу ҡағыҙы килә һәм 1984 йылдың октябрь айында, һалдат шинелен кейҙереп, алып та китәләр. Тыуған ауылынан ситкә сығып йөрөмәгән, йүнләп урыҫ телен дә белмәгән егеткә бик ауырға тура килә. Өс ай Пензала уҡыу үткәс, Төркмәнстанға осалар, артабан - Афғанстан... Теүәл ике йыл афған ерендә хеҙмәт итергә тура килә. Өйгә, Бөрйәненә, 1987 йылдың мартында ғына ҡайтып инә. "Олатайымдың рухы фәрештә булып һаҡлап йөрөткәндер инде. Күпме дан егеттәрҙе юғалттыҡ", - ти ул. Олатаһы Уйылдан, данлыҡлы мулла, дауалаусы булған. Тыуған ил алдында тыныс шарттарҙа бурысын үтәргә тип киткән егеттәр, һуғышҡа барып керербеҙ, тип уйламағандарҙыр ҙа. Ә уларға, 18 - 20 йәшлек егеттәргә, ныҡ ҡоралланған тәжрибәле дошман менән алышырға, атакаға барырға, кәрәк саҡта иптәштәрен дә яу яланынан алып сығырға тура килә. Бына шундай батырлығы өсөн Нәфис Рәсүл улының күкрәгенә орден тағалар.

Май айының иҙмле бер көнөндә, разведчиктар артынан бер взвод һалдат заданиеға китә. Улар араһында Нәфис тә була. Ҡуйылған хәрби заданиены үтәйҙәр, тик ниндәй хаҡ менән... Ошо яуҙа Нәфис ҡаты яраланған командирын ут аҫтынан алып сыға. Уны госпиталгә оҙаталар. "Улым, һин - ҡыйыу башҡорт! Рәхмәт, үҙеңде һаҡла", - командирҙың ошо һүҙҙәре һаман ҡолағында яңғырап торған һымаҡ ветеран-яугирҙың. Ике йыл эсендә күп булғандыр инде тарихҡа инерлек ошондай хәлдәр, иптәштәренең, үҙенең дә батырлыҡтары, күргәндәре. Тик уға ла тыйнаҡлыҡ, сабырлыҡ, баҫалҡылыҡ, кәрәкмәгән ерҙә күп һөйләмәү хас. Был хәлде лә, орденды ниндәй батырлыҡ өсөн бирҙеләр, тигәс кенә, ҡыҫҡаса һөйләп бирҙе Нәфис Рәсүл улы.

Шулай взводта һалдаттар араһынан бер үҙе "Ҡыҙыл йондоҙ" ордены менән бүләкләнә, әрменән уны күкрәгенә тағып ҡайтып төшә. Ә 1988 йылда Юғары Советтан М.С. Горбачев ҡултамғаһы ҡуйылған "Воину - интернационалисту" тигән грамота һәм "От благодарного афганского народа" тигән миҙал тапшыралар. 2008 йылдан алып биш йыл һайын юбилей миҙалдары менән бүләкләйҙәр.

Нәфис Рәсүл улы әлеге ваҡытта Межгорье ҡалаһында йәшәй. Ҡатыны Мәнзүрә менән ике бала тәрбиәләп үҫтерҙеләр. Хәҙер биш ейән-ейәнсәргә олатай ул.

**Франгил ҒӘЛИЕВ.**
**Межгорье ҡалаһы.**

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# КИҪКЕНЛӘШЕҮ КӨТӨЛМӘЙ



**Рәсәй Фәндәр академияһының Рәсәй мәғариф академияһы президенты урынбаҫары Геннадий Онищенко белдереүенсә, һуңғы ваҡыттарҙа һауа температураһының тирбәлеп тороуы кеше организмының эске биоритмына тәьҫир итте. Шуның өсөн ҡышҡы осор тамамланғанға тиклем һәр кемгә үҙ һаулығына айырыуса иғтибарлы булыу кәрәк, сөнки тап ошо миҙгелдә теләһә ниндәй сирҙең дә ҡатмарланып китеү хәүефе бар.**

"Беҙҙең өсөн йыл циклында иң яуаплы осор етте. Календарь буйынса ҡыш тамамлана, уның менән бергә беҙҙең һалҡын ҡышҡы осорға килеп ингән организмыбыҙ көсһөҙләнә, сөнки әлеге глобаль температура тирбәлештәре беҙҙең биоритмдарҙы тамам бутаны. Шуның эҙемтәһе булараҡ, әллә ни әһәмиәтһеҙ күренгән сирҙәр ҙә ауыр тамамланырға мөмкин. Был осорҙа һаулыҡты айырыуса һаҡлау кәрәк: йоҡо һәм ял режимын тотоу, дөрөҫ туҡланыу кәрәк, шул ваҡыт бөтәһе лә һәйбәт буласаҡ",- тине Онищенко.

Грипп һәм ОРВИ эпидемик миҙгеленең тамамланыуы йылы ҡыш арҡаһында артабан дауам итер, тип көтөлмәнә лә, был осор үҙе генә лә һаулыҡ өсөн тиҫкәре фактор булып тора, тип өҫтәне академик.

Бынан алда ғына Роспотребнадзор Рәсәйҙә киҫкен респиратор вирус инфекцияһының бер аҙна эсендә 7,7 процентҡа артыуы һәм 267 мәктәптең, 87 балалар баҡсаһының карантинға ябылыуы хаҡында белдергәйне.

Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор билдәләүенсә, республикала грипп менән ОРВИ сиренең "ҙур булмаған кимәлдә икенсе тулҡыны" күҙәтелә, үсеш күрһәткесе - 11 процент. Барлыҡ 26 мең кеше сирләй, шуларҙың яртыһы тип әйтерлек 14 йәшкә тиклемге балалар.

Күбеһенсә гриптың А вирусы өҫтөнлөк итә, ләкин, ведомствола белдереүҙәренсә, тиҙҙән уны икенсе вирус алмаштырасаҡ. Эпидемия ахырын ғәҙәттә гриптың В вирусы тамамлай, ул шулай уҡ башҡа вирустарға оҡшаш: бронхит һәм пневмония менән хәүефле. Бынан алдараҡ республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының баш эпидемиологы, Республика клиник дауаханаһының баш табибы Азат Мөхәмәтйәнов белдереүенсә, грипп менән әлеге хәлдәр ҡыш ахыры өсөн ғәҙәти күренеш, сирҙең артабан киҫкен күтәрелеү ихтималлығы көтөлмәй.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ икенсе хат: "Сәнғәтте аңлау"

Сәнғәтте нисек аңларға өйрәнергә? Үҙеңде ошо аңлауһыҙ нисек камиллаштырырға? Бының өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк?

Мин әҙер яуаптар бирә алмайым. Ҡәтғи рәүештә раҫлап, бер нәмә лә әйткем килмәй. Әммә сәнғәтте ысынлап аңлау өсөн мөһим булып күренгән сифат - ул ихласлыҡ, ғәҙеллек, сәнғәтте танып-белеүгә асыҡ булыу.

Сәнғәтте аңларға тәү сиратта үҙ-үҙеңдән өйрәнергә кәрәк - үҙеңдең ихласлығыңдан.

Кемдер тураһында йыш ҡына шулай тиҙәр: уның тыуымыштан зауығы бар. Һис улай түгел! Әгәр зауыҡлы тип иҫәпләнгән кешеләргә иғтибарлабыраҡ ҡараһағыҙ, уларҙың барыһының да бер уртаҡ һыҙаты барлығын шәйләрһегеҙ: улар ҡабул итеүҙәрендә ғәҙел һәм ихлас. Күп нәмәгә нәҡ шунан өйрәнгәндәр.

Зауыҡ нәҫел буйынса бирелгәнен бер ҡасан да күргәнем юҡ.

Зауыҡ гендар буйынса тапшырылған сифаттар рәтенә инмәйҙер, тип уйлайым. Шулай ҙа зауыҡты ғаилә тәрбиәләй һәм ғаиләнән, уның интеллигентлығынан күп нәмә тора.

Сәнғәт әҫәренә ҡалыплашҡан "фекер", мода, дуҫтарыңдың йәки дошмандарыңдың күҙлегенән сығып ҡарарға кәрәкмәй. Сәнғәт әҫәре менән "күҙгә күҙ ҡарашып ҡалыу" мөһим.

Әгәр сәнғәт әҫәрҙәрен аңлау өсөн модаға, башҡаларҙың фекеренә, нәзәкәтле һәм нескә зауыҡлы булып күренергә маташыуға эйәрә башлаһағыҙ, тормош - сәнғәткә, ә сәнғәт тормошҡа биргән шатлыҡтан үҙегеҙҙе мәхрүм итәсәкһегеҙ.

Үҙегеҙ төшөнөп етмәгән нәмәне аңлауға һалышып, һеҙ башҡаларҙы ғына түгел, үҙегеҙҙе лә алдайһығыҙ. Һеҙ үҙегеҙҙе лә нимәлер аңланым, тип ышандырырға маташаһығыҙ, ә сәнғәт килтергән шатлыҡ - ул һәр шатлыҡ кеүек үк, эскерһеҙ.

Оҡшай икән - үҙегеҙгә лә, башҡаларға ла шулай тип әйтегеҙ. Тик үҙегеҙ аңлағандарҙы, бынан бигерәк аңламағанығыҙҙы, башҡаларға көсләп таҡмағыҙ. Абсолют зауыҡҡа, йәки абсолют белемгә эйәмен, тип иҫәпләмәгеҙ. Тәүгеһе сәнғәттә, икенсеһе фәндә булыуы мөмкин түгел. Үҙегеҙҙең һәм башҡаларҙың сәнғәткә ҡарашын ихтирам итегеҙ һәм бер аҡыллы ҡағиҙәне гел хәтерегеҙҙә тотоғоҙ: зауыҡ тураһында бәхәсләшмәйҙәр.

Был үҙ-үҙенә йомолоуҙы һәм теге йәки был сәнғәт әҫәрҙәренә булған мөнәсәбәтең менән генә ҡәнәғәт булыу, тигәнде аңлатамы икән?

Сәнғәт әҫәрҙәренә ҡарата мөнәсәбәтегеҙҙә тыныс ҡына ҡалырға ярамай, ә аңламағанығыҙ аңларға, аңлағаныңды тәрәнерәк белергә ынтылырға кәрәк. Ә сәнғәт әҫәрен аңлау һәр ваҡыт тулы булмай. Сөнки ысын сәнғәт әҫәренең байлыҡтары бөтмәҫ-төкәнмәҫ.

Башҡаларҙың фекеренә эйәрергә кәрәкмәй, әммә уларға ҡолаҡ һала белеү зарур. Әгәр сәнғәт әҫәре тураһындағы был башҡа фекер кире икән, ул бик ҡыҙыҡ түгел. Күптәр ыңғай баһалаһа - шул ҡыҙыҡ. Әгәр берәй рәссамды, сәнғәт мәктәбен мендәр аңлаһа, бөтәһе лә хаталы фекер йөртәтә, мин хаҡлы, тип әйтеүе үҙбелдеклелек булыр ине.

Әлбиттә, зауыҡ тураһында бәхәсләшмәйҙәр, әммә уны үҙеңдә лә, башҡаларҙа ла тәрбиәләйҙәр. Башҡалар аңлағанды, айырыуса ундайҙар күп булған осраҡта, аңларға тырышырға мөмкин. Күмәк кеше ниҙер оҡшай тип иҫбатлай, әгәр рәссам йәки композитор, шағир йәки скульптор киң билдәлелек яулаған һәм хатта донъя кимәлендә танылған икән, бөтәһе лә алдаҡсы була алмай бит. Ә шулай ҙа мода һәм яңы, "сит", бигерәк ҡатмарлы нәмәләргә ҡарата бер нисек тә аҡлап булмаған таныырға теләмәүҙәр була.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 24 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 23.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Д/ф "Так называемая Украина". [16+]
1.05 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Х/ф "Советник". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**2.45 Спектакль "Израненная судьба". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 25 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 23.35 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Лада" (Тольятти). КХЛ.**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.15 Спектакль "Между небом и землей". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**
**4.00 Телецентр. [12+]**

### 26 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Азамат Саитов. На стыке эпох. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ представляет… [12+]**
**2.30 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 27 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Натали и Александр". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.05, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Русская жена". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**16.45 Честно говоря. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**21.00, 4.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**

### 28 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Первый номер". [18+]
1.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
0.30 "Истории Большой Страны". [12+]
1.30 Х/ф "Я буду ждать тебя всегда". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**14.00 Ради добра. [12+]**
**14.20 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Аҫылйәр". [12+]**
**4.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**

### 1 МАРТА СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Влад Листьев. Улыбка на память". [12+]
11.10 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Час пик Влада Листьева". [16+]
14.30 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
15.05 Спецпроект. "30 лет вместе". "Последний герой". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Д/ф Премьера. "Голос поэта". [16+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Принц на красном велосипеде". [16+]
0.40 Х/ф "Моя идеальная мама". [12+]
4.06 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00, 19.00, 5.15 Весело живём! [12+]**
**9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном. [12+]**
**18.15 Легенды Урала. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Байыҡ представляет… [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (на баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**0.30 Концерт Айгуль Асадуллиной. [12+]**
**3.00 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 2 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Участок". Кинопоказ. "30 лет вместе". [12+]
16.40 Спецпроект. "30 лет вместе". "Русский проект". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 1.35 Х/ф "Путь к сердцу мужчины". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.55 "Наши. Военкоры". [12+]
12.25 Д/ф "Так называемая Украина". [16+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.19 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Весело живём! [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тамыр. 30 лет заряжаем сердца. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Тирмәкәй. [6+]**
**11.50 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**14.30 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 Радио Ашкадар: 15 лет в эфире. [12+]**
**18.30 Мегасело. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Вестник Газпромтрансгаз Уфа. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**0.45 Спектакль "Шестая жена И. Грозного". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.45 Башкирские каникулы. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Февраль - Март (Шәғбан - Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (25) дүшәмбе | 6:38 | 8:18 | 13:30 | 16:46 | 18:42 | 20:21 |
| 25 (26) шишәмбе | 6:36 | 8:15 | 13:30 | 16:48 | 18:44 | 20:24 |
| 26 (27) шаршамбы | 6:34 | 8:13 | 13:30 | 16:50 | 18:46 | 20:26 |
| 27 (28) кесе йома | 6:31 | 8:11 | 13:30 | 16:51 | 18:48 | 20:28 |
| 28 (29) йома | 6:29 | 8:08 | 13:30 | 16:53 | 18:50 | 20:30 |
| 1 (1) шәмбе | 6:26 | 8:07 | 13:30 | 16:55 | 18:52 | 20:32 |
| 2 (1) йәкшәмбе | 6:23 | 8:05 | 13:30 | 16:57 | 18:54 | 20:34 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

КЕМ АЛЫҠ!

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!



**Быйылғы йылдың беренсе яртыһына "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан түбәндәге уҡыусыларыбыҙ ошо матур китаптарға лайыҡ булды.**

**Дәүләкән** районы Сапай ауылынан Фәниә Дәүләтгәрәева, **Сибай** ҡалаһынан Нурзиә Ҡорманова, **Межгорье** ҡалаһынан Шәүрә Яҡупова, **Учалы** районы Мәскәү ауылынан Флүрә Садыкова, **Нефтекама** ҡалаһынан Морат Әхмәҙиев, **Салауат** районы Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, **Әбйәлил** районы Ҡужан ауылынан Ғәйфулла Хәйруллин, **Стәрлетамаҡ** ҡалаһынан Альберт Узбәков **- "Башҡорт ырыуҙары";**

**Стәрлетамаҡ** районы, Яңы Отрадовка ауылынан Р. Нуриева, **Учалы** районы Мәскәү ауылынан Л. Әхмәҙиева - **Сабир Шәрипов. "Һайланма әҫәрҙәр";**

**Салауат** районы Урмансы ауылынан Рәсимә Сафина, **Йылайыр** районы Йомағужа ауылынан Ринат Аҡҡужин, **Балаҡатай** районы Яңыбай ауылынан Риф Ҡыяметдинов **- Ғәлим Хисамов. "Шаҡай бураны";**

**Сибай** ҡалаһынан Хәлил Һөйөндөков, **Ишембай** ҡалаһынан Рафаэль Мөхәмәтов **- Ноғман Мусин. "Алдар батыр";**

**Нефтекама** ҡалаһынан А. Рәхмәтов, **Илеш** районы Юғары Йәркәй ауылынан Гөлсирә Мостафина, **Күгәрсен** районы, Үрге Мөрсәләй ауылынан Гүзәлиә Ҡотлогилдина, **Баймаҡ** районы Мерәҫ ауылынан Рәмил Юнысов **- "Башҡорт халыҡ ижады";**

**Баймаҡ** районы Темәс ауылынан Фәүзиә Ҡадирова, **Учалы** районы Наурыз ауылынан Миннур Байғарина, **Хәйбулла** районы Таштуғай ауылынан Рузәлә Рахманғолова **- Хикәйәләр, шиғырҙар. "Биҙәктәр";**

**Хәйбулла** районы Уфимский ауылынан Ғилминур Такалова, **Баймаҡ** районы Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов, **Күгәрсен** районы Хоҙайбирҙе ауылынан Вәсилә Әмирова **- Рәсүл Байгилдин. "Һай, түрәкәйгенәһе";**

**Дыуан** районы Иҫке Хәлил ауылынан Рәшиҙә Ғәйнуллина, **Учалы** районы Мәскәү ауылынан Сафура Әҙелйәнова, Бөйҙө ауылынан Гүзәл Бүләкова, Ишкенә ауылынан Хафаса Әлхәмова, **Нефтекама** ҡалаһынан Дим Әхмәҙиев, **Йылайыр** районы Юлдыбай ауылынан Тәнзилә Абдуллина, **Баймаҡ** районы Мерәҫ ауылынан Мәғрифә Кейекбаева, Икенсе Этҡол ауылынан Көнһылыу Сөләймәнова, Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Кәйепҡолов, **Хәйбулла** районы Садовый ҡасабаһынан Вәлимә Шаматова, **Шишмә** районы Дурасово ауылынан Венера Хайруллина, **Күгәрсен** районы Сәйетҡол ауылынан Миникамал Ғәйнуллина, Хоҙайбирҙе ауылынан С. Сәйетбатталова, **Әлшәй** районы Ҡармыш ауылынан Миниян Ғәбделмәнов, Ҡармыш ауылынан Люциә Аҙнағолова, **Әбйәлил** районы Елембәт ауылынан Фәрзәнә Шәмсетдинова, **Илеш** районы Түбәнге Йәркәй ауылынан Ғәлимә Ғәлиева, **Мәләүез** районы Арыҫлан ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, **Ишембай** районы Янрус ауылынан Хәмиҙә Усманова, **Стәрлебаш** районы Табылды ауылынан Айҙар Байгужин, **Көйөргәҙе** районы, Яманһары ауылынан Ләлә Батыршина, **Йылайыр** районы Сидоровка ауылынан Люциә Таһирова, Япарһаҙ ауылынан Рауил Вахитов, **Ейәнсура** районы Күгәрсен ауылынан Минзәлә Бикбулатова **- 2025 йылға "Башҡортса дини календарь";**

**Баймаҡ** районы Ишмырҙа ауылынан Радик Солтанғолов, Ишмөхәмәт ауылынан Сәфәр Ярмуллин, **Дыуан** районы Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева, **Йылайыр** районы Мәксүт ауылынан Ф. Мостафина, **Көйөргәҙе** районы Кинйәбай ауылынан Мәймүнә Сәғитова, Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, **Ишембай** районы Һайран ауылынан Риф Хәсәнов, **Ауырғазы** районы Мораҙым ауылынан Филарит Ҡусҡаров, **Учалы** районы Озерный ауылынан Нәкиб Әюпов **- Зөһрә Ҡотлогилдина. "Блокада".**

• Шулай итеп, был акциябыҙ 2025 йылдың икенсе миҙгеле өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу барышында ла үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы, аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр. Кемдәргә китаптар барып етмәгән, улар Өфөләге балалары, туғандары, таныштары аша Революцион урамы, 167/1 адресы буйынса урынлашҡан редакциябыҙҙан алдыра ала.

• **Беҙҙең сайт:** www.kiskeufa.ru
**Беҙҙең электрон почта:** kiskeufa@mail.ru

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

# РӘХМӘТ ҺҮҘЕ

Минең тормош иптәшем, балаларымдың атаһы, ейән-ейәнсәрҙәремдең олатаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт, Рәсәй агросәнәғәт комплексының почетлы хеҙмәткәре Рәүеф Дәүләт улы Сиражетдинов оҙаҡ ауырыуҙан һуң ошо көндәрҙә баҡыйлыҡҡа күсте. Уны ерләүҙе ойоштороуҙа ярҙам күрһәткәндәрҙең барыһына ла - БР Мәҙәниәт һәм Ауыл хужалығы министрлыҡтарына, Өфөнөң Совет район хакимиәтенә, Бөрйән районы хакимиәтенә, Бөрйән районы яҡташтар ойошмаһына, барлыҡ туғандарға, дуҫтарға, хеҙмәттәштәргә, беҙҙең ҡайғыны уртаҡлашырға, ҡәҙерлебеҙҙе һуңғы юлға оҙатырға килгәндәре өсөн оло рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ.

**Ҡатыны Рәзилә СИРАЖЕТДИНОВА.**

*БЕҘҘЕ ЯРАТҠАН ДУҪТАР*



*Баймаҡ районы Мерәҫ ауылының "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы (етәкселәре Ямантаева Минзәлә Ғәбит ҡыҙы) ағзалары ауыл биләмәһе эсендә генә түгел, район кимәлендә үткәрелгән сараларҙа ла әүҙем ҡатнашалар. Улар беҙҙең "Киске Өфө" гәзитенең дә тоғро уҡыусылары, дуҫтары.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 февраль "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+
**23 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев, А. Абушахманов), музыкаль комедия. 12+
**27 февраль "Әкиәт илендә мажаралар"**, (В. Коростылёв, Ф. Ғарипов), әкиәт. 12:00. 6+
**28 февраль "Ҡыҙ урлау"**, (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 февраль "Звезда Героя"**, (Ф. Әхмәдиев, О. Мусина, ), һуғыш осоро хроникаһы. 12+
**26 февраль "Аҡһаҡ"**, (М. Ғиләзев, Ф. Ғәрипов), драма. 12+
**27 февраль "Мөхәббәт хаҡы"**, (В. Афонин, Е. Сомова, Д. Черепанов), бер мөхәббәт тарихы. 16+
**28 февраль "Гарнир по-французски"**, (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 февраль "Ҡар бабай һәм ҡояшҡай"** ( А. Малахов). 0+
**27 февраль "Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 0+
**28 февраль "Два кота"** (О. Штырляева). 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 февраль "Пианист, уҡытыусы, аҡыл эйәһе"**, Аркадий Минков иҫтәлегенә конкурс йомғаҡтары буйынса гала-концерт. 12+
**25 февраль Илфак Смаковтың** яҡты иҫтәлегенә һәм тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе. 12+
**26 февраль "Еңеүҙе яҡынлатып"** Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының тынлы оркестры концерты. 12+
**28 февраль "Оркестр солисы"**, БР Милли халыҡ инструменттары оркестры концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**25 февраль "Тоғролоҡ"** (М.Ҡунафин, Л. Ниғмәтуллина), драма. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**22 февраль "Ҡорос"** (М.Ҡунафин), драма. 6+
**23 февраль "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев, А. Абушахманов), музыкаль комедия. 12+
**27 февраль "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**26, 27 февраль "Һинән - фатир, минән - ир"** (Н. Ғәйетбаев, Д. Нурғәлин), комедия-гротеск. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**23 февраль "Бишбармаҡ"** оркестры концерты. 12+
**25 февраль Иҙел Нурғәлиндың** концерты. 12+

## БР Милли музейы

**22 февраль "Өләсәй һандығының серҙәре"**, ғаилә шәмбеһе программаһы сиктәрендә. 15:00. 6+
**23 февраль** Ватанды һаҡлаусылар көнө айҡанлы хәрбиҙәр һәм хәрби хәрәкәттәр ветерандары өсөн асыҡ ишектәр көнө. 12+
**26 февраль "Малахит ҡумта"**, "Музей шаршамбыһы" акцияһы сиктәрендә. 14:00. 5+
**28 февраль "Стереотиптарға ҡаршы. Музей һәм йәштәр араһында диалог"**, йәштәр менән эшләү буйынса түңәрәк өҫтәл. 11:00. 16+

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ҮЛЕМҺЕҘЛЕК - ИЗГЕ ЭШТӘРҘӘ

**"Урал батыр" эпосы нигеҙендә ижад ителгән Өфө "Ау Yola" триоһының дебют альбомы күп милләтле Рәсәйҙең визит карточкаһына әйләнеүе ихтимал. Билдәле музыкант, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, "Арғымаҡ" этно-төркөмөнә нигеҙ һалыусы һәм солисы Ринат Рамазанов ошо проект тураһында тулыраҡ һөйләне.**



- "Ау Yola" башҡорт телендә үлтермә, урлама, өлкәндәргә хөрмәт ит, кеселәргә яҡла кеүек мәңгелек ҡиммәттәргә нигеҙләнгән "бөтә йыһан законлары, устав", "донъяуи ҡағиҙәләр йыйынтығы" тигәнде аңлата. Проект нигеҙендә тап ошо принциптар ята ла инде, - тине "Башинформ" хәбәрсеһенә Ринат Рамазанов. - Беҙ музыкаль альбом ғына түгел, ә донъялағы иң серле һәм боронғо эпостарҙың береһе - "Урал батыр"ҙан рухландырылған бөтөн шоу-мюзикл, интернет-проект тәҡдим итәбеҙ...

Музыкант әйтеүенсә, тәрәнлеге һәм йоғонтоһо буйынса "Махабхарата" һәм Гилғәмеш эпосы менән сағыштырырлыҡ әҫәр беҙҙе беҙҙең эраға тиклем XVII-XVIII быуаттарға, кешелектең инешенә күсерә. Сюжет үҙәгендә геройҙарҙың өс быуыны тарихындағы тормош һәм үлем, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, үлемһеҙлек темалары яҡтыртыла. Мәңгелек тормошҡа хөкөм ителгән Тарауыл ҡарттың аҡылы һәм Урал батырҙың васыяты тәрән мәғәнә аса: ысын үлемһеҙлек - изге эштәрҙә.

Традиция буйынса сәсәндәр тарафынан телдән тапшырылған "Урал батыр" эпосы тәүҙә музыка менән тығыҙ бәйләнгән була. Музыканттар был боронғо традицияны заманса яңғыраште дауам итә: синтезаторҙар гитара көйө менән үрелеп бара, ә традицион башҡорт инструменттары - ҡурай, ҡумыҙ, думбыра музыкаға ҡабатланмаҫ колорит бирә. Альбомдың һәр трегы-эпостың айырым бүлеге, ул оригиналь текст һәм заманса бейеү аранжировкаһы ярҙамында бирелә.

- Тыңлаусы риүәйәт донъяһына сумасаҡ, Аҡбуҙаттың күктән төшөүен ишетәсәк, ҡараңғылыҡ батшалығында Урал батырҙың үгеҙ менән алышын тояҫаҡ һәм герой менән бергә Көнсығыш һәм Азия музыкаль мотивтары менән яңғыратылған донъя буйлап мауыҡтырғыс сәйәхәткә юлланасаҡ, - тип һөйләй Ринат Рамазанов. - "Урал батыр" эпосын заманса интерпретациялау был уникаль әҫәрҙе популярлаштырырға, боронғо тарихҡа сумырға һәм Ер шарындағы барлыҡ кешеләр өсөн бөгөн дә актуаль булған "Ау Yola" мәңгелек ҡиммәттәрҙең тәрән мәғәнәһен аңларға ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

Альбомды ижад итеүселәр командаһында шулай уҡ халыҡ-ара "Илһам" конкурсында гран-при яулаусы, ТНТ-ла "Йырҙар" шоуында ҡатнашыусы, ҙур Рәсәй лейблдары менән хеҙмәттәшлек иткән йырсы, "Musume" проектының йөҙө һәм тауышы Адель Шәйхетдинова (вокал, гитара, домбра) һәм Top-30 djs russia-ға ингән билдәле Dj, "Maximum" (Мәскәү) радиоһында Electroshock радио-шоуын алып барыусы Руслан Шәйхетдинов (саунд-продюсер, клавишалар, бас-гитара, ҡыл-ҡумыҙ), музыкант, тауыш режиссеры Ruslan Sever. Ул заманса ритмдарҙы традицион инструменттар менән берләштергән проекттың үҙенсәлекле яңғырашы өсөн яуаплы.

Проекттың маҡсаты - "Урал батыр" башҡорт эпосын үҙенсәлекле интерпретациялау аша йәштәр иғтибарын Рәсәйҙең бай мәҙәни мирасына йәлеп итеү. Проект әҙәби ҡомартҡыны һәм уға бәйле урындарҙы популярлаштырыуға, гәҙеллек, ғаилә традициялары, патриотизм һәм толерантлыҡ ҡиммәттәрен тәрбиәләүгә, ижад призмаһы аша Рәсәй халыҡтары мәҙәниәтенең байлығын һәм төрлөлөгөн күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠЫҘҘАР БЕҘҘЕ НИСЕК ҺАЙЛАЙ?



**Беҙ, ир-аттар, йыш ҡына "Буласаҡ кәләштәребеҙҙе үҙебеҙ һайлап алабыҙ" тип хаталанабыҙ. Йәнәһе, кәпәс менән һуғып ҡарайбыҙ ҙа, кемеһе ҡоламай, шул һинеке. Һуҡмай тор әле! Әгәр ҙә ҡыҙ кеше, һиңә кейәүгә сыҡмайым, ти икән, ней нәмә эшләй алабыҙ инде? Дөрөҫө шул: ҡыҙҙар беҙҙе һайлай.**

Бал ҡорттары һәм бөркөттәр донъяһы был йәһәттән бик ҡыҙыҡлы. Инә бал ҡорто умартанан сығып, һауаға тура күтәрелә, ҡайһы ата ҡорт уны ҡыуып етә ала, шуның менән ҡауыша. Ҡалған ата ҡорттар юҡ ителә. Тимәк, көсһөҙҙәрҙең йәшәргә, тоҡом ҡалдырырға хаҡы-хоҡуғы юҡ. Был ҡанун бик аяуһыҙ, ҡаты, әммә ошо юл менән бал ҡорттары тоҡомон яҡшырта.

Инә бөркөт иһә ағас ботағын тырнаҡтарына эләктерен, һауаға күтәрелә. Шунан уны ысҡындыра. Парлыҡҡа дәғүә итеүсе ата бөркөт ботаҡты, ергә төшмәҫ элек, тотоп алырға бурыслы. Был хәл бер нисә тапҡыр ҡабатлана, инә бөркөт һынауҙы уңышлы үтә алғаны менән генә парлаша.

Урынлы һорау тыуа: ни өсөн ул себештәренең буласаҡ атаһын тик ошо юл менән һынай икән? Себештәрен осорға өйрәткәндә кәрәк икән ата бөркөттөң был һәләте. Тик ата-инәһе килтергән ризыҡ менән генә ояла туҡланып ятыусы себештәргә ризыҡ бирмәй башлайҙар бер саҡ. Аслыҡ үҙенекен итә. Етмәһә, ата бөркөт менән инә бөркөт килтергән ризыҡты оя янындағы ағас ботағына ултырып, үҙҙәре ашарға керешә. Себештәрен ошо рәүешле тамшандыра улар. Себештәр, билдәле, уларға ынтыла, шунан ояның ситенә сығып, ергә ҡолай башлай. Шул саҡта ата бөркөт таш кеүек ергә шыҡыйып, себеше ергә төшөп йәнселмәҫ элек һиртына ултыртып алып, кире ояға алып менә. Осорға өйрәнеүҙең тәүге күнекмәләре ошо рәүешле башлана...

Һе, ҡыҙыҡ, ә ҡыҙҙар беҙҙе нисек һайлай икән? Ботинкабыҙға ҡарапмы, әллә ҡулыбыҙҙағы "текә" смартфондарға күҙ һалыпмы?..

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН БАШЛЫ ҠАТЫНДАН...

## баҡыр башлы ир яҡшы

Баҡмаһаң - бала китер, ҡарамаһаң - ҡатын китер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир өсөн ҡайһы саҡта ҡатынының теле дошманыныҡынан да хәтәрерәк була.

**(Себастьян Брант).**

Турғай ҡанаты менән бөркөт һымаҡ оса алмаҫын...

**(В. Генри Хадсон).**

Ҡатын-ҡыҙҙың ысын дәрәжәһенә баһа бирер өсөн... уның матур булыуҙан туктауын көтөргә кәрәк.

**(Гибер).**

Кеше ерҙә бай булыр өсөн түгел, бәхетле булыр өсөн йәшәй.

**(Стендаль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һәр кем кеүек, был ҡыҙ ҙа бәхетле булырға ынтыла, әммә ул бәхеттең асылы ниҙә икәнен аңлап етмәй. Шуға ла, кейәүгә сығыр ваҡыт еткәс, үҙен һораткан егеттәр араһынан йөрәгенә яҡын булғанын түгел, ә, үҙе фекерләүенсә, донъя көтөрҙәйен һайлай. Шулай һайлап алған йәре менән йәшәп ятҡанда, тормошонда бер ҙә бәхет ләззәте булмағаның аңлап ҡала ҡатын. Һәм теге йөрәгенә яҡын булған егетте иҫенә төшөрә. Ул егетте табырға һәм үҙен дә, егетте лә бәхетле итергә, тигән уй килә быныҡ башына.**

**Ә ул егет күптән өйләнгән һәм үҙенең бәхетле ғаиләһе усағында тыныс ҡына йәшәп ятҡан була. Тыныс ҡына бәхет булмай, ул һүнеүгә, юҡҡа сығыуға дусар, тип иҫәпләгән ҡатын егеттең тормошона дауыл булып барып инә һәм уны башҡа ҡатын ҡулынан тартып алырға, үҙенеке итергә тигән маҡсатын тормошҡа ашырырға маташа. Ләкин йөрәгендә был ҡатынға булған хистәре күптән һүнгән егет уларҙы ҡабат өрөп яндырыу мөмкин түгел тип иҫәпләй. Тик был фекерен ул ҡатындың күҙенә тура ҡарап әйтә алмайыраҡ тора башта. Ә тегеһе аңларға теләмәй, егеттең күңелен яңынан яулау өсөн бар алымдарҙы ҡуллана. Ҡатындың ҡыланышы уның тормошон емерергә мөмкин икәнен аңлағас, егет уға ҡарата булған хистәрен яңыртра алмаясағын әйтергә мәжбүр була. Ҡатын аҡылдан яҙа һәм тормошта нимә теләгәнен, нимәгә ынтылғанын, бәхет тигән төшөнсәне - барыһын да онота. Хоҙай уны аҡылһыҙлығы өсөн шулай хөкөм итә...**

**Шуның өсөн, йөрәгеңә аҡылһыҙлыҡты индергәнгә тиклем, аҡылһыҙлыҡ асылыңа әйләнмәҫме, тип уйлап ал башта..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
20 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 347

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.